ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

30-6 апрель - май (алағарай - һабанай) 2022

№17 (1007)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Хеҙмәт кешеләре...**

һанланһын һәм баһаланһын!



6

**Ялҡауҙар сәбәп эҙләй,**

йүнселдәр мөмкинлек таба



8-9

**Геройҙар беҙҙең арала**



11

**Был йортта...**

хеҙмәт баһалы ла, хөрмәтле лә



13

**ТВ-программа** 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ, 2022 йылдың икенсе яртыһы өсөн ПР905 индексл "Киске Өфө"гә 757 һум 80 тингә яҙыла алаһығыҙ. Был мәғлүмәтте йәнәшәгеҙҙәге дуҫ-иштәрегеҙгә, туғандарығыҙға ла еткерһәгеҙ ине. Әйҙәгеҙ, "Киске Өфө"гә дәррәү яҙылып, гәзитебеҙҙең быйылғы 20 йыллыҡ юбилейына бер бүләк эшләйек!***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### ? Хеҙмәт ғали йәнәптәре үҙенең бәҫһеҙлеген тойоп, беҙҙең тормошобоҙҙан китеп бара түгелме?

***Сынтимер БАЯЗИТОВ, Өфө күп профилле колледж директоры:*** Беҙҙең хеҙмәткә ҡарашыбыҙ борон-борондан быуындан-быуынға күсеп килгән. Беҙҙе, совет осоронда тыуып үҫкән, яңы ғына мәктәптә уҡып йөрөгән уҡыусыларҙы, һәр ваҡыт хеҙмәт менән тәрбиәләнеләр. Беҙ ул ваҡытта иртәнсәк мәктәптә уҡып, дәрестән һуң ололарға ярҙам итә торғайныҡ. Ололарға барып, йорттарында, ихаталарында ярҙам итеү оло бурыс итеп һанала ине. Әлбиттә, заманаһына күрә, ундай ғөрөф-ғәҙәттәр онотолған хәҙер. Ләкин хеҙмәткә ҡараш, йәш быуынды эшкә өйрәтеп тәрбиәләү мотлаҡ һаҡланырға тейеш. Сөнки, бер яҡтан, үҫеп килгән быуын үҙе ынтылған һөнәрен үҙләштереп, ғүмерен бағышлар хеҙмәт юлын һайлап алырға тейеш, икенсе яҡтан, хеҙмәтһеҙ тормош алға бармай. Хеҙмәткә тейешле иғтибар бүленмәһә, үҫеп килгән быуын һәм урта йәштәгеләр ошоно төшөнмәһә, үҫеш булмаясаҡ. Әтормош үҫеш менән генә алға бара. Бер-береңә булған матур мөнәсәбәт, берҙәмлек, алда торған пландарҙы тормошҡа ашырыу хеҙмәткә нигеҙләнә, хеҙмәт менән үҙеңдең баһаңды күтәреп, хеҙмәт менән үҙең йәшәгән республиканы, иленде алға әйҙәп була.

Быға тиклем, бер ун йыллап тирәһе элек, юғары белем алыу культы һәр бер үҫеп килгән быуында ныҡ көслө булды. Улар ҡаланы, ауылдамы уҡыуына ҡарамаҫтан, мәктәпте тамамлағас та юғары белем алырға ынтылды. Заманына күрә был ынтылыш дөрөҫ тә булғандыр. Ә хәҙер беҙҙең урта һөнәри белем биреү йорттарына ҡараш үҙгәрҙе. Ҡайһы берәүҙәр, Берҙәм дәүләт имтихандарын тапшыра алмағандар ғына ошондай уҡыу йорттарына бара, тип яңылыша, был дөрөҫ түгел. Дәүләт тарафынан да, халыҡ тарафынан да иғтибар артыуын йәш быуындың тәү сиратта һөнәри белем алыуҙы һәм артабан шул үҙ иткән йүнәлештә камиллашыуҙы маҡсат итеүенә бәйләргә кәрәк. Шуның өсөн беҙҙең уҡыу йорттарына бик күпләп 9-сы синыфтан һуң күңеле ятҡан һөнәренә эйә булыу өсөн уҡырға киләләр. Улар үҙ урынын табырға, һайлап алған һөнәренә эйә булырға, лайыҡлы хеҙмәт юлы үтергә теләп килә. Нишләргә, ҡайҙа барырға белмәй йөрөгәнлектән түгел. Быны колледждарҙа бер урынға дәғүәселәр һаны унар кеше булыуы ла дәлилләй. Тимәк, йәштәр араһында хеҙмәт төшөнсәһенә һалынған мәғәнәне аңлау, урта һөнәри белем алыуға мөнәсәбәт, дөрөҫ һөнәр һайлауҙы маҡсат итеү йәһәтендә бөтөнләй яңы ҡиммәттәр барлыҡҡа килде. Шулай булғас, хеҙмәт тормошобоҙҙан бер ҡайҙа ла юҡҡа сыҡмай, хатта сыға ла алмай. Бер һөнәргә лә, көс һалмайынса, эшләп ҡарамайынса, тәртибен үҙләштермәйенсә, эйә булып булмай. Йәштәр быны аңлай, хеҙмәтенә ҡарап абруй яуланыуын да белә, үҙаллы тормошҡа эшкә өйрәнеп баҫырға теләктәре ҙур.

## ШАҒИР ҺҮҘЕ

# ХЕҘМӘТКӘ ДАН ЙЫРЛАЙБЫҘ!

**Беренсе май - Яҙ һәм хеҙмәт байрамы булғас, гәзит уҡыусыларыбыҙға ошо датаға, хеҙмәткә, баҫыу хеҙмәткәрҙәренә арналған шиғырҙар тәҡдим итке килде. Тик... ундай шиғырҙарҙы үткән заман әҙиптәре китаптарында ғына таба алдыҡ.**

**Күтәрегеҙ, дуҫтар, баҫыу киңлектәрен,**
**Бәрхәт һымаҡ булып ятһын ерҙең тәне.**
**Йыр шикелле шыма барһын эштәрегеҙ,**
**Шул байрамда орден алһын күптәрегеҙ.**
**Гөрләтегеҙ, ҡыр күкрәген төндә, көндөҙ -**
**Биҙәр Геройҙың күкрәген Алтын йондоҙ, - тип яҙа Әкрәм Вәли. Уны һәм уның замандаш шағирҙарын Хеҙмәт ғали йәнәптәре ҡалай илһамландырған! Ә нињә хеҙмәт, игенсе темаһы хәҙергеләрҙең ижадында сағылыш тапмай икән, тигән һорау ҙа тыуып ҡуйҙы. Ә шулай ҙа... Салауат Әбүзәровта таптыҡ ауаздаш шиғырҙы. Бына ул:**



### Баҫыу бөркөттәре

*Ер күкрәгенә баҫып тора хужа,*
*Беләгенә күсә ерҙең көсө.*
*Ҡамыр һымаҡ күбеп ятҡан тупраҡ*
*Бөркә төҫлө уға икмәк еҫе.*
*Усындағы кескәй бөртөктәргә*
*Ил ҡеүәте, ил ҡөҙрәте һыйған.*
*Халҡыбыҙҙың бөйөк хазинаһын*
*Алтын кеүек ул бөртөкләп йыйған.*
*Ер ҡуйынына төшкән был орлоҡтар*
*Ашлыҡ булып тиҙҙән шытып сығыр.*
*Һуҙылып ҡалған бураҙналар, гүйә,*
*Йәшәү тураһында бөйөк шиғыр.*
*Улар үткән юлда һибелеп ҡала*
*Кешелеккә бәхет бөртөктәре.*
*Киң ҡырҙарҙа ҡанаттарын кирә*
*Игенселәр - баҫыу бөркөттәре!*

**Салауат ӘБҮЗӘР.**

12+

***✓ Хәҙер хеҙмәткә мөнәсәбәт үҙгәрҙе, ерҙең ҡәҙере китте. Әле бына һеҙгә һөйләйем, күҙҙәргә йәш төйөлә. Ер һатып байый башланылар, ниндәй хеҙмәт ти ул! Мал бөттө халыҡта.***



## ШАҒИР ҺҮҘЕ

### Иң тәмлеһе - минең икмәгем

*Шулай тура килде, тормошомда*
*Рәхәт кенә йәшәп үҫмәнем.*
*Мин икмәкте ете йәштән*
*Баҫыу киңлегендә еҫкәнем.*
*Мин өйрәндем ерҙе, шахталарҙа*
*Ауыр ҡатламдарҙы аҡтарып.*
*Диңгеҙҙәрҙе иңләп-буйлап гиҙҙем,*
*Штормдар аша юл ярып.*
*Тормош - минең өсөн уҡыу йорто,*
*Профессорым - һөйгән хеҙмәтем.*
*Бына шуның өсөн иң тәмлеһе,*
*Иң тәмлеһе - минең икмәгем.*

**Хөснулла ТҮЛӘКӘЕВ.**

### Эш таңы

*Күр ана, эшсе, һиңә*
*Балҡый матур, ал эш таңы!*
*Уның артында*
*Рәхәт тормош,*
*Бәхет, аҡ көн тағы.*
*Ал сүкеш, балта, урағың,*
*Ҡаршыла һин эш менән,*
*Яҡтыраҡ балҡыр тағы таң*
*Эш менән, ныҡ көс менән.*
*Ҡып-ҡыҙыл нурҙар сәсеп, бер*
*Эш таңы атҡан ваҡыт.*
*Тор, туған, һал бар көсөңдө,*
*Тартынып ҡалма ятып!*
*Ысын бәхет, матур йәшәү*
*Бирә һиңә тик эш көнө.*
*Эшкә күңел, эшкә ныҡлыҡ,*
*Эшкә бир һин көс кенә!*

**Төхфәт ЙӘНӘБИ.**

## БЫЛ АЙҘА

**Йыл сылбырын 12 мунсаҡтан торған муйынса тип күҙ алдына килтергәндә, май айы шуның аҫылдарҙан-аҫыл, ҡояштың иң сағыу нурҙарын үҙендә туплаған зөмрәт-йәшел зөбәржәте булыр ине, буғай. Оҙон ҡыштан ҡорошҡан күңелдәрҙе яҙып, тындарҙы иркенәйтеп, иркә ҡояшы менән йылыһына сорнаусы бер генә мәл бит ул - һабанай. Фенологтар уны яҙ ахыры - йәй башы тип тә йөрөтә. Күҙ алдында ер йәшәрә, ағастар ыуыҙ ғына япраҡтарға төрөнә, ә ай урталарына емеш-еләк ағастары һәм ҡыуаҡтары болоттай аҡ сәскәгә күмелә. Һандуғас моңон түгә, кәкүк саҡыра. Ҡыр йәнлектәре ҡар тотҡононан арынып, ниһайәт, йәшеллеккә аяҡ баҫа, уларға аҙыҡ табыу еңелләшә; ҡыш буйына тар кәртәлә тороп зарыҡҡан йорт хайуандары ла иркенлеккә, болонлоҡҡа ашыға: һутлы үләнгә ҡаҙала.**



# ЯҘ АХЫРЫ - ЙӘЙ БАШЫ

Тәбиғәт тантана иткән был осорҙоң тотҡарлыҡһыҙ ғына йәйгә ялғанып китеүе күп йәһәттән һауа торошона бәйле, әлбиттә. Ғәҙәттә майҙың ямғырлы һәм һалҡынсараҡ килеүе маҡтала, сөнки көндәр эҫе торһа, тупраҡ кибә, дым етешмәй һәм был уңыш яҙмышына йоғонто яһай. "Май һалҡын булһа, ас булмаҫһың", ти бит халыҡ аҡылы. Ә бына синоптиктар ниҙәр вәғәҙәләй һуң? Айҙың тәүге яртыһында, ысынлап та, һалҡынса һауа температураһы, урыны менән ямғырҙар күҙәтелер, ти улар; ә икенсе яртыһында ай Азия тарафынан иҫкән йылы һауа тәьҫирендә ысын йәйгесә климат торошона күсер. Һабанайҙа тәүге күкрәү, йәшенле ямғырҙар башланыр. Иртә күк күкрәһә, йәй ямғырлы булыр тигән һынамыш бар. Ә бына, ғәҙәттә, йәй ҡалҡа торған атмосфера күренеше - йәйғор көйәнтәһе Өфөнөң Ҡариҙел йылғаһы өҫтөндә апрель баштарында уҡ эленеп торҙо. Фенологтар ҙа, астрологтар ҙа быны яҡшы билдә тип, тик изгегә, яңырыуға юрай. Амин, ни булһа ла, яҡшыға булһын, бөтәбеҙ ҙә шуға өмөт итеп йәшәйбеҙ.

Ә һабанайға беҙ быйыл өс ҡат "алтын ишек" аша инәбеҙ, бында ла бер ғилләә барҙыр һымаҡ. Беренсе "ишектә" Яҙ һәм Хеҙмәт байрамы **(1)**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### ? Хеҙмәт ғали йәнәптәре үҙенең бәҫһеҙлеген тойоп, беҙҙең тормошобоҙҙан китеп бара түгелме?

***Тимерғәзим УСМАНОВ, Ҡырмыҫҡалы районы, хаҡлы ялда:*** Беҙ атай-әсәйҙәрҙән күреп, улар тәрбиәһендә үҫтек. Ҙурая башлағас, тәүге хеҙмәт тәрбиәһен дә уларҙан алдым. Атайым Әһелулла ҡартатайымдың барлыҡ байлығы иҫәбенә колхоз ҡорған кеше ине. Уға бүтәндәр ҙә килеп ҡушылып, Әлшәй районында "Ҡыҙыл байраҡ" тигән алдынғы колхозға нигеҙ һалғандар. Атайым 30 йыл буйына шунда рәйес булып эшләне. Мине 5 йәшемдән үҙе менән кырандаҫҡа ултыртып, күсер урынына йөрөттө. Уның нисек эшләгәнен, халыҡ менән нисек һөйләшеүен, хәстәрләүен күреп, һеңдереп үҫтем. Унынсы синыфты тамамлаған йылда, икәүләп бесән сабып йөрөгәндә, "Артабан ҡайҙа уҡырға бараһың?" тип ҡыҙыҡһынды атайым. Быға тиклем һорағаны ла булманы. Мин: "Гармунда уйнарға өйрәндем, йырлайым, бейейем, артисҡа уҡырға барайым да ҡуяйыммы икән?" - тигәйнем, шундай итеп бер ҡараны, ҡарашынан йығылып китерҙәй булдым. "Ҡартатайыңдың байлығын халыҡты туйҙырыуға тотоноуҙы дауам итергә тейешбеҙ, бирермен мин һиңә артисты", - тине.

Ул ваҡытта институтҡа уҡырға инер өсөн 3 йыл хеҙмәт стажы кәрәк ине, шуға башта Бәләбәйҙә техникумда механик һөнәрен үҙләштереп ҡайттым, шунан 3 йыл әрмелә хеҙмәт иттем, артабан институт тамамлап, колхозға баш механик булып эшкә килдем. Сама менән 3 йыл тирәһе эшләгәс, мине ҙур колхозға рәйес итеп тәғәйенләнеләр. Ул саҡта 28 йәштә инем, "Союз" колхозына ингән 14 ауылда, 27 мең гектар ерҙә, халыҡ мәнфәғәтен ҡайғыртып эшләргә тотондом. Һалам башлы өйҙәрҙе бөтөрттөм. Тәүҙә халыҡҡа кәрәкте хәстәрләйем, шунан ғына унан "Ниңә эшләмәйһең, ниңә бригадирҙы тыңламайһың?" тип һорарға хоҡуғым барлығын тойҙом. Бөтәһе 28 йыл колхоз рәйесе булдым.

Ул йылдарҙа май байрамдарын бик күркәм итеп, оло тантана, хеҙмәт кешеһен тәбрикләү көндәре булараҡ ойоштороп үткәрә торғайныҡ. Беренсе майҙа барса халыҡ йыйылып сығып, тирә-йүнде таҙарта, кәртә-ҡура тирәһен матурлай ине. Ә 9 май - Еңеү көнөндә демонстрацияға сыға, иң алда пионерҙар, комсомолдар, улар артынан бөтә орден-миҙалдарын тағып, Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары сафҡа баҫа, иң артта ғәм халыҡ теҙелеп урамдарҙан үтә. Шунан 4-5 машина булып тейәлеп, барыһы ла тәбиғәт ҡосағына матур ойошторолған байрамға йыйыла, унда һәр кемен маҡтап, аралашып, ял итеп ҡайта инек. Беҙ һәр ваҡыт хеҙмәтте беренсе урынға ҡуйҙыҡ, эшләгән кеше үҙенең хеҙмәтенән шатланып йәшәне. Мин хаҡлы ялдан һуң да 80 йәшкә тиклем эшләнем, хәҙер 82-не тултырып, шәхси кәсебемде кесе улым ҡарамағына тапшырһам да, йөрәк тынғы тапмай, үҙебеҙҙең мең ырыуы йәштәренең тәрбиә-тәртип, иманын ҡайғыртыу юлындамын.

Әлбиттә, хәҙер хеҙмәткә мөнәсәбәт үҙгәрҙе, ерҙең ҡәҙере китте. Әле бына һеҙгә һөйләйем, күҙҙәргә йәш төйөлә. Ер һатып байый башланылар, ниндәй хеҙмәт ти ул! Мал бөттө халыҡта. Беҙҙең төбәктә Рәхимов ваҡытында колхоздарҙы ҡапылдан бөтөрмәйенсә һаҡлап килдек, тик был үҙгәрештәргә әҙер булмай сыҡтыҡ. Шул мәлдә ауыл советтарына тапшырырға кәрәк булған да бит колхозсыларҙы. Хәҙер фермерҙарға ҡалды көн, ләкин бер кеше бөтә илде туйындыра аламы ни? Беҙ бит бөтә ғәм халыҡ менән берҙәм эшләй, үҙебеҙҙе ҡарай, илде тәьмин итә инек. Бер кем эшһеҙ ятманы. Ә бөгөн "хеҙмәт кешеһе" тигәнгә аптырайҙар. Ҡайҙа ниндәй эш таба, шунда үҙ көнөн үҙе күреп йәшәй инде ир-егеттәребеҙ. Күптәре ғаиләләрен ташлап, Себергә китеп бөттө. Ирһеҙ ғаилә ғаиләме инде ул? Ата-әсәһе өйҙә булмағас, балаға ниндәй тәрбиә бирелһен? Быларҙың барыһын да уйлай башлаһаң, уйылып китерлек. Халыҡтың тамағы туҡ, өҫтө бөтөн һәм көн дә барыр эше булһа ғына киләсәккә ышанысы тыуа. Ошоно аңлап, хәлдәр үҙгәрһә ине ул...

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостандың Һаулыҡ һаҡлау министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, һуңғы тәүлектә 144 сирле асыҡланған, пандемия башланғандан алып бөтәһе 285 467 кеше ауырыған. Әлеге ваҡытта 154 кеше стационарҙа дауалана. Ә 746 кеше амбулатор шарттарҙа сир менән көрәшә. Һуңғы тәүлектә 112 кеше һауығып сыҡҡан (пандемия башланғандан бирле бөтәһе - 278 947). Тәүлек эсендә 4 сирле вафат булған.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Баймаҡ районында урынлашҡан Талҡаҫ күленә һаҡлана торған биләмә статусы бирҙе. Документҡа ярашлы, күл биләмәһендә файҙалы ҡаҙылмалар эҙләү һәм сығарыу, быраулау, шартлатыу һәм тау эштәрен башҡарыу, киптереү һәм гидромелиорация, электр тапшырыу линиялары һәм башҡа коммуникациялар һалыу, ҡалдыҡтар ташлау, шулай уҡ һунарҙың бөтә төрҙәре тыйыла. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Талҡаҫ күле 2021 йылдың 15 октябрендә тәбиғәт ҡомартҡыһы тип танылды.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә шәмбе өмәһендә ҡатнашҡандарҙың барыһына ла рәхмәт белдерҙе. "Ял көндәре әүҙем үтте. Ҡалаларҙа һәм ауылдарҙа ағастар ултырттыҡ. "Йәшел Башҡортостан" акцияһы барышында 85 мең ағас һәм ҡыуаҡ ултыртылды. Шуның 14 меңдән ашыуы, алдан һөйләшкәнсә, бейеклеге 2,5 метрға еткән ағастар. Башлыса тематик аллеялар ултырттыҡ. Республикала "Йәшел Башҡортостан" акцияһы ғәҙәттә йылына ике тапҡыр уҙғарыла, экологик проекттың яҙғы этабы 23 апрелдә башланды, 10 майҙа тамамлана", - тине Радий Фәрит улы.

✓Валентин Солодовник Башҡортостан Башлығының патриотик тәрбиә биреү мәсьәләләре буйынса кәңәшсеһе итеп тәғәйенләнде. Был хаҡта республика Башлығы Радий Хәбиров хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә белдерҙе. "Уны барығыҙ ҙа беләһегеҙ. Валентин Николаевич Солодовник - майор, Өфө ҡалаһының 3-сө разрядлы гарнизоны Хәрби комендатураһының хәрби коменданты, Сүриәләге хәрби хәрәкәттәр ветераны, хәрби төркөм менән махсус бурыстарҙы үтәгән", - тине Башҡортостан Башлығы.

✓ ***Кеше хеҙмәт менән, эшкә ҡарашы, оҫталығы менән баһалана. Уҡыусы икән, нисек уҡый, төбөнә төшөнөп етәме, тип баһалайбыҙ. Эш кешеһе икән, иңенә һалынған бурысты теүәл үтәйме, юҡмы, сифатлы эшләйме, тип тикшерәбеҙ.***

ҡаршылай беҙҙе. Беренсе май байрамы элекке кеүек шаулап-гөрләп үтмәһә лә, флагтар, лозунгылар тотоп, урамдарға сығыусы энтузиастар бар әле. Быйыл да шулай булыр, тик улар сафында күберәк ябай хеҙмәтсәндәр, эшсе халыҡты күрге килә, сөнки бөгөн тап улар фиҙаҡәр хеҙмәт өлгөләре менән санкцияларға ҡаршы тупланыусы, ил иҡтисадын, сәнәғәтте тергеҙеүсе төп көс булыуҙарын күрһәтергә, донъяға танытырға тейеш.

Икенсе "ишек" - мосолман донъяһында әһәмиәте яғынан Ҡорбан ғәйетенән ҡала икенсе урында торған Ураҙа байрамы **(2)**. Иҫән-һау ураҙаны атҡарып сығып, Аллаһы Тәғәлә һәр мосолманға бурыс итеп ҡуйған фарызды үтәй алыуҙарына шатланып, барлыҡ тәҡүәле ғәм байрам итә бөгөн. Улар быға лайыҡ, ин шәә Аллаһ. Фытыр саҙаҡаһы биреп, ғәйет намаҙын башҡарып, мосолмандар Ураҙа байрамын аш-һыу, тәмле-татлы ризыҡтар әҙерләп, өйҙә ғаиләһе, туғандары, дуҫ-иштәре менән бергә үткәрә.

Байрамдарға йомарт айыбыҙҙың өсөнсө "ишеге" - Халыҡ-ара Ҡояш көнө **(3)** булыр. Ҡөҙрәтле, ҡайнар, ҡәҙерле был ут йомғағы Ер шарын ғына түгел, бөтөн башҡа планеталарҙы ла үҙенә ҡаратып, үҙ системаһында әйләндерә-тулғандыра. Ҡояшһыҙ Ерҙә тереклек тә булмаҫ ине. Ул яҡтылыҡ һәм йылылыҡ сығанағы ғына түгел, һәр төрлө энергия ла бүлеп сығара. Кешелек уны файҙаланырға өйрәнеп, авиация һәм космоста, ауыл хужалығында, көнкүрештә уңышлы ҡуллана. Башҡортостанда ғына ла алты ҡояш электр станцияһы бар, улар Хәйбулла, Көйөргәҙе, Ейәнсура, Бөрйән, Стәрлебаш һәм Ғафури райондарында эшләй. Быйыл Баймаҡ районы менән Ағиҙел ҡалаһында ла шундай уҡ станциялар асыу ҡарала. Яңыраҡ ҡына "Полиэф" акционерҙар йәмғиәтенең 8 гектар майҙанда урынлашҡан ҡояш станцияһы старт алды. Әйтеүҙәренсә, был ҡоролманың гигант панелдәре хатта космостан да күренә икән!

Ә шулай ҙа майҙың иң ҙур тантанаһы - йылдар арауығы уны алыҫлаштырған һайын, йөрәктәребеҙгә яҡыная ғына барған Бөйөк Еңеү көнө **(9 май, 1945 йыл)**. Ватаныбыҙ беҙгә "дуҫ булмаған", көнсөл, хәйләкәр һәм ике йөҙлө илдәр өйөрөнөң ҡамалышында ҡалған бөгөнгө көндә фашист илбаҫарҙарын өңөндә дөмөктөрөп яуланған Бөйөк Еңеү икеләтә әһәмиәткә эйә. Ләкин фашизм йоҡламай, неонацизм унда ла, бында ла баш күтәрә. Күп йылдар буйы Рәсәйҙең туғандашы булған Украинала ул йәмғиәт ҡатламдарына үтеп инде, власть органдарына оялап, фашистик режимға юл асты һәм ил яҙмышын тайғаҡ юлға борҙо. Ошондай шарттарҙа украин милләтселәренән тыш, "таҙа раса" яҡлы нацист һәм фашистик хәрәкәттәр әүҙемләште. Асыҡтан-асыҡ фашист символикаһы аҫтында ошо идеологияны таратыусы "Азов" төркөмө, мәҫәлән, йәмғиәтте үҙҙәренә буйһонмаған кешеләрҙән таҙартыу маҡсатында карателдәр батальондары төҙөп, Донбастағы тыныс халыҡҡа ҡарата йылдар буйы йыртҡыстарса һөжүм алып барҙы. 1939 йылда уҡ әле шәхсән Гитлерҙың үҙе тарафынан ойошторолған украин нацистары ойошмалары тәрән тамыр ебәреп өлгөрә һәм Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында совет халҡына ҡаршы ҡанһыҙлыҡта немец фашистарынан да арттырып ебәрә. Үкенескә, украин нацистары, немец армияһына хеҙмәт иткән Гитлер көсөктәре тулыһынса ҡырып бөтөрөлмәй ҡала. Етмәһә, аҙаҡ Н. Хрущев тарафынан уларға амнистия иғлан ителә, нацист енәйәтселәр күпләп төрмәнән сығарыла. Шул арҡала Украинала, айырыуса уның көнбайыш өлөшөндә йылдар буйы быҫҡып килгән нацистар идеологияһы яңынан ағыуын сәсә һәм әүҙемләшә башлай. Бына шуның өсөн дә фашист ҡалдыҡтарын был юлы ла үҙ өңөндә дөмөктөрөү - мотлаҡ бурыс. Шул саҡта ғына Рәсәй Бөйөк Еңеү ҡаҙаныштарын һаҡлап алып ҡаласаҡ. Был еңеүҙең беҙҙең тарафтан мөмкин тиклем әҙерәк юғалтыуҙар менән тиҙерәк тантана итеүен теләйек.

Майҙағы иҫтәлекле даталар һәм байрам көндәре: Яҙ һәм Хеҙмәт **(1)**, Ураҙа **(2)** байрамдары, Халыҡ-ара Ҡояш, Бөтөн донъя ирекле матбуғат **(3)**, Халыҡ-ара акушерка, Инвалидтар хоҡуғы өсөн халыҡ-ара көрәш **(5)**, Радио **(5)** көндәре, Рәсәй Федерацияһының Ҡораллы Көстәре көнө **(7 май, 1992 йыл)**, совет халҡының 1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында Еңеү көнө **(9 май, 1945 йыл)**, Шәфҡәт туташтары **(12)**, Бөтөн донъя ғәҙел сауҙа **(14)**, Ғаилә ; Климат **(15)** көндәре, Ишембайҙа нефть ятҡылығы асылыуға 90 йыл **(16, 1932)**, Музейҙар **(18)**, РСФСР-ҙа Пионерҙар ойошмаһы булдырыуға - 100 йыл **(19, 1922)**, Бөтөн донъя бал ҡорттары (Умартасы) **(20)** көндәре, Полярник; Бөтөн донъя диалог һәм үҫеш хаҡына мәҙәни күп төрлөлөк **(21)** көндәре, Славян яҙмаһы һәм мәҙәниәте **(24)**, Филолог; Мәктәптәрҙә һуңғы ҡыңғырау **(25)**, Рәсәй эшҡыуарлығы **(26)**, Иретеп йәбештереүсе; Дөйөм Рәсәй китапханалар **(27)**, Ил сиге һаҡсылары **(28)**, Хәрби автомобилсе; Химик; Халыҡ-ара тыныслыҡ һаҡсылары **(29)** көндәре, Рәсәй адвокатураһы; Бөтөн Рәсәй тәмәкеһеҙ **(31)** көндәр.

**Һабанайҙа тыуғандар:**

**8 -** педагог, РФ дөйөм белем биреүҙең почетлы хеҙмәткәре **Рәйсә Күзбәковаға - 65 йәш** (1957).

**10 -** бейеүсе, РСФСР-ҙың атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артисы, С.Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, Йәштәр һәм студенттарҙың Бөтөн донъя фестивале лауреаты **Рәшиҙә Туйсинаға - 80 йәш** (1942).

**17 -** физика-математика фәндәре докторы, БДУ профессоры, академик, Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре **Роберт Яҡшыбаевҡа - 70 йәш** (1952).

**-** Рәсәй дипломаты, дәүләт эшмәкәре, сәйәсәт фәндәре докторы, профессор, Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре, 2011-2016 йылдарҙа Ислам хеҙмәттәшлеге ойошмаһы ҡарамағындағы даими вәкил урынбаҫары **Илдус Илешевҡа - 65 йәш** (1957).

**20 -** философия фәндәре докторы, профессор, академик, сәйәсмән, Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре, С.Юлаев ордены кавалеры **Фәнил Фәйзуллинға - 80 йәш** (1942).

**26 -** философия фәндәре докторы, БДУ профессоры, академик, Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре, Халыҡтар дуҫлығы ордены кавалеры **Баязит Ғәлимовҡа - 80 йәш** (1942).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## *ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## ? Хеҙмәт ғали йәнәптәре үҙенең бәҫһеҙлеген тойоп, беҙҙең тормошобоҙҙан китеп бара түгелме?

***Әлфир ҒАЙСИН, Өфө сәнғәт-гуманитар колледжы директоры:*** "Йәмғиәтте өйрәнеү" дәрестәрендә балалар менән ғаилә, хеҙмәт темаларына фекер алышабыҙ. Уларға элегерәкке ғаилә ҡоролошо нисек булыуын, уларҙың хәҙерге ғаиләләр менән айырмаһы һәм уртаҡлығы, хеҙмәткә мөнәсәбәттәре тураһында аңлатып һөйләйем, һорауҙар бирәм. Был дәрестәрҙә һәр саҡ шуға баҫым яһайым: кеше үҙ тормошонда ике бейеклек яуларға тейеш. Беренсеһе - яратҡан эшен табырға, икенсеһе - яратҡан ғаилә ҡорорға. Ошо ике бейеклекте яулай алған кеше бәхетле тип иҫәпләнә. Ул рәхәтләнеп эшкә бара, икеләтә рәхәтлек тойоп өйгә ҡайта.

Уҡыусылар, ғәҙәттә, был һинең яратҡан эшеңме, түгелме икәнен нисек аңларға була, тип ҡыҙыҡһына. Был һорауға яуап ябай: яратҡан эшеңдә кеше арымай. Кеше арый икән, был эш уныҡы түгел. Әлбиттә, башта яратҡан һөнәреңде таныуы еңел түгел, эшләп ҡарарға кәрәк. Мин үҙем дә Башҡорт дәүләт университетының тарих факультетында белем алғанда, педагогик практика үткән осорҙа, балалар менән эшләй алмам, тигән инаныста инем. Хатта уҡыуымдан баш тартырға, икенсе йүнәлеш эҙләргә ниәт итеп бөткәйнем. Шул саҡта миңә, бер аҙ эшләп ҡара ла, һуңынан икенсе берәй эшкә күсерһең, мөмкинлек булыр, тип кәңәш бирҙеләр. Уҡытыусы булып бер ауыл мәктәбендә эш башланым, 3-4 айҙан "Матур эш бар, күсәһеңме?" тигән тәҡдим дә яһанылар. Үҙ эшемде таптым шикелле, тип баш тарттым. Бына шулай итеп 34 йыл үтеп тә киткән, мәктәпкә бер ингәйнем, унан өҙөлөп булманы ла ҡуйҙы.

Хәҙерге балалар, йәштәр тураһында кем нимә генә тимәһен, улар беҙҙән матурыраҡ, аҡыллыраҡ, рухлыраҡ та. Беҙҙең осор кешеләре тәмәке, араҡы кеүек кире йоғонтоларға күберәк бирелде, ә хәҙерге йәштәр быларға иғтибар ҙа итмәй. Мине шул ҡыуандыра. Уларҙың күбеһе сәләмәт тормошто йүнәлеш итеп алғандар. Әлбиттә, ҡайһы бер етешһеҙлектәре лә, беҙгә аңлашылмаған яҡтары ла юҡ түгел. Мәҫәлән, берәү әйтә: "Мин блогер булырға теләйем. Мин пост яҙам, лайк йыям, миңә хаҡ түләп, реклама бирәләр һәм шулай аҡса эшләйем", - ти. Бының төбөнә төшөнөп етмәйем, нисек инде, ниҙер яҙып, видео төшөрөп кенә кеше аҡса эшләй ала? Сөнки мин боронғоса ҡараштa: кеше эшләргә, эше күренергә һәм башҡалар уның эшенә ҡарап һоҡланырға тейеш. Бында, моғайын да, өлкән быуын кешеләре менән йәштәр араһындағы мөнәсәбәттәр, бәйләнештәр ҙур роль уйнайҙыр. Атай-әсәйҙәр балалары менән ихлас һөйләшһендәр, бер-береһен тыңларға һәм ишетергә өйрәнһендәр. Юғиһә, хәҙерге атай-әсәйҙәрҙе баланың тамағы туҡ, өҫтө бөтөн булыуы ғына ҡыҙыҡһындыра кеүек тойола. Беҙ, уҡытыусылар, балаларға белгәнебеҙҙе өйрәтәбеҙ инде, әммә атай-әсәй ҙә уның күңеленә юл таба алһа, һөҙөмтә яҡшыраҡ булыр ине.

Оҙонлоҡто метр, йә километр менән үлсәйҙәр, ауырлыҡты килограмм йә тонна менән үлсәп була, ә кешене нимә менән үлсәргә? Кеше хеҙмәт менән, эшкә ҡарашы, оҫталығы менән баһалана. Уҡыусы икән, нисек уҡый, төбөнә төшөнөп етәме, тип баһалайбыҙ. Эш кешеһе икән, иңенә һалынған бурысты теүәл үтәйме, юҡмы, сифатлы эшләйме, тип тикшерәбеҙ. Кешенең баһаһы барыбер ҙә хеҙмәте менән үлсәнә. Бына шуны үҙебеҙ ҙә һәр ваҡыт хәтерҙә тотһаҡ, балаларыбыҙға ла аңлатып үҫтерһәк, хеҙмәт ғали йәнәптәре бер ваҡытта ла беҙҙең тормошобоҙҙан юғалмаҫ.

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда 1 майҙан янғынға ҡаршы махсус режим индерелә. 25 апрелдә Республикаға идара итеү үҙәгендә уҙған оператив кәңәшмәлә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ошондай ҡарар ҡабул итте. Башҡортостан Республикаһының Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты рәйесе Фәрит Ғүмәров белдереүенсә, үткән аҙнала тәүге ете урман янғыны теркәлгән. Әбйәлил, Баймаҡ, Бөрйән райондарында сыҡҡан ут тәүлек эсендә һүндерелгән.

✓Рәсәй Президенты Владимир Путин Башҡортостандың ике тренерына - Октябрьский ҡалаһы 1-се спорт мәктәбенең бокс буйынса тренеры Василий Савкинға һәм Өфөнән Башҡортостан Республикаһының биатлон буйынса олимпия резервындағы спорт мәктәбе тренеры Рөстәм Фәйезовҡа "физик культураны һәм спортты үҫтереүҙәге ҡаҙаныштары, күп йыллыҡ намыҫлы хеҙмәттәре өсөн" рәхмәт белдерҙе.

✓Стратегик башланғыстар агентлығы конкурсы йомғаҡтары буйынса Башҡортостандың мәктәп туҡланыуын ойоштороу тәжрибәһе Рәсәйҙә иң яҡшыһы ("Һаулыҡты бала саҡтан уҡ һаҡлау" номинацияһы) тип танылды. Был хаҡта республика етәксеһе Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә хәбәр итте. Конкурсҡа Рәсәйҙең 63 төбәгенән бөтәһе 532 ғариза килде, тип билдәләне ул. Башҡортостанда мәктәптә туҡланыу темаһына мөрәжәғәттәр кәмей бара, тип өҫтәне республика етәксеһе.

✓Башҡортостан Ҡаҙағстандың "Аҡбуҙат" башҡорт этномәҙәни берләшмәһенә ун комплект башҡорт милли кейеме бүләк итте. "Аҡбуҙат" башҡорт этномәҙәни берләшмәһе рәйесе, Башҡортостан Республикаһының Ҡаҙағстандағы Конгресс-бюроһы вәкиле Урал Аҙнабаев ҡыуаныстары менән уртаҡлашты. Башҡортостан Башлығының Ҡаҙағстанға эш сәфәре барышында ойошма әүҙемселәре уға милли кейемдәр менән ярҙам итеүен һорағайны.

✓Ҡариҙел районында пляжы һәм зоопаркы булған "Ғаилә тарихтары" эко-отелдәр комплексы асыла. Дөйөм хаҡы - 96 миллион һум. Экоотелдәргә туристар ағымы 25 мең кеше тәшкил итер тип көтөлә. Биналарҙың бер өлөшөн - 1 июндә, пляжды, зоопаркты 2022 йылдың аҙағынаса асыу планлаштырыла.

*✓ Льготалы ставка - 3 процентҡа, кредиттың суммаһы - 3 миллион һумға, срогы - 25 йылға тиклем. Был аҡсаға граждандар ауыл ерендә торлаҡ һатып алырға йәки подряд килешеүе буйынса йорт һалырға мөмкин.*



ҠЫҪҠАСА

# ПРЕМИЯ КЕМГӘ?

✓ **Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республиканың фән һәм техника өлкәһендәге дәүләт премиялары тураһында указға ҡул ҡуйҙы.** Документҡа ярашлы, дәүләт премиялары республиканың фәнни-техник ҡеүәтен үҫтереү, фән һәм техника өлкәһендә ғилми-тикшеренеү эшмәкәрлеген әүҙемләштереү өсөн булдырылған. "Башҡортостан Республикаһының йыл һайын Республика көнөнә ҡарата берәр миллион һум күләмендә бирелгән фән һәм техника өлкәһендәге өс дәүләт премияһын билдәләргә", - тиелә Радий Хәбировтың указында. Премиялар республика бюджетынан түләнә. Дәүләт премияһы номинациялары иҫәбендә - тәбиғи фәндәр; техник фәндәр; гуманитар һәм ижтимағи фәндәр. Ғаризалар 2022 йылдың 10 майынан 30 сентябренә тиклем ҡарала.

✓ **"Берҙәм Рәсәй" Георгий таҫмаһын хәрби дан символдарына тиңләштереү тураһында закон проектын Дәүләт Думаһына индерҙе.** Был Бөйөк Ватан һуғышында Еңеү символын тәнҡитләүгә юл ҡуймаҫҡа тейеш. Закон проектына ярашлы, асыҡтан-асыҡ таҫманың дәрәжәһен төшөргән өсөн енәйәти йәки административ яуаплылыҡ янай. Георгий таҫмаһы күп йылдар инде халҡыбыҙҙың Бөйөк Ватан һуғышында күрһәткән ҡаһарманлығы һәм ныҡлығының символы булып тора. Сит илдәрҙә был символды тәнҡитләү күренештәре йышайҙы. Парламент ҡарауына индерелгән документта билдәләнеүенсә, таҫма тарихи хәтерҙе һаҡлауға бәйле маҡсатта ғына файҙаланылырға мөмкин.

✓ **Өфө хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев баш ҡала мәктәптәрендә "Һуңғы ҡыңғырау" байрамын уҙғарыу көнөн раҫланы - 25 май.** Өфө райондары хакимиәттәре башлыҡтарына, Йәмәғәт хәүефһеҙлеге үҙәгенә, Рәсәй Эске эштәр министрлығының Өфө буйынса идаралығына, Янғын һағы идаралығына, Башҡортостан буйынса Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының күҙәтеү эшмәкәрлеге һәм иҫкәртеү эше бүлегенә Һуңғы ҡыңғырау байрамын үткәргәндә уҡыусылар араһында хоҡуҡ боҙоу осраҡтарына юл ҡуймау, уларҙың ғүмерен һәм һаулығын һаҡлау йәһәтенән саралар күреү бурысы йөкмәтелгән. - "Һуңғы ҡыңғырау" байрамында Башҡортостанда "ҡоро закон" ғәмәлдә.

✓ **Башҡортостан банктары "Ауыл ипотекаһы" льготалы программаһы буйынса граждандарҙан ипотека кредитын алыуға ғаризалар ҡабул итә башланы.** Бынан алда Рәсәй Хөкүмәте вице-премьеры Виктория Абрамченко ауыл ипотекаһы буйынса эшләгән банктарға процент ставкаһын компенсациялау өсөн өҫтәмә рәүештә 7 миллиард һум бүленәсәге тураһында хәбәр иткәйне. Әле Россельхозбанк бүлексәләрендә ғаризалар ҡабул ителә башланы. Льготалы ставка - 3 процентҡа, кредиттың суммаһы - 3 миллион һумға, срогы - 25 йылға тиклем. Был аҡсаға граждандар ауыл ерендә торлаҡ һатып алырға йәки подряд килешеүе буйынса йорт һалырға мөмкин. Тулыраҡ мәғлүмәт менән банк бүлексәләрендә танышырға була.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЙОМҒАҠЛАНЫЛАР

**Тажзәхмәт арҡаһында ике йыл кисектерелеп торғандан һуң, 21 апрелдә, "Торатау" Конгресс-холында "Башҡортостан Республикаһы муниципаль берәмектәре советы" ассоциацияһының XII съезы үтте. Уның эшендә БР Башлығы Радий Хәбиров ҡатнашты. Сара алдынан бина алдындағы майҙанда ул Өфө ҡалаһының коммуналь хеҙмәттәренә Беларуста эшләнгән яңы коммуналь хужалыҡ техникаһының асҡыстарын тапшырҙы.**

Башҡортостан Башлығы форумдың илде үҫтереүҙең хәҙерге шарттарындағы ҙур әһәмиәтен халыҡтың имен тормошон тәьмин итеүҙе өҫтөнлөклө бурыс тип билдәләне, бигерәк тә түбән килемле, күп балалы һәм башҡа социаль йәһәттән, шул иҫәптән сәләмәтлек торошо буйынса яҡланмаған халыҡ ҡатламына айырым иғтибар бүлергә саҡырҙы. Шулай уҡ был иғтибарҙан бизнес та ситтә ҡалырға тейеш түгеллеген билдәләне. Әйткәндәй, уҙған аҙна башында Республика Хөкүмәте көрсөккә ҡаршы 55 миллиард һумлыҡ саралар пакеты бүлде, ул санкцияларҙың төп тармаҡтар эшенә кире йоғонтоһон кәметергә тейеш. Төбәк Башлығы халыҡтың тормошо уларҙың хеҙмәтенә бәйле булыуын билдәләп, республикала эшһеҙлектең кәмеүен һәм Рәсәй Хөкүмәтенең эшһеҙҙәрҙе икенсе һөнәргә уҡытыу өсөн 900 миллион һум аҡса бүлеүен белдерҙе. Ул ауылдарҙың үҫешенә, уларҙа транспорт инфраструктураһы булдырыуға айырым туҡталды. Быйыл ауыл райондары юлдарына таш түшәү өсөн 5-әр миллион һум аҡса бүленә, ташты районлар үҙ территорияһындағы карьерҙарҙан ала. Ауылдарға ҡағылышлы тағы бер мөһим мәсьәлә - кадрҙар. Республикала ауылдарға табиптар һәм фельдшерҙар, уҡытыусылар, тренерҙар, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәрен йәлеп итеү программаһы тормошҡа ашырылыуы дауам итә. Шулай уҡ ауылдарҙа мөһим социаль объекттар: ФАП-тар, спорт ҡоролмалары, мәҙәниәт йорттары, мәктәптәр төҙөләсәк һәм ремонтланасаҡ. Ауылдарҙы Интернет бәйләнеше менән тәьмин итеүҙең мөһимлеген билдәләп, Республика Башлығы былтыр 262 ауылда 40 мең йортҡа интернет үткәрелеүен белдерҙе, быйыл 190 ауылда 40 мең йортто селтәрле ресурстарға тоташтырыу планлаштырыла.

Сара сиктәрендә төрлө темалар буйынса түңәрәк ҡорҙар үтте. Уларҙа ер һәм урман участкаларының сиктәрен билдәләү, берәҙәк йорт хайуандарының артыуы, урындарҙа юлдар һалыу, уларҙы ремонтлау һәм реконструкциялау мәсьәләләре ҡаралды. Райондарҙан килгән вәкилдәр күҙәтеүсе органдарҙың муниципалитеттарға күтәргеһеҙ штраф һалыуы, бюджетта түләргә аҡса етмәүенә зарланды. Радий Фәрит улы был йәһәттән ярты йыл һайын осрашып, ошо мәсьәлә буйынса күҙәтеү органдары менән берлектә фекер алышырға тәҡдим итте.

# ИҢ ЯҠШЫЛАР БҮЛӘКЛӘНДЕ

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров иң яҡшы эшсәндәргә Рәсәйҙең һәм республиканың дәүләт наградаларын тапшырҙы.**

"Бында намыҫлы хеҙмәте, таланты менән тормошобоҙҙо йәмләгән үҙ эшенең оҫталары, яуаплы эшсәндәр йыйылған", тине республика етәксеһе бүләкләү тантанаһын асып. Уларҙың барыһы ла иҡтисад, мәғариф, фән, мәҙәниәт үҫешенә һәм Башҡортостандың Рәсәйҙә уңышлы, алдынғы төбәктәрҙең береһе булараҡ ҙур өлөш индереүен билдәләне. "Һеҙ юғары оҫталығығыҙ һәм күп йыллыҡ ижади хеҙмәтегеҙ өсөн ошо наградаларға лайыҡ булдығыҙ. Күптәрегеҙ менән шәхсән танышмын, һәр ваҡытта ла намыҫлы эшләүегеҙҙе беләм. Беҙ пациенттарҙың ғүмерен ҡотҡарған табиптарыбыҙ менән һоҡланабыҙ", - тине Радий Хәбиров. Ул шулай уҡ Башҡорт дәүләт аграр университеты ректоры, профессор Илдар Ғәбитовтың БДАУ-ның Рәсәйҙәге алдынғы ауыл хужалығы вуздары иҫәбенә инеүендә, төрлө заманса белгестәр әҙерләүҙәге ролен юғары баһаланы. Радий Хәбиров фекеренсә, бүләкләнеүселәрҙең һәммәһен дә республика һәм ил яҙмышы өсөн юғары яуаплылыҡ, тыуған яҡты үҫешкән итеп күреү теләге берләштерә. "Башҡортостанда һәр ваҡыт намыҫлы эшләйҙәр. Һәр берегеҙҙең хеҙмәт биографияһы - быға сағыу дәлил. Һеҙҙең оптимизм, эшкә яуаплы мөнәсәбәтегеҙ йәш алмашҡа илһам өҫтәй һәм улар өсөн лайыҡлы өлгө булып тора. Күп йыллыҡ намыҫлы хеҙмәтегеҙ өсөн ысын күңелдән рәхмәтемде белдерәм!" - тине Башҡортостан Башлығы. Шулай итеп, был юлы 50-нән ашыу кеше Рәсәйҙең һәм республиканың дәүләт наградалары менән бүләкләнде.

# ИРАН МЕНӘН ДУҪЛЫҠ

**Мәскәүҙә Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров Иран Ислам Республикаһының вице-президенты Сорена Саттари менән артабанғы хеҙмәттәшлек мөмкинлектәрен тикшерҙе. Был турала Башҡортостан Башлығы социаль селтәрҙәге сәхифәһендә хәбәр итте.**

Билдәләнеүенсә, Иран - Яҡын һәм Урта Көнсығыш сигендәге ҙур дәүләт. 40 йылдан ашыу санкциялар шарттарында йәшәгән ил етди технологик һәм иҡтисади үҫешкә өлгәшкән. Бында нефть сығарыу һәм эшкәртеү бик яҡшы үҫешкән. Башҡортостан предприятиелары берлектәге проекттар менән ҡыҙыҡһына. Әлеге ваҡытта Иранда республика вәкиллеген асыу тураһында мәсьәлә өйрәнелә. Осрашыуҙа яҡтар бизнес-миссиялар менән алмашырға һөйләшеп килеште. Башҡортостан делегацияһы май уртаһында Тегеранға ҙур нефть һәм газ күргәҙмәһенә барырға йыйына. Тиҙҙән Иран нефтенә 115 йыл тула, ә быйыл Башҡортостан нефтенә - 90 йыл. Иран вәкилдәрен Өфөлә тантаналы сараларҙа көтәләр. "Ирандың аҙыҡ-түлек сәнәғәте һәм ауыл хужалығы өлкәһендәге тәжрибәһе беҙҙең өсөн файҙалы булыр ине. Иран беҙҙең республиканан иген һәм ит импортлау, шулай уҡ Башҡортостан биләмәһендәге инвестиция проекттары менән ҡыҙыҡһына, - тине республика етәксеһе. - Фән, мәғариф һәм мәҙәниәт өлкәһендә хеҙмәттәшлекте үҫтерергә ниәтләйбеҙ. Кадрҙар әҙерләү һәм фәнни тикшеренеүҙәр йәһәтенән үҙ-ара ҡыҙыҡһыныу бар. Хәҙер республика вуздарында Ирандан 53 студент уҡый, уларҙың күпселеге - буласаҡ табиптар".

# ФЛАГТАР КҮТӘРЕЛӘ

**25 апрелдә республиканың дүрт полилингваль гимназияһында тәүге тапҡыр дәрестәр Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың дәүләт символдарын күтәреүҙән башланды.**

Башҡортостан беренселәрҙең береһе булып илдең мәғариф министры Сергей Кравцовтың мәктәптә аҙнаны флаг күтәреүҙән башларға тигән саҡырыуына әҙерлеген белдерҙе. 11 майҙан республиканың бөтә белем биреү учреждениеларында аҙна һайын ошондай тантана уҙғарыла башлай. Бынан алда Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров шундай бойороҡ биргәйне. Өфөнөң Дим районында урынлашҡан "СМАРТ" 2-се республика полилингваль күп профилле гимназияһында уҡыу аҙнаһы тантаналы линейка менән асылды, гимн аҫтында Рәсәй һәм Башҡортостан флагтары күтәрелде. Линейкала республиканың мәғариф һәм фән министры Айбулат Хажин да ҡатнашты. "Яҡын арала республиканың барлыҡ мәктәптәрендә аҙна һайын дәрестәр ошондай саранан башланырға тейеш, - тине Башҡортостандың мәғариф һәм фән министры Айбулат Хажин, уҡыусылар алдында сығыш яһап. - Бөгөн Башҡортостандың дүрт полилингваль гимназияһында һынау тәртибендә флагтарҙы күтәреү тантаналары уҙҙы. Шулай итеп, яңы традицияға нигеҙ һалабыҙ, әкренләп ул барлыҡ мәктәптәргә таратылыр".

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөлә матур йолаға әүерелгән "1000 велосипедсы көнө" фестивале 2022 йылдың майында Башҡортостандың биш ҡалаһында уҙғарыла, тип хәбәр итте ойоштороусылар - "Башҡортостан Республикаһының Велосипедсылар союзы" йәштәр йәмәғәт ойошмаһы. Тәүгеләрҙән булып эстафетаны Салауат ҡалаһы ҡабул итә, унда велофестиваль йәкшәмбегә, 1 майға, билдәләнгән. Бер аҙнанан, 8 майҙа, ул Стәрлетамаҡта, 15 майҙа - Октябрьскийҙа, 22 майҙа - Нефтекамала, 29 майҙа Өфөлә үткәрелә.

✓Федераль һауа транспорты агентлығы мосолмандарҙы бер нисә ҡаланан, шул иҫәптән Өфөнән хажға ебәреүҙе күҙ уңында тота. 2022 йылда Сәғүд Ғәрәбстанына авиаташыуҙарҙы ойоштороу буйынса кәңәшмәлә һүҙ ошо хаҡта барҙы. Рәсәйҙең Хаж-миссияһы, Федерация Советы, Рәсәй төбәктәре, туроператорҙар һәм авиакомпаниялар вәкилдәре Мәскәү, Махачкала, Грозный, Минераль һыуҙар, Ҡаҙан һәм Өфө ҡалаларынан авиаосоштар ойоштороу мөмкинлеген ҡараны.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров баш ҡаланың сәнәғәт предприятиелары, төҙөкләндереү объекттары һәм спорт ҡоролмалары менән танышыу барышында "Астра - спорт территорияһы" спорт кластерында урынлашҡан заманса ябыҡ һырғалаҡ - "Астра Арена" боҙ майҙанында булды. Был республикала шәхси инвестициялар нигеҙендә тормошҡа ашырылған беренсе проект. Элекке завод корпустарында инвесторҙар фитнес-клуб, батут паркы, гимнастика мәктәбе, бокс залы, скаладром һәм башҡа спорт ойошмаларын урынлаштырған.

✓Өфө сәйәхәтселәрҙең сираттағы рейтингына ингән. OneTwoTrip сәйәхәтте планлаштырыу сервисы аналитиктары ҡулланыусыларҙың 2,1 проценты май байрамдарына Башҡортостандың баш ҡалаһына авиабилеттарға заказ биреүе хаҡында белдерҙе. Был республиканың баш ҡалаһына 10 популяр йүнәлеш иҫәбенә инергә мөмкинлек бирҙе.

✓Баш ҡала буйлап сәфәре барышында Радий Хәбиров Рихард Зорге, 30 урамындағы күп фатирлы йорттоң подъездарын ремонтлау барышы менән танышты. Ошо уҡ урамдағы 34-се, 36-сы, 40-сы, 40/1-се йорттарҙа һәм СССР-ҙың 50 йыллығы, 50 урамындағы йортта "Башҡорт ихаталары" республика программаһы буйынса территориялар комплекслы төҙөкләндерелә башлаған. Радий Хәбиров бында ла эштәр барышы менән танышты. Быйыл баш ҡалала барлығы 54 ихата төҙөкләндереләсәк.

*✓ Марафон барышында Башҡортостандың һәр районы һәм ҡалаһынан тупраҡ алынып, Геройға Совет майҙанында ҡуйыласаҡ һәйкәлдең нигеҙенә һалынасаҡ.*



...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# БАЙРАМ БЕҘҘӘ, БАЙРАМ!

**Яҙ һәм хеҙмәт байрамы сараларын, ғәҙәттәгесә, профсоюздар үткәрә һәм шуға ла республика Профсоюздар йорто алдында митинг-концерт ойошторола.**




"Был сараның ижади йөкмәткеһе нигеҙен ветерандарға ихтирам һәм хөрмәт, ғаилә династияларын, шулай уҡ хеҙмәт алдынғыларын тәбрикләү саралары тәшкил итә һәм ул республикала иғлан ителгән Һөнәри белем биреүҙе модернизациялау һәм хеҙмәт өсөн лайыҡлы шарттар булдырыу йылында айырым әһәмиәткә эйә", - тине Республика менән идара итеү үҙәгендә үткән оператив кәңәшмәлә беренсе вице-премьер Азат Бадранов.

Сара сиктәрендә "Хеҙмәт фиҙаҡәрлеге өсөн" миҙалы менән бүләкләү тантанаһы планлаштырыла. Концертта иһә республиканың ижади коллективтары һәм артистары сығыш яһаясаҡ.

Еңеү көнө алдынан был көндә Миңлеғәли Шайморатовтың Еңеү паркындағы бюсы эргәһенән Республика марафонына старт бирелә. Уның барышында Башҡортостандың һәр районы һәм ҡалаһынан тупраҡ алынып, Геройға Совет майҙанында ҡуйыласаҡ һәйкәлдең нигеҙенә һалынасаҡ.

Йола буйынса, Өфөлә һәм башҡа ҡалаларҙа, республика райондарында был көндәрҙә төрлө майҙандарҙа халыҡ байрамдары үтәсәк. Шулай уҡ 1 майҙа көндөҙгө сәғәт 12-лә "Фонтандар фестивале" башлана, йәғни тап ошо ваҡытта барлыҡ фонтандар эшләй башлай, улар эргәһендә коллективтар классик музыка уйнаясаҡ.

30 апрелдән 4 майға тиклем көн һайын Ағиҙел йылғаһы ярында, парктарҙа, скверҙарҙа төрлө саралар үтәсәк. 30 апрелдә, 2-4 майҙа Ағиҙел яры буйында көндөҙгө сәғәт дүрттән киске етегә тиклем "Йәштәр Өфөһө" (30 апрель), "Мәҙәни Өфө" (2 май), "Спорт Өфөһө" (3 май), "Яҙ байрамы" (4 май) саралары ойошторола. Шулай уҡ концерттар, оҫталыҡ дәрестәре, ярыштар һәм интерактив саралар үткәрелә.

1 майҙа "Дим" паркында, "Ҡоштар" скверында, И. Якутов исемендәге паркта, С. Орджоникидзе исемендәге майҙанда концерт һәм уйын программалары ҡаралған. Беренсе Май паркында байрам концерты төнгө сәғәт 11-ҙә салют менән тамамланасаҡ. Шулай уҡ 1 майҙа Ҡунаҡһарайҙа, М. Ғафури исемендәге паркта һәм Беренсе Май паркында "Еңеү зарядкаһы" акцияһы уҙғарыла. 30 апрелдә көндөҙгө сәғәт 11-ҙә "Өфө муйынсағы" проекты сиктәрендә ғаилә старттары - "Мәрйен" фестивале башлана.

## Теманы дауам итеп...

**Ә Еңеү көнөн нисек билдәләйбеҙ? Оператив кәңәшмәлә вице-премьер Ирек Сәғитов белдереүенсә, беренсе тапҡыр парадта кавалеристар һәм кинологтар ҡатнаша. 9 Майҙа иртәнге 10-дан 11 тула 20 минутҡа тиклем парадта Өфө гарнизонының, төбәктәге федераль башҡарма власть органдарының хәрби хеҙмәткәрҙәре, юнармеецтар, уҡыу йорттары кадеттары һәм курсанттар, шулай уҡ хәрби хәрәкәттәр һәм хәрби хеҙмәт ветерандары үтә.**

Шулай уҡ Еңеү парадында барабансылар взводы, өс төр ғәскәрҙәрҙең почет ҡарауылы ротаһы ҡатнашасаҡ. Личный состав үтеп бөткәс, ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы Муса Гәрәев исемендәге мәктәп-интернаты кадеттарының плац-концерты күрһәтеләсәк. Быйыл беренсе тапҡыр парадта хәрби сәнғәт спорт федерациялары, хәрби-патриотик клубтар кадеттары һәм курсанттарының ҡул һуғышы буйынса күрһәтмә сығыштары буласаҡ. Тантаналы сараны һауала 11 самолет һәм 3 вертолеттан торған пилотаж төркөмө тамамлай. Улар Рәсәй һәм Башҡортостан флагтары менән осасаҡ, ә иң арттағыһы артынан аҡ төҫтәге төтөн һыҙаты һыҙыласаҡ.

Быйыл патриотик акция ғәҙәти форматта үтәсәк. Был хаҡта "Рәсәйҙең Үлемһеҙ полкы" Бөтә Рәсәй йәмәғәт хәрәкәтенең Үҙәк штабы хәбәр итә. Ойошманың Башҡортостан штабы етәксеһе Вадим Курилов белдереүенсә, 9 Майҙа был сара барлыҡ ҙур ауылдарҙа ла үтәсәк.

"Унда ҡатнашыусылар - армия йәки флоттағы үҙ ветераның, партизаның, йәшерен ойошмала тороусыны, яуғирын, тыл хеҙмәткәрен, концлагерь тотҡонон, блокадала ҡалыусыны, һуғыш балаһын иҫләүселәр. Бынан тыш, беҙ акцияла Рәсәй территорияһында һәм башҡа дәүләттәрҙәге ҡоралды хәрби низағтарҙа һәләк булған хәрбиҙәрҙең ғаиләләре ҡатнашырға теләк белдереүен дә хуплайбыҙ", - тине ул.

Колонналарҙа яҡшы күренһен өсөн ветерандың һүрәте булған штендер А3 форматында булырға тейеш, бындай мөмкинлеге булмағандар яугирҙың фотоһы ҡуйылған һәм исем-шәрифе яҙылған бейдж, шулай уҡ Георгий таҫмаһын тағырға тейеш. Колонналар 9 Майҙа тотош республика буйынса иртәнге сәғәт 10-дан 11-гә тиклем туплана. Был арауыҡта бар урында ла Левитандың телмәре һәм "Вставай, страна огромная!" йыры яңғырап тораcаҡ. Бер сәғәт - хәрби комиссариаттар Бөйөк Ватан һуғышы фронттарына оҙатыу алдынан хәрби хеҙмәткәрҙәр колонналарын туплаған ваҡыт. Ошо ваҡыт эсендә беҙ атай-олатайҙарыбыҙҙы иҫкә алабыҙ, хәрби йылдар йырҙарын тыңлайбыҙ һәм йырлайбыҙ. Сәғәт 11-ҙә бер минут тынлыҡ иғлан ителә һәм һуңынан "Үлемһеҙ полк"тың хәрәкәте башлана. "Һәр муниципалитеттың үҙ маршруты бар, - ти Вадим Курилов. - Өфөлә - ул Октябрь проспекты. Быйыл беҙ хәрәкәтте Галле исемендәге урам сатынан башлап, Кольский урамы сатына тиклем булыр тип көҙаллайбыҙ. Колонналар "Өфө универмагы" йәмәғәт транспорты туҡталышынан алып "Галле ҡалаһы" туҡталышына тиклем туплана. Хәрәкәт башланып, улар Ленин майҙанына еткәс, байраҡтар күтәрелә, ҡатнашыусыларға "Мы - армия народа, мы - армия страны" йырын башҡарырға тәҡдим ителә".

Төбәк штабы ултырышында ҡатнашыусылар ҙа үҙ фекерҙәре менән бүлеште. БР мәғариф һәм фән министрының беренсе урынбаҫары Илдар Мәүләтбирҙин был сараның үҫеп килеүсе быуын өсөн яҡшы нигеҙ булып тороуын билдәләп, министрлыҡ тарафынан республика мәктәптәрендә Хәтер дәрестәре, Геройҙар тураһында дәрестәр, синыф сәғәттәре үткәреләсәге тураһында белдерҙе. Шулай уҡ хәүефһеҙлек, медицина, техник тәьминәт хеҙмәттәре лә сараны үткәреүгә әҙер. Әммә битлек режимын һаҡлау ҙа талап ителә, сөнки тажәхмәт менән сирләү осраҡтары һаман да дауам итә. Әйткәндәй, "Үлемһеҙ полк"тың үҙенең стиле барлыҡҡа килгән, махсус брендбук эшләнгән. Дөйөм алғанда, республика буйынса "Үлемһеҙ полк"та 150 мең кешенең ҡатнашыуы көҙаллана.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!




# ЙӘШТӘР ҠАЛАҺЫ БУЛҺЫН!

**Баш ҡаланың "Арт-Квадрат"ында йәштәрҙең "JOB SPACE" карьера форумы үтте. Ул бер командаға 500-ҙән ашыу буласаҡ белгесте, эш башлап тороусы эшҡыуарҙы, эшсе йәштәрҙе йыйҙы.**

Сара өс йүнәлештә барҙы: "Карьера" - Өфөнөң алдынғы компанияларында эш эҙләү һәм тәжрибәләрен шунда һынап ҡарау хыялы менән яныусылар; "Бизнес" - эш башлаусы һәм үҙ эшен алып барыусы эшҡыуарҙар; "Трудмол" - баш ҡала йәштәрен эшкә урынлаштырыу мөмкинлеге. Форум барышында хеҙмәт баҙары, эшлекле уйындар, консультациялар, лекциялар, йыйылыштар һәм башҡа саралар ойошторолдо. Фекер алышыу майҙансыҡтарының береһендә "Өфө - йәштәр өсөн һәм йәштәр ҡалаһы" темаһы буйынса Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев менән төрлө предприятиелар, учреждениеларҙан вәкил булып килгән алдынғы эшсе йәштәр араһында "Һорау-яуап" форматында һөйләшеү барҙы. Йәштәрҙе үҙҙәрен бөгөн ҡыҙыҡһындырған мәсьәләләр борсоно, ә мэр үҙенең тәжрибәләре менән бүлеште, баш ҡаланы киләсәктә ниндәй үҙгәрештәр көтөүе тураһында һөйләне.

- Йәштәрҙең һәр нәмәгә талабы юғары һәм улар уны үҙҙәре йәшәгән урында күтәрә, сөнки беҙҙең тирә-яҡ мөхитебеҙ ҙур әһәмиәткә эйә. Был йәһәттән, йәмәғәт транспортын үҫтереү булһынмы ул, ҡаланы төҙөкләндереүме һ.б. бурыстарыбыҙ бик ҙур. Быйыл ғына 10 парк төҙөлә һәм яңыртыла. Өфөнөң 450 йыллығы сиктәрендә баш ҡала уның визит карточкаһына әүереләсәк яңы объекттар барлыҡҡа киләсәк, - тип белдерҙе Ратмир Мәүлиев. - Өҫтәмә белем биреүгә килгәндә, әлеге ваҡытта бик күп мөмкинлектәр бар. Беҙ, үҙ сиратыбыҙҙа, йәштәр үҙҙәрен күрһәтә алһын һәм киләсәктә ҡуллана алырлыҡ һөнәрҙәргә эйә булһын өсөн яңы майҙансыҡтар булдырырға тейешбеҙ. Әммә донъя шул тиклем тиҙ үҙгәрә, шуға бер урында тормаҫҡа, һығылмалы булырға, яңы белем алып һәм тәжрибә туплап, донъя менән бергә үҙгәрергә кәрәк. Был йәһәттән дәүләт бик күп программалар булдыра. Иң мөһиме - ҡул һелтәмәҫкә һәм ныҡышмал булырға кәрәк, шул саҡта барыһы ла тормошҡа ашасаҡ.

## Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклеге онотмағыҙ.**

### Ҡалҡан биҙә

❖ Ҡалҡан биҙәненең эшсәнлеге түбәнәйгәндә кесерткән файҙалы. 1 ҡалаҡ ваҡланған кесерткән япрағына (май айында йыйып алынған) 1 стакан ҡайнатылған эҫ һыу ҡойорға, шунан 5-7 минут быуҙа тоторға. Һыуынғансы төнәтергә. Һөҙөргә һәм көнөнә 4 тапҡыр яртышар стакан эсергә.

### Талаҡ

❖ Талаҡты халыҡ ысулы менән дауалайбыҙ - торма һәм керән бешереп. Ҙур, ҡаты торманың үҙәген алып ташлап, эсенә ваҡланған керән тамырын тултырырға (яҡынса 3 ҡалаҡ), өҫтөнә аҙ ғына бал һалып духовкала бешерергә. Иртәнсәк 2 ҡалаҡ, кискегә 1 ҡалаҡ ашарға. Бер тапҡыр шулай әҙерләнгән дауа ике көнгә етә. Был рәүешле 10 көн дауаланырға.

❖ Талаҡ һәм бауыр ауырыуҙарынан дөйә үләне (расторопша пятнистая) ярҙам итә. 30 грамм онтаҡланған дөйә үләне орлоғона ярты литр һыу ҡойоп, шыйыҡлыҡтың яртыһы бөткәнсе ҡайнатырға. Һыуытырға һәм һөҙөргә. Көн дауамында 1 сәғәт һайын 1-әр ҡалаҡ эсергә, аҙағынан һыу йоторға.

❖ 1 ҡалаҡ цикорийға семтем арыҫлан ҡойроғо ҡушырға һәм эмалле, фаянс, фарфор йәки быяла һауытҡа һалырға. Өҫтөнә 1-1,5 стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм йылыға төрөп ҡуйып, эсеүгә яраҡлы температураға еткергәнсе һыуытып, һөҙөргә. Көнөнә 3-4 тапҡыр ашарҙан 1 сәғәт алда 2-шәр ҡалаҡ эсергә. Дауалаunion ояҙалығы - 1 ай.

❖ 4-5 бөртөк гөлйемеш (йәки 1,5 ҡалаҡ ваҡланғанын), 1 ҡалаҡ ваҡланған укроп һабағы, 1,5 ҡалаҡ календула, 1 ҡомалаҡ тубырсығы (йәки ваҡланғанынан ярты балғалаҡ), 1 ҡалаҡ һары мәтрүшкәне эмалле һауытҡа һалып, 2 стакан һыу ҡойорға һәм утҡа ҡуйып ҡайнар хәлә еткерергә. Тағы ла 5 минут талғын ғына утта ҡапҡас ябып торорға. Шунан алып, йылыға төрөргә һәм һыуынғансы төнәтеп һөҙөргә. Төнәтмәне көнөнә 3 тапҡыр 1/4 стакан эсергә. Дауаланыу осоро - 2 аҙна, шунан 5 көн туҡтап тороп, тағы ла ҡабатларға.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ **"Эй, улым, бына беҙҙең һымаҡ һауынсылар булмаһа, улар ниндәй һөт эсер ине, йогурт ашар ине, ә комбайнсылар булмаһа, ниндәй икмәк ашар ине? Беҙҙең хеҙмәтебеҙ арҡаһында ғына уларҙың донъяһы тәмле һәм йәмле", - тинем.**



ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# АҒАС ҺАУЫТ-ҺАБА

Рәсәйҙең урманға бай төбәктәрендә оҙаҡ йылдар буронғо ауыл көнкүрешендә ағас һауыт-һаба ҡулланылған. XIX быуатта һәм уға тиклем дә башҡорттарҙа ағас һауыт-һаба өҫтөнлөк иткән. Балсыҡтан әйбер яһау менән ауылда шөғөлләнмәгәндәр. Баҙарҙарҙан алынған урыҫ һәм украин күршеләре, һөт күршеләре башҡорттарҙа һирәк ҡулланылған: һөт һәм ҡаймаҡты мөгәрәпкә төшөргәндәр. Балсыҡтан яһалған һауыттарҙы аш булмәһендә ҡулланыу тәжрибәһе лә булмаған, сөнки бөтә территорияға "урыҫ" мейестәре һуң таралған. Ғәҙәттә мейескә ҡуша һыланған ҡаҙандарҙа бешергәндәр. Аҙыҡ ағасты соҡоп яһалған туҫтаҡ, көбө, ялғаш, күнәктәрҙә эшкәртелгән. Табында ҡулланылған һауыт-һаба ла ағастан эшләнгән.

Хатта малсылыҡ традициялары оҙаҡ һаҡланған һәм йылҡысылыҡ өҫтөнлөк итеп, күн һауыттар яһау ғәҙәте булған Башҡортостандың көньяғында һәм көнсығышында ла ағас һауыт-һаба күп ҡулланылған. Турһыҡ һәм тиренән яһалған күнәктәр ҡымыҙ эшкәртеүгә тәғәйенләнгән. Улар менән бергә ҡымыҙ эшкәртеүҙә көбөләр ҙә ҡулланылған. Ҡымыҙҙан тыш ағас һауыттарҙа ит, һөт һәм иген аҙыҡтарын һаҡлағандар.

XIX быуаттың икенсе яртыһында башҡорт йәйләүҙәрен күргән ғалимдар һәм әҙәбиәтселәр тирмәләрҙә ҡатын-ҡыҙҙар яғында көбө, бот тәпәне һәм ҡымыҙ өсөн тиренән яһалған һауыттар - һаба менән турһыҡ урын алыуын, ағас һауыт-һаба күберәк булыуын телгә ала. Д.П. Никольский көнсығыш башҡорттарын көҙ унында тотоп: "...ишек эргәһендә бер яҡтан ҡымыҙ ҡойолған көбөләр, бейә һауыу өсөн күнәктәр, ярма һауыттары һ.б тора" тип яҙа.

Башҡорт ауылдарындағы оло быуын кешеләре ағас һауыттарҙа һаҡланған һөт ризыҡтары сифатын юғалтмай, ә тәмле майҙы тик йүкә көбөләрҙә генә эшләргә була тип раҫлай. Был бешкәкле тар һауыттар әлеге көнгәсә ауыл ерендә ҡулланыла. Элек сеймал булмағанлыҡтан, көбөләр эшләмәгән төбәктә, Урал аръяғының көнсығышында, май көбөһөн һәм ҡымыҙ һауыт-һабаһын Уралдан алып ҡайтырға тырышҡандар. Умартасылар йүкә батмандарында бал һаҡлаған.

Ағас һауыттарҙың төрө бигерәк тә тау-урман яҡтарында күп булған. Хәлле кешеләрҙең хужалығында цилиндр формһындағы һауыттар йәйләп артҡан. Улар араһында 3-4 литрлыҡ күнәсек һәм янтауҙар, күнәктәр, бот тәпәне, уртаса ҙурлыҡтағы күнәктәр - 2-3 һауыт, шулай уҡ 6-12 биҙрә шыйыҡлыҡ, йәки бер центнерҙай он, бойҙай һыйҙырышлы ҙур кисмәктәр булған. Ағас көбөләрҙә май, ҡымыҙ, айран бешкәндәр, иретелгән май, туң май, бал һәм башҡа ризыҡтарҙы һаҡлағандар, эремсек өсөн һөт йыйып әсеткәндәр, ҡамыр баҫҡандар, бал һәм буҙа ҡойғандар. Был һауыттарҙы урманға солоҡ балы алырға, емеш-еләк йыйырға йөрөткәндәр, һауын өсөн тотонғандар.

Күн йәки йүкә мисәүле еңел һәм йоҡа көбөләр менән ҡабыҡ тырыҙҙарҙы эйәр ҡанъяғаһына бәйләп, ризыҡты һәм һауыт-һабаны күсереү өсөн яраҡлаштырғандар. Байрам табындарында махсус һырланған һауыттар ҡулланылған (көбө, туҫтаҡ, ижау).

**Светлана ШИТОВА.**
**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

ҺӨНӘРМӘНДӘР

**1 май - Яҙ һәм хеҙмәт байрамы. Төрлө һөнәр эйәләрен берләштергән, уларҙың һәр береһенең кәрәкле һәм алыштырғыһыҙ хеҙмәтен ҙурлау көнө. Бөгөнгө яҙмабыҙ эшсе һөнәрҙәренә эйә булып, үҙҙәренең профессиональ оҫталыҡтары менән һөнәрҙәрен ҙурлап йәшәүселәр хаҡында булыр. Улар араһында һауынсы, ашнаҡсы, штукатур-буяусы, заводта алюмин әйберҙәрҙе ағыулап ҡырыусы һәм башҡалар бар. Һүҙ - хеҙмәт кешеләренә.**

# ХЕҘМӘТ КЕШЕЛӘРЕ...

## һанланһын һәм баһаланһын!



***Гөлсирә ЗИННӘТУЛЛИНА, һауынсы:*** Мин бишенсе йыл шәхси фермерҙа һыйыр һауам. Уға тиклем балалар баҡсаһында ашнаҡсы булдым, мәктәптә мейес яғыусы һәм иҙән йыуыусы булып эшләнем. Быларҙың береһе лә еңел эш түгел, ләкин мин бәләкәйҙән эште күреп, уның рәтен белеп үҫкән ауыл ҡыҙы булараҡ, әллә ни ҡыйынлыҡ күрмәйем.

Хәҙер фермалар һөт һауыу аппараттары менән йыһазландырылған, ҡулға әллә ни көс төшмәй. Бәләкәй сағымда әсәйемдең иртә таңдан тороп колхоз фермаһына эшкә китеүен, унда тиҫтәләгән баш һыйырҙы ҡул менән һауып ҡайтып, өй эштәрен дә эшләп өлгөрөүен, беҙҙе лә эшкә өйрәтеүен күреп-белеп үҫтем. Беҙҙе, балаларын, яңғыҙ ҡарап үҫтерҙе ул. Сикһеҙ ғорурланам уның менән.

Эш көнөм ҡәҙимге: һыйырҙарҙы иртәле-кисле барып һауам. Мал һарайын таҙартыу, бесән таратыуҙы башҡа эшселәр башҡара. Минең бурыс - һөттөң тамсыһын да әрәм итмәй һауып алырға, уны таҙа һауыттарға тултырырға, күпме литр икәнен махсус ҡағыҙға теркәргә, хужаға тапшырырға. Һөт ҡойолған һауыттарҙың, һөт һауыу аппараттарының таҙа булыуы ла минең өҫтә. Ферма йылы, эш шарттары яҡшы, ғөмүмән, зарланырлыҡ юҡ.

Эш хаҡын ҡулаҡса менән 20 мең һум түләйҙәр. Хеҙмәтем рәсмиләштерелгән, тимәк, төрлө социаль түләүҙәр күсерелә, ҡартлыҡ буйынса пенсия юллау өсөн кәрәкле пенсия мәрәйҙәре йыйыла. Әлбиттә, ҡул эше яҡшыраҡ баһаланырға тейештер ҙә, ләкин ауыл ерендә эш урыны һайлау мөмкинлеге юҡ, ә балаларҙы аҫрарға кәрәк. Баҡсала үҫтерелгән аҙыҡ-түлек ашауға тотонолһа ла, аҡсаға ғына алырға мөмкин әйберҙәр ҙә күп бит. Шулай уҡ уты, сүпсар өсөн түләү, кейем, өйгә кәрәкяраҡ - барыһына ла аҡса кәрәк.

Студент улым бер саҡ ҡаланан ҡайтҡанында: "Әсәй, курсташтарымдың ата-әсәләре күбеһенсә офистарҙа эшләй, ручканан ауыр әйбер күтәрмәйҙәр, атайым менән һине, фермала эшләйҙәр, тиһәм, көлөмһөрәп кенә ҡуялар",- тине бошонop ҡына. "Эй, улым, бына беҙҙең һымаҡ һауынсылар булмаһа, улар ниндәй һөт эсер ине, йогурт ашар ине, ә комбайнсылар булмаһа, ниндәй икмәк ашар ине? Беҙҙең хеҙмәтебеҙ арҡаһында ғына уларҙың донъяһы тәмле һәм йәмле", - тинем. Дөрөҫө шул.

***Рәйлә ҒӘЛИМОВА, завод эшсеһе:*** Сит төбәктә йәшәһәм дә, сығышым менән Әбйәлил районынан. Кейәүгә сыҡҡас, ошо ҡалаға килеп төпләндек. 2012 йылдың 1 декабрендә "Уралвагонзавод"ының 113-сө цехына ванналар корректировщигы булып эшкә урынлаштым, ике йылдан шунда уҡ алюмин деталдәрҙе ағыулап ҡырыусы (травильщик алюминиевых изделий) булып күстем. Беҙҙең цехта 250 кеше эшләй. Механик йыйыу цехы тип атала һәм эшмәкәрлегебеҙ заводта етештерелгән техника өсөн бәләкәй деталдәрҙе химикаттар менән эшкәртеп биреүгә ҡайтып ҡала. Махсус костюмдарҙа, бирсәткәләрҙә һәм битлектәрҙә рәсланған технология буйынса эшләйбеҙ. Беҙҙән һуң ул деталдәр буяу цехына китә. Ҙур, гәйрәтле техникалар етештереүгә мин дә бәләкәй генә булһа ла өлөш индерә алыуыма шатмын. Шулай итеп, ул техниканың булыуында, илебеҙгә хеҙмәт итеүендә әллә күпме һөнәр эйәһенең хеҙмәте ята.

Эш ауыр, көнө буйы аяҡ өҫтө тороп эшләйбеҙ. Бер урында 7 йылдан артыҡ эшләһәң, хаҡлы ялға 45 йәштән сығаһың. Мин был пунктты үтәнем, хәҙер йәш буйынса ғына етергә ҡалды. Эшемә өйрәнгәнмен, ҡайҙалыр икенсе урынға күсеү тураһында әлегә уйламайым. Отпускыбыҙ айҙан ашыу беҙҙең, ыңғай яҡтарынан шулай уҡ ташламалы ипотека юллау мөмкинлеге барлығын билдәләп үтер инем, эш хаҡы ла ҡәнәғәтләнерлек. Хеҙмәттәштәремдән уңдым, был да эшкә яҡшы кәйеф менән барыу өсөн мөһим.

Эшләһәң, эш ҡарышмай, үҙ йайына китеп бара. Иң мөһиме, һаулыҡ булһын. Шулай ҙа балаларымдың бындай ауыр эшкә килеүҙәрен теләмәйем. Беҙ уларға мотлаҡ юғары белем алыу, ҙур урындар биләү талабы ҡуймайбыҙ, барыһы ла үҙҙәренең теләктәренә ҡайтып ҡала. Тәү сиратта, һайлаған һөнәрҙәре күңелдәренә ятып, көндәлек тормошта ҡәнәғәтләнеү килтерерҙәй булһын. Һәр хеҙмәт кешеһе лә һанланһын, ваҡытында баһаланһын һәм ситкә тибелмәһен, тип теләйем.

***Альбина ШАҺЫБАЛОВА, штукатур-буяусы:*** Тәү ҡарашҡа, штукатур-буяусы эше еңел һәм һәр кем башҡара алырҙай кеүек тойола торғандыр. Ләкин был төптө хата фекер. Ҡулға шпатель алып, диуарға махсус иҙелмәне һылап сығыр өсөн дә оҫталыҡ, таҫыллыҡ кәрәк. Эшебеҙ заказ ҡабул ителгән объектты анализлауҙан, ҡарап сығыуҙан башлана. Бина ниндәй хәлдә һәм торошта, иҫкеме ул, әллә яңы ғына төҙөлгәнме, ниндәй материалдан эшләнгән, быға тиклем нисек эшләнгән булған һәм башҡалар. Үлсәү эштәре башҡарыла, ниндәй материалдар һәм күпме күләмдә алырға кәрәклеге билдәләнә.

Был өлкәне белмәгән кеше штукатур-буяусы тик шпатель һәм бумала менән генә эшләй, тип уйлай торғандыр. Беҙҙең эш ҡоралдары һәм кәрәк-яраҡтар күп. Улар форма, үлсәм, эшләнгән материалдары менән айырыла. Шулай уҡ штукатурка һәм буяу үҙе бер нисә процестан тора һәм уларҙың һәр береһенә айырым ҡорамал, шулай уҡ бейектә эшләү өсөн баҫҡыстар һәм башҡалар кәрәк. Беҙҙең һөнәрҙә бейеклектән ҡурҡҡан кешеләр эшләй алмай. Төрлө еҫкә үҙ һиҙгер булғандарға шулай уҡ был эштәрҙе башҡарыуы ҡыйын. Саңға аллергия булһа ла, штукатур-малярлыҡҡа юл ябыҡ. Ауыр тоҡтар һәм биҙрәләр күтәрергә тура килә, көнө буйы аяҡ өҫтө эшләйбеҙ, кискелеккә бил ауыртып, ҡулдар ҡыбырламаҫ хәлгә етеп ҡайтып ҡолайбыҙ.

Үҙ эшемде йәмғиәт өсөн кәрәкле һәм файҙалы тип һанайым. Ташсылар, беҙҙең кеүек штукатур-буяусылар, электриктар, сантехник һәм башҡа эшсе һөнәрҙәренә эйә кешеләр булмаһа, йорттар ҙа төҙөлмәҫ ине, ҡалалар ҙа үҫмәҫ ине. Шуға күрә, үҙ эшен оҫта башҡарған, башҡалар өсөн уңайлы йорттар һәм биналар төҙөгән, башҡа өлкәлә эшләгән һөнәрмәндәрҙең байрамы тип билдәләйем 1 майҙы - Яҙ һәм хеҙмәт байрамын.

**Гөлназ МАНАПОВА әҙерләне.**

ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# ҺАЛЙОТ, ТЕРҺӘК, ҺЕҢРӘН, БӘКӘТИН, ҺЫРҘЫ, ШУРАН-

## оло башҡорт иленең кесе ырыуҙары улар



Мәҡәләбеҙҙең башында һалйот, терһәк, һеңрән, бәкәтин, һырҙы, шуран ырыуҙарының Көньяҡ Урал һырттарынан көнсығыштараҡ ятҡан ерҙәрҙә төйәк итеүен иҫкә алғайныҡ. Рус заводчиктары һәм промышленниктары ҡыҫымына эләккән байтаҡ ҡына аҫаба башҡорттар ерҙәрен ташлап китергә мәжбүр була, XVIII быуатта бер-бер артлы башланып торған ихтилалдарҙы баҫтырыу һөҙөмтәһендә лә юғарыла һанап үтелгән ырыуҙарҙың байтаҡ ҡына ауылдары юҡ ителә. Ошондай сәбәптәр менән бәйле уларҙың хәҙерге заманға тиклем һаҡланып ҡалған ауылдары әллә ни күп түгел. Ул ауылдар Силәбе өлкәһенең Арғаяш, Ҡоншаҡ, Ҡәсле, Нязепетровский, Үрге Уфалей, Ҡурған өлкәһенең Шатров һәм Шадрин, Ырымбур өлкәһенең Тоцк, Свердлов өлкәһенең Түбәнге Сергин райондары территорияһында ҡалай. Шулай уҡ Башҡортостандың Илеш, Нуриман һәм Ҡырмыҫҡалы райондарында ла сығыштары менән ошо ырыуҙарҙан булғандарҙы осратырға мөмкин.

Тарихи Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышында, хәҙерге Силәбе, Свердловск һәм Ҡурған өлкәләрендә, байтаҡ ҡына башҡорт ырыуҙарының аҫаба биләмәләре була. Бында йәшәгән халыҡ иҫәбе буйынса иң зурҙарынан табындар (барса башҡорттарҙың 30% ашыуы), әйләләр (20%), ҡатайҙар (19,3%) була. Аҙ һанлылар иҫәбенә һалйоттар (13,4%), һырҙылар (4,1%), бәкәтиндәр (3,8%), терһәктәр (2,5%), һеңрәндәр (2% кәмерәк), шурандар (1,4%) инә. Һыҙы ырыуы вариҫтары ла (2,7%) ошо төбәктә йәшәй.

1730 йылда Өфө провинция канцелярияһы чиновниктары тарафынан төҙөлгән "Башҡорт олоҫтары реестры һәм тасуирламаһы", тип аталған документта ошондай мәғлүмәт теркәлгән: "...волость Челжутцкая за Уралом по озерам и по речкам близ Ухтузских заводов..." Әммә һалйоттар Уҡтус йылғаһы бассейнынан төньяҡтараҡ ятҡан ерҙәрҙә лә билә́гән, был турала һалйот ырыуы башҡорттарының бер ғаризнамәһендә ошолай әйтелә: "... Великие государи пожаловали нашу Салзаутскую волости в Уфимском уезде по Сибирской дороги башкирца Яшагузки Аккузину с товарищи вотчинной нашей прадедов и дедов и отцов вотчины в Уфимском уезде лесом и сенными покосами и пашенными угодьями по реке Ревде и по речке Сысояде и по реке Исети да по речке Решеле да по озеру Сенару да по реке Сенаре же да по речке Багаряку да по озеру Савнину да по речке Торя да по озеру Сохояку да по озеру Алида да озеру Ивдель да по реке Мияссу да по речке Караболке..."

Синара йылғаһы Силәбе өлкәһенең төньяҡ территорияһы буйлап ағып барып, Ҡурған өлкәһендә Исәт йылғаһына ҡоя. Хәҙерге ваҡытта Синара йылғаһы буйында берҙән-бер башҡорт торлағы - һеңрәндәрҙең Ҡарый исемле (икенсе атамаһы - Һеңрән) ауылы бар. Һалйот ауылдары ошо Ҡарый ауылынан көньяҡта һәм көньяҡ-көнсығыштараҡ, Ҡарабол (Караболка) йылғаһы үҙәнендә һәм унан көнсығышҡа табан Маян һәм башҡа вағыраҡ күл буйҙарында урынлашҡан.

Силәбе өлкәһенең Ҡоншаҡ районындағы һалйот ауылдары: Байбуҫҡар (бөткән ауыл), Бараҡ (Карасур, Бөксәй), Баязит, Бүре, Иҡсан (терһәк һәм һалйоттар ҡатнаш йәшәй), Ҡаҙаҡбай, Кесе Ҡаҙаҡбай, Ҡобағош, Ҡунаҡбай, Мүре, Серкә, Солтанай, Хәлит (Тахталым), Чекур, Ҡыҙыл, Кесе Ҡыҙыл.

Нуриман районының Бүрес (Старобирючево), Ҡырмыҫҡалы районының Һалйоғот (Ҡыйышҡы) ауылдарында ла һалйот башҡорттарының вариҫтары бар.

Силәбе өлкәһенең Ҡоншаҡ районындағы терһәк ырыуы ауылдары: Әлифҡол (Алипкулово), Әшир, Мәхмүт, Мөскәй (Мөсәй), Илсеғол (Алама, Терһәк) - хәҙер был ауыл юҡ, Ирәләмбәк - бөткән ауыл.

Свердлов өлкәһенең Түбәнге Сергин районындағы берҙән-бер терһәк ауылы - Араҡай (Терһәк).

Силәбе өлкәһендәге һеңрән ырыуы ауылдары - Ҡоншаҡ районында: Ҡарый (Һеңрән), Йомағол (Һеңрән, Ҡомкүл), Үрге Уфалей районында: Биктимер, һеңрән һәм терһәктәрҙең ҡатнаш ауылдары - Иткүлек (Иткүл) һәм Дауыт. Ырымбур өлкәһенең хәҙерге Тоцк районында һеңрәндәр Ҡыҙыл Мәсет, Ҡондоҙлотамаҡ, Хәсәйен исемле ауылдарҙы нигеҙләгән.

Шулай уҡ Башҡортостандың Илеш районындағы Һеңрән ауылында ла ошо ырыуҙан сыҡҡан башҡорт тоҡомдары йәшәй.

Бәкәтин ырыуы ауылдары, башлыса, хәҙерге Силәбе өлкәһенең Ҡәсле районы ерҙәрендә нигеҙләнгән була. 1957 йылдың сентябрендә "Маяк" предприятиеһындағы аяныслы атом аварияһынан һуң (атомсылар ҡаласығы "Челябинск-40", йәғни хәҙерге Озёрск ҡалаһы) яҡын-тирәләге бәкәтин ауылдары халҡы башҡа ауыл-ҡалаларға күсерелә, шул иҫәптән, Ҡоншаҡ районының Хәлит, Баязит, Ҡобағош ауылдарына, Сосновка районының Лазурный ҡасабаһына һ.б. Бөтөрөлгән бәкәтин ауылдары иҫәбендә Алабуға (Алабугаты), Әлекәй (Фәлекәй), Нурыш, Берҙәнеш, Һатлыҡ, Әмәс исемле ауылдар була.

Силәбе өлкәһенең Арғаяш районындағы һырҙы ырыуы ауылдары: Ҡушбай (Яңы Аяшкүл), Ҡорман (Маяшты), Кесе Ҡорман, Мөсәй (Мөйөштө күле буйында), Яуымбай (Етембай), Кесе Яуымбай, Әбелкәй, Иҙәш, Шәмгүн (Наҙыр, Һаҙғол), Аяҙғол, Ҡорткасыҡ. Был ауылдарҙың ҡайһы берҙәре хәҙер юҡ инде.

Силәбе өлкәһенең Нязепетровский районындағы Аптраҡ, Йосоп, Ҡоншаҡ районындағы Ҡарағайғүл, Шуртаныш ауылдарын шуран башҡорттары нигеҙләгән була.

Геногеографик (этногенетик) тикшеренеүҙәр көнсығыш башҡорттарының килеп сығышын өйрәнеү өлкәһендә иҫәпкә алырлыҡ мәғлүмәттәр таба алды. Әлбиттә, бындай тикшеренеүҙәр әлеге ваҡытта башланғыс кимәлендә генә башҡарылған, генетик маркерҙары билдәләнгән кешеләр әллә ни күп тә түгел. Шулай ҙа улар ҡайһы бер һығымталар эшләү мөмкинлеген бирә.

Һалйот, терһәк һәм һырҙы башҡорттарының төп гаплотөркөмө - N1c1-M178 (N1c1-L1034 субкладзы).

Ҡасандыр хәҙерге Свердлов һәм Силәбе өлкәләре территорияһында йәшәгән фин-уғыр халыҡтарының гаплотөркөмө шул уҡ. Тимәк, әле атап үтелгән башҡорт ырыуҙарының боронғо ата-бабалары ошо географик зонала көн иткән фин-уғырҙар менән этник бәйләнешкә инеп, уртаҡ тоҡом ҡалдыра алыуын фараз итергә була. Әммә һырҙыларҙың бер өлөшөнөң гаплотөркөмө, табын башҡорттарыныҡы кеүек уҡ - R1a1, ә был боронғо һинд-иран сығышлы күскенсе ҡәүемдәргә хас генетик маркер. Тимәк, һырҙыларҙың ата-бабалары ҡасандыр Үҙәк Азияла, Һырдарья үҙәнендә йәшәп, билдәле бер тарихи сәбәптәр арҡаһында Көньяҡ Урал башҡорттарына килеп ҡушылған, тип тә фаразларға була.

Бәкәтиндәрҙең дә бер ни тиклеменең гаплотөркөмө (субкладзы) - N1c1-Y24361, ул алдараҡ телгә алынған N1c1-L1034 субкладына яҡын (һалйот, терһәк, һырҙы). Ә бәкәтин ырыуы бабаларының заманында шул уҡ Урта Азияла йәшәүе хаҡындағы шәжәрә мәғлүмәттәрен нисек итеп генетик яҡтан нигеҙләп була икән? Был факт та дөрөҫләнә: бәкәтиндәрҙең бер өлөшөнөң гаплотөркөмө - O3, ә был Үҙәк һәм Көньяҡ-Көнсығыш Азия халыҡтарында ла йыш осрай. Шул уҡ гаплотөркөм субкладтары ҡалмыҡтарға ла хас - тимәк, тарихсы Б.Ә. Аҙнабаев яҙғанса, XVII-XVIII быуаттарҙа төрлө сәбәптәр арҡаһында байтаҡ ҡына ҡалмыҡ кешеләре Көньяҡ Уралда тороп ҡалып, башҡорттар тарафынан "уллыҡ"ҡа алына (был фәндә адопция, тип атала).

Һеңрән башҡорттарына килгәндә, уларҙа ла ике гаплотөркөм осрай: C3 и R1b. C3 гаплотөркөмө монгол сығышлы халыҡтарға - бүрәттәргә, ҡырым татарҙарының ширин ырыуына хас. Ә R1b гаплотөркөмө бөрйән, ғәйнә һәм ҡайһы бер башҡа башҡорт ырыуҙарының төп генетик маркеры икәне билдәле.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ әҙерләне.**

**(Аҙағы. Башы 12-16-сы һандарҙа).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 76



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

### Мәңгелеккә рейд: бер туғандай үтәнеләр изге Ватан ҡушҡанды

Комдив оборонала торғанда ла, һөжүмгә күсер алдынан да боевой операцияларҙы ентекле разведка мәғлүмәттәренә ярашлы алып барыуҙы талап итә. Ул һәр бер етди ситуацияла штаб начальнигы, гв. полковнигы И. Голенев һәм разведка начальнигы, гв. майоры Мәсрур Гулов менән корпус, дивизия разведкаһы мәғлүмәттәрен барлай, ошо нигеҙҙә һуғыш хәрәкәттәре планын билдәләй. Чернухино янында дошман ҡамауын йырып сығыу планын да тап М.М. Шайморатов тәҡдим итә, уны үҙе үк уңышлы рәүештә ғәмәлгә ашыра.

М.С. Докучаевтың "В бой шли эскадроны" исемле китабында генерал-майор М. М. Шайморатовтың һуңғы алышта һәләк булыуы хаҡында бына нисек яҙылған: "23 февраля, в день годовщины Советской Армии, генерал находился в боевых порядках дивизии, совместно с бойцами и командирами, пошел на прорыв, но был сражен вражеской пулей. Он был душой Башкирской кавалерийской дивизии. Все его знали как высокообразованного военачальника, отважного бойца, верного сына партии и Родины".

Героик комдив менән бергә үлемесле алышта уның тоғро яуҙаштары, офицер һәм һалдаттары йән аямай ҡаршылыҡ күрһәтә, бик күптәре һәләк булып ҡала. Дивизия штабы комиссары Дәүләт Шаһи улы Әриҡолов, реактив установка ("Катюша") аҙаҡҡы залпын биреү менән, ошо дәһшәтле ҡорал яҡынлашып килгән дошман ҡулына эләкмәһен өсөн мөмкин булған һуңғы сараны ҡуллана - үҙе менән бергә установканы шартлата. Дәүләт Әриҡолов Ауырғазы районының Балыҡлыкүл ауылында тыуған, йәш сағында граждандар һуғышында ҡатнаша, 20-30-сы йылдарҙа БАССР-ҙың төрлө райондарында партия һәм совет органдарында эшләй, БашЦИК инструкторы, Осоавиахимдың Үҙәк советы рәйесе була, БАССР Юғары Советының 1-се саҡырылыш депутаты вазифаһына һайлана.

Рейдта саҡта туранан-тура бәрелештәрҙә ҡатнашмаған хәлдә лә, яугирҙарҙы ҡатмарлы поход шарттарында барса кәрәк-яраҡ менән тәьмин итеүсе интендант хеҙмәте офицерҙары - Хәмзә Ҡасимов, Абдулла Дәүләтбаев, Әхмәт Гәрәев, Ғариф Нәбиуллин оло фиҙаҡәрлек күрһәтә, иң киҫкен мәлдәрҙә башҡа яугирҙар менән дошман атакаларын кире ҡағыуҙа ҡатнаша.

Дивизияның медицина хеҙмәтен етәкләгән Александр Сарыгиндың, санинструкторҙар Мөхәмәт Вәлиевтың, Ярулла Ғайсиндың, рядовой санитарҙар Барый Һөйәрғоловтың, Вәлиәхмәт Ғәйнуллиндың тырышлығы менән яу ҡырында яраланған офицер һәм һалдаттарға тейешле ярҙам күрһәтелеп, ғүмерҙәре ҡотҡарыла.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

✓ *Ошо йүнәлеш буйынса тотош стратегия эшләнем. Оҙаҡ фекер алыштылар, әммә бюрократтар был идеяны матур ғына итеп "үлтерҙе". Һәм тиҫтәнән ашыу йыл үткәс, ул бизнес-шерифтар рәүешендә ҡабат килеп сыҡты.*



# ЯЛҠАУҘАР йүнселдәр

**Прогресты ялҡауҙар тыуҙыра, тигәндәй, һуңғы ваҡытта ялҡаулыҡтың сигенә сығып, ҡулланыусыға ғына әйләнеп барыуыбыҙҙы санкциялар булмаһа, бәлки, аңламаҫ та инек. Бөгөн Рәсәйгә төрлө санкциялар ҡулланылғанда, күптәрҙә, нимә эшләрбеҙ, нисек йәшәрбеҙ, тигән һорау тыуа. Шул уҡ ваҡытта ауыл ғына түгел, хатта ҡалала күптәрҙең үҙ баҡсаһы, дачаһы бар һәм ере булған кешенең йәшелсә-емеше үҙенеке. Республика игенде етерлек кимәлдә әҙерләй. Шулай уҡ олатай-өләсәйҙәр кәсебен, боронғо йолаларыбыҙҙы иҫкә төшөрөргә генә кәрәк. Элек бит улар ситтән килгән ризыҡ ашап, ситтән ҡайтҡан кейем кейеп ултырмаған…**

**"Бөгөн шарттар үҙәре үк беҙгә мөмкинлек биргәндә, беҙ нимә эшләй алабыҙ? Үҙегеҙҙе төрлө яҡтан күрһәткән кеше булараҡ, нимәләр тәҡдим итер инегеҙ?" - ошо һәм башҡа һорауҙарыбыҙҙы бөгөн эшҡыуар, "Радость есть" йәмәғәт туҡланыуы селтәре милектәше, финанс консультанты, республиканың Кредит һәм финанс ойошмалары ассоциацияһы ағзаһы, РФ Сауҙа-сәнәғәт палатаһының финанс-сәнәғәт һәм инвестиция сәйәсәте буйынса совет эксперты Ренат ХИЛАЖЕВҡа юлланыҡ.**

- Килеп тыуған хәл, ысынлап та, йүнселдәр өсөн яңы мөмкинлектәр аса, бары тик эшҡыуарҙарға тиҙ генә яраҡлаша белергә кәрәк. Был көн кеүек асыҡ. Ни өсөн эшҡыуарҙар тием, сөнки улар башҡаларҙан тиҙ арала яраҡлаша белергә тейешлегә менән айырыла. Күптән түгел ғаиләмдә фекер ҡороп алдыҡ. Минең яҡындарым план буйынса йәшәп өйрәнгән. Ҡайһы берҙә минең хәл-торошҡа ҡарап тиҙ генә ҡарар ҡабул итеп, йүнәлеште үҙгәртеп ебәреүем уларҙың асыуын ҡабарта, сөнки улар ял көндәрен нисек үткәрәсәге, нимә эшләйәсәге, ҡайҙа барасағы тураһында план ҡороп бөткән, ә мин барыһын да баштүбән әйләндерәм. Ҡыҙымдың өлкәнен шулай тәрбиәләйем: был тормошта мин һине үҙгәреп торған хәлдәргә яраҡлаша белергә өйрәтергә тейеш. Ә инде башҡа белемең - академик белемең, тәжрибәң - әгәр һин ваҡытында тиҙ генә яраҡлаша алмайһың икән, буш ҡыуыҡ ҡына, һин бер ваҡытта ла уңышлы була алмаясаҡһың, һәр саҡ артта ҡаласаҡһың. Был хаҡта мин үҙ балама ғына әйтмәйем, барыһына ла бер үк аҡылды ҡабатлайым: үҙгәрештәргә яраҡлаша белергә һәм быны даими башҡарып торорға кәрәк.

Мәҫәлән, ике йыл элек беҙҙең йәмәғәт туҡланыуы йүнәлешендә фаразлау офоҡтары билдәле булһа һәм ике йылға алдан нимәләр планлаштыра алһаҡ, һуңынан был ваҡыт бер йылға ҡыҫҡарҙы, ә тажзәхмәт килгәс, офоҡтар бөтөнләй юғалды, сөнки планды төшкә тиклем генә төҙөү мөмкин ине - һәр көн яңы үҙгәрештәр алып килде һәм уларға ярашлы ҡарар ҡабул итергә кәрәк булды. Мине был шаңҡытманы, нисек бар, шулай ҡабул иттем һәм быға бер нисек тә йоғонто яһай алмаҫымды аңланым. Шуға күрә ысынбарлыҡтан сығып эш иттем. Эйе, ҡайһы бер ашхана нөктәләрен ҡыҫҡартырға тура килде, әммә коллективтың төп өлөшөн, бизнесты һаҡлап ҡала алдыҡ. Шул уҡ ваҡытта бындай хәлдә йәмәғәт туҡланыуының килем килтермәүен дә аңланыҡ, дөрөҫөн әйткәндә, предприятиеларыбыҙ йылдан ашыу килемһеҙ эшләне. Мин тирә-яғыма ҡарап, ошо юҫыҡта нимә кәрәклеген асыҡланым: эшҡыуарҙарға контрагенттарҙың эшлекле абруйын тикшереү зарурлығы килеп тыуҙы, сөнки түләүҙәр тоткарлана башланы йәки бөтөнләй туҡтаны. Минең бизнес буйынса компетенцияларым ныҡ үҫешкән һәм кредиторҙар түләмәүселәрҙең кем булыуы менән ҡыҙыҡһынып, минә мөрәжәғәт итә башланы... Булған тәжрибәмде иҫкә төшөрөргә тура килде. Бер үк ваҡытта бизнес хужаһы бурыслылар менән артабан нисек эшләү тураһында ҡарар ҡабул итһен, уларҙы нисек үҙ бурыстарын үтәүгә дөрөҫ мәжбүр итһен өсөн мәғлүмәттәр



йыя һәм шунда уҡ бизнесҡа финанстар ылыҡтырыу юлдарын күрһәтә башланым. Күпмелер ваҡыт яңғыҙым эшләһәм, былтыр мартта бизнес өсөн финанстар ылыҡтырыу буйынса компания төҙөргә тәҡдим иткән фекерҙәштәр табылды. Һәм беҙ вәкәләттәрҙе, бурыстарҙы бүлешеп, был эш менән профессиональ рәүештә "РеФи" Финанс мәсьәләләре агентлығы яуаплылығы сикләнгән ширҡәт төҙөп, финанс һәм башҡа мәсьәләләр буйынса хеҙмәт күрһәтә башланыҡ. ***Йәғни үҙ бизнесыңа ғына ҡапланып, тирә-яҡҡа күҙ һалырға ла онtorорға ярамай, унда икенсе мөмкинлектәр ҙә бар һәм уларҙы күрә белергә кәрәк.***

Кеше һәр ваҡыт ашай, шуға йәмәғәт туҡланыуы урындары кәрәк һәм улар һәр саҡ килемле буласаҡ, тип уйлағандарға беҙҙең тәжрибә миҫал булып тора: хатта ҡаланың төп локация урындарында булыуға ҡарамаҫтан, бизнес санкциялар йәки башҡа сәбәптәр арҡаһында килемһеҙ булыуы мөмкин. Әммә төшөнкөлөккә бирелергә ярамай, бер бизнес килемһеҙ икән, икенсе мөмкинлек табып, аҡса эшләргә кәрәк.

Санкцияларға килгәндә, улар мөмкинлектәрҙе киңәйтте генә. Мәҫәлән, минең ике туған ағайым бар. Бөгөн ул Рәсәйҙә кипкән кәзә һөтөн берҙән-бер етештереүсе. Быға тиклем был продукцияның килограмы Яңы Зеландиянан 4500 һумға һатып алына ине. Туғаным үҙ продукцияһын килограмы 1700 һум менән һатты. Бөгөн ул банктар нисә процент менән кредит бирһә лә, уларҙы ҡаплай аласағын белдерә, сөнки баҙарҙа дәғүәсеһе юҡ, ул яңғыҙы һәм артабан нимә эшләргә кәрәклеген белә, ә шул уҡ ваҡытта ҡайһы бер эшҡыуарҙар банк проценттарының артыуына ҡайғыра. Хәҙер туғаныма кәрәкле етештереү ҡеүәтен һатып алырға ғына кәрәк, сөнки голланд кәзәләрен тота, улар көнөнә һыйыр кеүек һөт бирә, шулай уҡ ҡайҙан кәзә һөтө һатып алырға икәнен дә белә һәм тотош Рәсәйҙе кипкән кәзә һөтө менән тәьмин итә ала. Санкциялар ваҡытында ул ошо мөмкинлекте күргән. Башҡа эшҡыуарҙар ҙа бушап ҡалған урында үҙҙәренең мөмкинлеген таба ала.

▸ **Бизнес, тигәндә, һеҙ уның ниндәйен күҙ уңында тотаһығыҙ, сөнки гәзит уҡыусылар, мин бизнесмен түгел, бәләкәй эшҡыуар ғына, тип уйлауы ла ихтимал…**

- Мин бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ тураһында һүҙ алып барам, эре бизнес тураһында түгел. Йылына килеме 300-400 миллион һум булған бизнес - бәләкәй һәм урта, унан юғарыраҡ - эре бизнес. Ә килеме ошо күрһәткестәрҙән түбән булғандар шәхси эшҡыуар һәм үҙмәшғүлдәр. Әммә улар ҙа бөгөнгө хәл-торошта үҙ мөмкинлеген арттыра ала.

▸ **Тимәк, бизнес алып барыу өсөн һығылмалылыҡ кәрәк. Ошо көндәрҙә Россия-24 каналына биргән интервьюһында республика Башлығы Радий Хәбиров та үҙ-ара хеҙмәттәшлек, йәғни берҙәм база булдырыу һәм етмәгән нәмәләрҙе Рәсәй төбәктәре үҙ-ара алмашып йәки бер-береһенә һатып эшмәкәрлек алып барыу зарурлығы тураһында белдерҙе. Ауылдарҙа күп кешенең эшҡыуарлыҡ асырға теләге бар, әммә улар йә тәүге аҙымдарынан уҡ хаталана, финанстар ылыҡтырырға, һуңынан продукцияһын нисек һатырға белмәй - тәжрибәһе етеңкерәмәй. Ошондай теләктәре булған егет-ҡыҙҙар өсөн ниндәйҙер курстар ойошторорға теләгегеҙ юҡмы?**

- Алыҫ райондарҙа эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнергә теләүселәрҙең эш башлауы, уларға кредит биреү - Милли банк рәйесе булып Рөстәм Мәрҙәнов эшләгән ваҡыттан уҡ килгән проблема. Заманында ул республика райондары буйлап күсмә ҡабул итеүҙәр ойоштора ине һәм республиканың Кредит ойошмалары ассоциацияһының әүҙем ағзаһы булараҡ, уларҙа минә лә ҡатнашырға тура килде. Ғәҙәттә, был күсмә сараларҙа банкирҙар, бүлексә начальниктары, банк хужалары, юғары звено етәкселәре райондарға сыға торғайны. "Ниндәй проблемалар бар?" тигән һорауға һәр урында бер генә яуап алынды: "Районда өс банк бар: Һаҡлыҡ банкы, Уралсиб һәм Росельхозбанк. Әгәр улар беҙгә кредит бирмәһә, кредит юллап Өфөгә барырға кәрәк". Һәм улар банктарҙың вәкиллеген асыуҙы һорай ине. Әммә банкирҙар аңлатыуынса, филиал асыу ғына 3 миллион һумға барып баҫа, һуңынан уны тоторға ла кәрәк. Хатта райондың барлыҡ эшҡыуарҙары яңы асылған филиалда хеҙмәтләндерелһә лә, милексе өсөн бының файҙаһы булмаясаҡ. Һәм шул саҡта миндә район хакимиәттәре базаһында консультация үҙәге асыу идеяһы тыуғайны. Шунда бер йәш кешене ултыртырға ла, уны баштан башлап өйрәтергә: нисек документтар йыйырға, нимә ул лизинг, кредит, банк гарантияһы һ.б. һәм уға кемдер ярҙам һорап килә икән, ул ябай рус йәки башҡорт телендә аңлата алһын. Кеше интернеттан эҙләнеп ултырмаһын. Ошо идея менән республиканың Иҡтисад министрлығына сыҡтым, ошо йүнәлеш буйынса тотош стратегия эшләнем. Уның буйынса оҙаҡ фекер алыштылар, әммә бюрократтар был идеяны матур ғына итеп "үлтерҙе". Һәм тиҫтәнән ашыу йыл үткәс, ул бизнес-шерифтар рәүешендә ҡабат килеп сыҡты. Әммә бөгөн был да ярымсара ғына, сөнки ҡайһы бер райондарҙа улар һөҙөмтәле эшләмәй.

Былтыр беҙ Благовар районына сығып, "Үҫеш партияһы" хәрәкәте сиктәрендә һөйләшеүҙәр алып барҙыҡ һәм район хакимиәтенә бизнес-шериф бизнес өсөн сифатлы эштәр башҡарһын, тип, уларҙың базаһында инфраструктура звеноһына тест үткәрергә тәҡдим иттек. Әммә эш тағы ла туҡтап ҡалды. Бөгөн консультация бирергә бизнес-шерифтар булһа ла, бизнесты финанслау өлкәһендә проблема барыбер ҙә һаҡланып ҡалды.

▸ **Әгәр ун йылға кире ҡайтыу мөмкин булһа, һеҙҙең ҡуҙаллау буйынса эш нисек алып барылырға тейеш ине?**

- Шул ваҡытта мин консультация үҙәктәрендә эшләйәсәк йәш белгесте тулыһынса өйрәтергә тәҡдим иткәйнем. Үҙемдән ҡеүәтле штатлы офисым, хәҙер банктар ҡулланған шифрлы бәйләнеш каналы ла бар ине. Минең уйымса, үҙәк белгесе эшҡыуарҙың беренсел документтарын йыйып, беҙгә ебәрергә, ә бында беҙ, үҙебеҙҙең абруйҙы файҙаланып, сифатлы проекттар буйынса ризалыҡ алып, район белгесенә төп документтарҙы йыйырға ҡушыр инек. Документтар пакеты йыйыла, беҙгә ебәрелә, беҙ уны кредит комитетына алып барабыҙ, ҡарар көтәбеҙ һәм райондағы эшҡыуар Өфөгә бары тик кредит килешеүенә ҡултамға ҡуйырға ғына килергә тейеш ине. Консультатив үҙәктәр төҙөлмәү арҡаһында эшҡыуарҙар баш ҡалаға айҙар буйына йөрөргә мәжбүр була. Өҫтәүенә, ул үҙе лә финанс грамотаһына эйә түгел, ә бында банкта ярымграмоталы хеҙмәткәргә тура килһә, уны яңылыш консультация, ярым-ярты мәғлүмәт менән ҡайтарып ебәрәсәктәр. Һәм беҙ бер аҙнала осона сыға торған ябай кредит алыу процесын ҡулсалағы тейен йүгереүенә әйләндерәбеҙ - кеше

***✓ Әлеге ваҡытта беҙҙә баһаланып бөтмәгән бер генә ресурс ҡалған, ул да булһа - ер, сөнки башҡа активтар күптән бүлгеләнгән. Ерҙең баһаһын халыҡ әле аңлап бөтмәй.***



# СӘБӘП ЭҘЛӘЙ,

## мөмкинлек таба

яртышар йыл Өфө юлын тапарға мәжбүр була. Ә бит мин бынан 10 йылдан ашыу элек ҡыҫҡа ғына ваҡытта кредит алыу мөмкин булған ҡорал тәҡдим иткәйнем. Бөгөн был ҡорал тағы ла ҡеүәтлерәккә әйләнде. Элек Өфөгә ҡултамға ҡуйырға килергә генә кәрәк булһа, хәҙер иһә бөтөнләй килеп тороу ҙа кәрәкмәй - барлыҡ документ әйләнеше электрон форматта алып барыла, әммә банктар һәр кешене ентекле тикшерә. Әгәр инде кредит алырға лайыҡлы тип табылған осраҡта, хатта иҫәп асып торорға ла кәрәкмәй - ниндәй иҫәбегеҙ бар, аҡсаны шунда күсерәләр. Беҙ бындай алым менән республикала ғына түгел, тотош Рәсәйҙә эшләйбеҙ.

**Ләкин, әйтеп үтеүегеҙсә, халыҡ, хатта бизнес башларға йөрьәт итеүселәр ҙә финанс йәһәтенән грамотаһыҙ һәм быны гәйепләү йәки кәмһетеү тип ҡабул итергә кәрәкмәй, ә ысынбарлыҡ шулай. Бөгөн бизнесҡа ярҙам итеү буйынса дәүләт тарафынан нимәләр эшләнә - ошо хаҡта ла ҡыҫҡаса һөйләп үтегеҙ әле.**

- Бизнесҡа ярҙам итеү тураһында һүҙ алып барғанда, ундай ҡоралдар бар. Мин хатта финанс темаһын аңлаған кеше булһам да, был банк тураһында ла, уның эше тураһында ла хәбәрҙар түгел, дөрөҫөн әйткәндә, әгәр ҡайҙалыр уҡыһам да, ышанмаҫ инем. Ғәмәлдә иһә, дәүләт банкында льготалы программа буйынса бер-ике аҙнала 10 миллион һумға тиклем залогһыҙ, иң түбән - 15 процент ставка менән кредит алырға мөмкин. Әммә проблема нимәлә: эшҡыуарҙар был турала белмәй һәм финанстар алыу өсөн ниндәй критерийҙарға тап килергә тейеш булыуҙарын аңламай. Ә талаптар бик ябай: аҡса рәхсәт ителгән ҡануниәт ҡырында әйләнергә тейеш һәм шуға күрә финанстарҙы ҡулаҡсалата алып булмай - кредитты ҡорамал, сеймал һатып алыуға күсерәһең. Шулай уҡ бизнесың да асыҡ булырға - әйләнеш бухгалтерия аша үтергә, бухгалтерия эше сифатлы алып барылырға тейеш. Беҙҙең бизнесмендарҙың төп бәләһе ошо бухгалтерияны алып барыуҙа, дөрөҫөрәге, алып бармауҙа һәм ҡулаҡса менән эшләүҙә. Былай эш итеүҙә улар бер мәлдә генә ота - һалым түләүҙә экономиялай, әммә нығ отола, сөнки дәүләт ярҙамы программаһы менән файҙалана алмай.

**Мәғлүм булыуынса, 2008 йылда ла көрсөк кисерҙек. Бөгөнгө хәлдәр менән уҙған көрсөк араһында айырма бармы?**

- 2008 йылғы көрсөк ваҡытында ла Хөкүмәт бәләкәй эшҡыуарлыҡҡа ярҙам итеү өсөн ҙур күләмдә аҡса бүлде, әммә финанстар бизнесҡа барып етмәне. Ул ваҡытта мин төрлө компаниялар менән эшләй инем һәм улар Рәсәйҙең эре компаниялары менән туранан-тура килешеүҙәр төҙөгәйне, әммә уларға кредит биреүҙән баш тарттылар һәм шул мәлдә льготалы кредиттар бирелеүе тураһында мәғлүмәт сыҡты. Ишетеү менән банкта эшләгән дуҫтарыма килдем, ә улар идара рәйесе, урынбаҫарҙар кимәлендә, һәм ошо льготалы кредитты алыу тураһында һүҙ ҡуҙғаттым. Улар миңә: "Нимәгә беҙгә бизнесҡа кредит бирергә, дефолт булыуы ла ихтимал, иң яҡшыһы - беҙ фонд йәки валюта баҙарында әйләндерәбеҙ йәиһә үҙ-ара иҫәпкә һалабыҙ ҙа, һис бер хәүефһеҙ йылына 17 процент ставка килеме алабыҙ", йә "Дуҫ, юҡҡа көймә, беҙ ул аҡсаларҙы урынлаштырҙыҡ инде", - тиҙәр.

Бөгөн иһә хәл башҡасараҡ: льготалы кредиттар бирелә һәм улар бизнесҡа барып етә. Мәҫәлән, программа эшләй башлауҙың икенсе-өсөнсө көнөнә үк беҙҙең ике клиент раҫлау алды һәм аҡсаларын, ҡабаттан иҫәп асмайынса, комиссияһыҙ һәм залогһыҙ алаҫаҡ. Был аҡсаларҙы бизнесҡа бәйле теләһә ниндәй маҡсатта тотонорға мөмкин, иң мөһиме - эшҡыуарҙар ошондай программаның барлығын һәм уның ысынбарлыҡта эшләүен күрһен һәм ышанһын.

**Финанс грамотаһын үҫтереүҙе нимәнән башларға тәҡдим итер инегеҙ? Мәҫәлән, кемдер һеҙҙең менән әңгәмәне уҡып, дәртләнеп китер…**

- Миңә был йәһәттән Роберт Киосакиҙың "Богатый папа, бедный папа" китабы ныҡ ярҙам итте. Тәүге белемем буйынса мин тарихсы. Студент сағымда фән профессорҙарының, академиктарҙың нисек йәшәүен күреп уйлана инем: әгәр академиктар үҙҙәренә лайыҡлы тормош тәьмин итә алмай икән, йәш белгес нимә эшләргә тейеш? Эйе, үҙең һайлаған һөнәр буйынса уҡыуы ҡыҙыҡ, әммә мәғәнәһеҙ. Шуға артабан бизнес тураһында төрлө китаптар уҡый, белемемде камиллаштыра башланым. Киосаки, әгәр эшҡыуар булырға теләһәгеҙ, һеҙ финансистарҙың ҡош телен белергә тейешһегеҙ, ти. Шуға, теләһә ниндәй популяр бизнес-журнал алаһығыҙ ҙа уҡый башлайһығыҙ. Һүҙҙәрҙе күсереп яҙып алаһығыҙ һәм уларҙың мәғәнәһенә төшөнәһегеҙ, эҙләйһегеҙ, һорашаһығыҙ. Һуңынан ауырыраҡ әҙәбиәткә күсәһегеҙ. Мин тарих факультетында уҡығанда махсус рәүештә яңы тарих йүнәлешен һайланым, сөнки унда иҡтисад классиктары әҫәрҙәрен уҡырға мәжбүр итәләр ине. Өсөнсө курста иҡтисади процестарҙы аңлай башлағайным инде. Һуңынан иҡтисади романдарға күстем, артабан махсус журналдар, монографиялар... Тәүҙә бер нәмә лә аңламайһың, аңлау һуңынан килә. Йәғни уңышлы кешеләрҙең бер үҙенсәлеге бар: һөҙөмтә нисек булырын белмәй, әммә тота ла эшләй башлай. Мин дә шулай - тоттом да эшләй башланым.

**Хәҙер һәр мәктәптә үк булмаһа ла, белем биреү системаһына финанс грамотаһына өйрәтеү алып барыла…**

- Эйе, был шәп программа һәм мин уның барлыҡҡа килеүенән алып ҡатнашам, бағымсылыҡ ярҙамы ла күрһәтәм, жюри составында ла булам. Ул балаларға финанстар буйынса фундаменталь белем бирә. Ошо йүнәлештә олимпиадаларҙа ҡатнашып еңеү яулаусылар Рәсәйҙең теләһә ҡайһы финанс вузына имтиханһыҙ ҡабул ителә.

Үҙем уҡып сыҡҡан Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты етәкселеген оҙаҡ йылдар ошо программаны үҙҙәрендә индерергә өгөтләнем, шул арала әллә күпме директор алмашынып өлгөрҙө. Хәҙер, Аллаға шөкөр, улар был программала ҡатнаша. Башҡортостанда Шишмә районы был йәһәттән алда бара. Унда бер уҡытыусы был программаның фанаты һәм маҡсатлы рәүештә йыл һайын олимпиадала ҡатнашыусылар әҙерләй. Бер генә миҫал килтереп үткем килә: быйыл иҡтисад буйынса олимпиадала пьедесталдың барлыҡ урындарын да Башҡортостан уҡыусылары биләне һәм уларҙың күпселеге Шишмә районынан булды. Уның уҡыусыларының ҡайһы берҙәре Юғары иҡтисад мәктәбен тамамланы ла инде. Был олимпиадаларҙа ҡатнашыуҙың тағы бер яғы бар: студент, әгәр вузда уҡыу йылдарында ла олимпиадала ҡатнашыуын дауам итһә, ул юғары стипендия ала. Мәҫәлән, минең бер дуҫым химия буйынса олимпиадаларҙа ҡатнашып, Ер шарының яртыһын урап сыҡты. Уның стипендияһы вуз уҡытыусыларының эш хаҡынан күпкә юғарыраҡ булды. Иркен йәшәне һәм юғары уҡыу йортон тамамлағанда уның миллион һум капиталы бар ине. Шуға күрә финанс олимпиадаһын әүҙемләштереү бик файҙалы, бер яҡтан, үҙеңдең белемең арта, икенсе яҡтан, финанс хәлендә яҡшырта алаһың. Шулай уҡ олимпиадала ҡатнашыусылар банк эшен өйрәнеүсе теләһә ниндәй студенттан өҫтөнөрәк тора, сөнки улар беҙҙе уратып алған ысынбарлыҡты өйрәнә.

**Финанс олимпиадаларға әҙерләүҙә ябай мәктәп уҡытыусыһы башҡара аламы, әллә уның иҡтисад, финанстар буйынса белеме булырға тейешме?**

- Был программа федераль кимәлдә алып барыла һәм бик көслө методология эшләнгән. Проектҡа ҡушылған мәктәптәр ошо шәп дәреслектәрҙе ала һәм ҡуллана. Унда барыһы ла ябай һәм аңлайышлы итеп бирелә. Был уҡыусылар өсөн бик файҙалы һәм ни тиклем күберәк мәктәптәр финанс грамотаһы буйынса олимпиада хәрәкәтенә ҡушыла, Рәсәйҙең финанс күгендә Башҡортостандың сағыу йондоҙсоҡтары күберәк ҡабынасаҡ.

**Бөгөнгө көндә хатта банкирҙар ҙа эшһеҙ ҡала, санкциялар арҡаһында күптәр эшен юғалта, эшһеҙлек арта. Шул уҡ ваҡытта башҡорттар һаман үҙ ерендә йәшәй һәм санкциялар ауыл халҡына бигүк ауырлыҡ килтермәҫ, сөнки үҙ ерендә йәшәп-эшләп, кәсепселек менән дә шөғөлләнергә мөмкин бит…**

- Ауылда үҙ ерендә йәшәүселәр ризыҡ менән дә, башҡаһы менән дә тәьмин ителгән. Хәҙерге технологиялар, интернет заманында үҙеңдең ауылың, районыңдан сыҡмай ғына нисек итеп ил кимәлендә бизнес алып барыу мөмкинлектәрен ҡарарға ғына кәрәк. Ауыл өсөн кәсепселек бик ҡулай. Ул халыҡ өсөн дә, туристар өсөн дә ҡыҙыҡлы. Ә беҙҙә эске туризм артабан да үҫешәсәк, тимәк, һәр районды үҙенең туристик маршруттары популярлаштырыласаҡ. Бында шуны ла әйтеп үткем килә: кешеләр бизнес тураһында яңылыш фекерҙә, йәнәһе лә, бизнес башлап, бер нисә йыл ең һыҙғанып эшләйһең дә, һуңынан һиңә ялланып эшләйҙәр, ә һин рәхәтләнеп ял итәһең. Бындай бизнес бик аҙ ҡалып бара. Хәҙер күберәген ғаилә бизнесы, үҙмәшғүллек киң тарала. Бында һин үҙеңә эшләйһең, бер кемгә лә буйһоноулы түгелһең һәм дәүләткә йәки кемгәләр ялланып эшләгәнгә ҡарағанда күберәк килем алаһың. Мәҫәлән, 5-6 йыл элек Рәсәйҙә әйәр эшләүсе бер генә белгес бар, ул да булһа Алтайҙа ине. Бөгөн улар күбәйеп киткәндер тип әйтә алмайым. "Мәргән уҡсы" Юлай Ғәлиуллин бер саҡ "Бөгөн боронғо арба эшләүсе оҫтаны табып булмай", тигәйне. Йәғни, арба эшләүселәр бар, әммә уның тәгәрмәсе йә тимерҙән, йә резинанан була, сөнки ағас тәгәрмәс эшләүселәр юҡ һәм уны нисек эшләргә икәнен белгән кеше лә юҡ. Йүгәнде лә яңы саҡ эшләй башланылар. Уҡ-ян менән дә шундай уҡ проблема. Хәҙер хеҙмәт емешеңде Рәсәйҙә генә сығарһаң, санкциялар ғүмерлек булмаҫ, моғайын, һуңынан уларҙы донъя баҙарына сығарырға мөмкин. Беҙҙең донъя баҙарына тәҡдим итерлек нәмәләребеҙ бар, бары тик был мәсьәләгә етди ҡарарға кәрәк.

***Әлеге ваҡытта беҙҙә баһаланып бөтмәгән бер генә ресурс ҡалған, ул да булһа - ер, сөнки башҡа активтар күптән бүлгеләнгән. Ерҙең баһаһын халыҡ әле аңлап бөтмәй. Хәҙер, моғайын, ниндәйҙер хәрәкәт булыр, кешеләр пайҙарын нисек ҡулланырға, унда нимә эшләргә һәм нисек килем алырға икәнлеген уйлай, өйрәнә башлар. Бында бары тик әүҙем тормош позицияһы булырға тейеш.***

Эшендә үҙмәшғүл булып теркәлеп башлаһаң, ябайлаштырылған һалым түләйһең, шул уҡ ваҡытта эшҡыуар булараҡ легалләшәһең һәм бер йылдан һуң миллион һумға тиклем льготалы, залогһыҙ, түбән ставкалы кредит алыу мөмкинлегенә эйә булаһың. Аҙаҡ инде шәхси эшҡыуар булып теркәлергә һәм артабан үҫергә мөмкин.

**Үҙмәшғүллек, кәсепселек тиһәк тә, етештергән тауарыңды ҡайҙалыр һатырға ла кәрәк бит. Әлегә тиклем беҙҙә Тик-Ток, инстаграм, ютуб бик популяр ине, улар ябылды. Тағы ҡайҙа реклама яһарға мөмкин?**

- "Бәйләнештә" селтәрен береү ҙә япмай, шулай уҡ Телеграм бар. Әгәр һин үҙ эшеңде тәҡдим итергә теләһәң, гаджеттағы ниндәй ҡушымталарҙы файҙаланырға, улар менән нисек эшләргә өйрәнергә тейешһең. Мәҫәлән, бер дуҫым Инстаграмда реклама өсөн генә айына 1-3 миллион һум аҡса тотона ине, әммә ошо сығымдарҙан күпкә күберәк килем алды. Инстаграмды япҡайнылар, ул "Бәйләнештә" селтәрендә рекламаға аҡса һала башланы. Интернетты ҡуллана белгәндә мөмкинлектәр күп, әммә быны өсөн дә уларҙы яҡшы белергә кәрәк. Аллаһы Тәғәлә беҙгә кәсепселекте лә, мөмкинлекте лә умырып биргән, ҡуллана ғына белмәйбеҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП…**

**Ялҡауҙар сәбәп эҙләгәндә, тырыштар мөмкинлек таба, тип юҡҡа әйтмәйҙәр. Теләге булған кеше көрсөктә лә үҙ файҙаһына бора: тота ла эшләй башлай. Шул уҡ ваҡытта уның төшөнкөлөккә бирелеп ултырырға ваҡыты ла юҡ, ул позитив көйләнештең ыңғай һөҙөмтә биреренә бар күңеленән ышана. Һәм тағы: әңгәмәсем әйтеүенсә, хыялыңды һәр саҡ ҡағыҙға яҙып ҡуйырға кәрәк. Ҡағыҙға теркәмәй генә хыялланһаң, ул хыял ғына булып ҡаласаҡ, ә ташҡа яҙылһа - ул маҡсатҡа әүерелә. Хатта уның нисек һәм ниндәй юлдар аша тормошҡа ашырын үҙең дә аңламаҫҡа мөмкинһең, әммә был ысул эшләй. Бөгөнгө әңгәмәнең төп һабағы шунда: хыялыңды тормошҡа ашырырға теләйһең икән - иң элек уны теркәп ҡуй, маҡсатҡа әйләндер һәм уның тормошҡа ашырыуына ышан, белемеңде даими камиллаштыр, һайлаған юлыңда һығылмалы бул.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.**

**✓ "Ә икенсеһе кем? - Император ҡарауыл етәксеһе биргән икенсе ҡағыҙ битен асты. - Полковник Ҡудашев. Үҙе башҡорттан икән. Нимә-нимә? Батшалыҡтың милләттәргә мөнәсәбәте менән килешеп бөтмәйме?"**



Ғәлим ХИСАМОВ

# ПАРИЖДА



**(Романдан өҙөктәр)**

***Быйыл Рәсәй Федерацияһы 1812 йылдағы Ватан һуғышына 210 йыл тулыуҙы билдәләйәсәк. Шул айҡанлы яҙыусыбыҙ Ғәлим Хисамов "Француз яуы" тип исемләнгән роман яҙҙы. Иғтибарығыҙға ошо әҫәрҙән өҙөктәр тәҡдим итәбеҙ.***

## Еңеүтуй

Еңеүсе хәрби көстәрҙең Парижға инеп урынлашыуына аҙна самаһы уҙғас, полковник Ҡудашев бер яңғыҙы ғына Париж урамдары буйлап сығып китте. Бүтән офицерҙар һәм генералдар менән "еңеүҙе йыуа-йыуа" ла ялҡып бөттө. Шуға былай ғына, эшһеҙлектән урам тапарға булды. Арыу уҡ ер үтеп, таш йорттарҙы ҡарап, берәй күләгәлә ултырып ял итәйем әле, тип китеп бара ине, ҡаршыһына аттарын етәкләгән икәү килә. Бәй, таныштар һымаҡ та былар. Тегеләр үҙ-ара һөйләшә-һөйләшә атлай, Ҡудашевҡа боролоп та ҡарамайҙар. Хәрби тәртип буйынса офицерға сәләм бирергә тейештәр ҙә бит, Париж буйлап йөрөгән офицер эт тубығынан тиерлек, уларҙың һәр береһенә сәләм бирә башлаһаң... Шуға күрә Ҡудашевтың үҙенә һүҙ өндәшергә тура килде:

- Әссәләмәғәләйкүм, егеттәр!

Тегеләр ят ҡалала үҙҙәренең телендә өндәшкәнде ишетеп, аптырап ҡалды. Береһе алданыраҡ айнып китте:

- Вәғәләйкүммәссәләм...

- Кемдәр һеҙ? Ни эшләп йөрөйһөгөҙ?

- Беҙ ни башҡорт казактары, ат эсерергә тип йылғаға китеп барабыҙ.

- Исемдәрегеҙ кем?

- Мин Әбделғәле Әбдрәшов булам. Ул Бикҡол Әлембәтов.

- Ә мин полковник Ҡудашев.

- Һине беләбеҙ, Мәскәү эргәһендә "Маладис"ты йырларға саҡырғайның.

- Үәт рәхмәт, онотмағанһығыҙ икән. Унан һуң күпме ғүмер үтте, һыу аҡты, тигәндәй.

- Үҙебеҙҙең кешеләр онотола теймени?

- Һеҙҙең командирығыҙ кем хәҙер?

- Элеккесә майор Ыласынов.

- Ул ҡайҙа?

- Ана анауында Булон урманында, ҡыуышта ята.

- Мине шунда алып барығыҙ әле.

- Әйҙә. Беҙгә ни. Барыбер әллә ниткән эш юҡ. Аттарҙы һуңынан һуғарырбыҙ әле.

Бер аҙҙан яугирҙар ҙур бер сиркәү янында ҡоролған ҡыуыш янына килеп туҡтаны.

- Бына ошонда ул,- тине Әбделғәли.- Майор Ыласынов, - тип ҡысҡырып та ебәрҙе.- Һиңә полковник килгән.

Шуны ишетеү менән аяғына итеген кейә-кейә көлдәксән Ыласынов килеп тә сыҡты. Үҙе итек ҡунысын тарта, үҙенең ике күҙе килеүселә. Күрҙе лә ҡысҡырып та ебәрҙе:

- Ҡудашев ағай, әйҙүк. Эй, күргем килгәйне. Хоҙай үҙе әшкәрткәндер инде.

Ирҙәр ҡосаҡлашып күреште, шунан ҡыуышҡа инделәр. Ҡудашев тар ғына ҡыуышты ҡарап алды ла:

- Янында ғына ниндәй ҙур сиркәү тора. Шунда инеп урынлашмай ни. Нисәмә йыл буйына ҡыуыштан ялыҡҡанһыңдыр инде.

- Ҡыуыш бит үҙебеҙҙеке. Үҙеңдеке ялҡытмай ул. Сиркәү бит Алла йорто. Унда ятып йөрөү килешмәй.

- Эй, бер ҡатлы башҡорт. Парижды алһаң да һаман яп-ябай әҙәм булып ҡалаһың инде.

- Полковник ағай, һин бит ҙур кешеһең, миңә бүтән аҡыл бир әле.

- Ниндәй?

- Беҙ бында башҡорттарҙан биш атлы полк кешебеҙ. Өҫтәүенә, йәйәүлеләр, типтәрҙәр, мишәрҙәр полктары бар. Шулар бергәләшеп һабантуйы... һабантуй түгел инде, шуның кеүек итеп Парижды еңгән өсөн байрам яһайыҡ тигәйнек. Хатта уның исемен дә уйлап сығарҙы бер егет - Еңеүтуй. Шуны ойоштороп, бейеп, йырлап, ҡурай, ҡумыҙ тартып, ашап-эсеп, бер күңел асып алайыҡ, тигәйнек.

Ҡудашев:

- Ат сабыштырып, көрәшеп, йүгерешеп, һикереп, тип тә өҫтә.

- Эйе, бәйгеһеҙ ниндәй байрам була ти инде. Шуға һеҙҙең кеүек үҙебеҙҙең иң яҡын командирҙарҙы саҡырайыҡ тигәйнек.

- Шуға күрә һиңә үтенес: императорҙы күреп, башҡорттарҙың саҡырыуын еткерергә ине. Мине һанаттары ул тирәгә яҡын да юллатмаясаҡ бит.

- Дөрөҫ самалайһың. Батша янына ингәнсе, Алла эргәһенә барыу еңелерәк, тиҙәр.

- Шуға, генерал әфәнде, башҡорт яугирҙары исеменән үтенеп һорайым.

- Башҡорттар исеменән урыҫ кешеһенең йөрөүе килешеп бөткән эш түгелдер, моғайын. Шуға күрә, әгәр һағауылдары үткәрһә, беҙ ғали йәнәптәре янына икәүләп барайыҡ.

- Ярар.

Императорҙың ҡарауыл башлығы генерал менән полковниктың үтенесен батшаға еткерерҙән алда, уның янына инергә теләүселәрҙең кемлеген, ни эшләп йөрөгәндәрен ҡат-ҡат тикшерҙе. Үҙҙәре янына Ҡудашевты ике тапҡыр саҡырҙылар. Һорашмаған нәмәләре, ныҡышмаған һүҙҙәре ҡалманы тиерлек. Шунан ғына ҡарауыл етәксеһе былар тураһында Александр Беренсегә еткерҙе.

- Кемдәр улар минең янға инергә теләүселәр? Генерал Платовмы? Платовты бер аҙ беләм. Ул нимәһен ҡарап башҡорт исеменән йөрөгән була һуң? Ә-ә, башҡорт полктары менән һуғышта идара иткән өсөн инде. Башҡорттар яҡшы һуғыша, тип ул һөйләй торғайны бит әле. Ә икенсеһе кем? - Император ҡарауыл етәксеһе биргән икенсе ҡағыҙ битен асты. - Полковник Ҡудашев. Үҙе башҡорттан икән. Нимә-нимә? Батшалыҡтың милләттәргә мөнәсәбәте менән килешеп бөтмәйме? Ә нисек һуғыша был полковник? - Император һаҡсылар башлығына текәлде.

- Яҡшы һуғыша, тиҙәр. Ҡайһы берҙә ҡул һуғышына ла инеп киткеләй икән. Бер яуҙа ике французды ҡылыс менән сабып үлтергән.

- Ярар, милләт мәсьәләһенә әлегә инмәй торорбыҙ. Беҙ бит әлегә байрам итәбеҙ. Саҡыр Платов менән Ҡудашевты.

Генерал менән полковник император алдына баҫып, тураҡаткайны, Александр:

- Байрам иткегеҙ киләме?- тине.

- Байрам беҙҙән бигерәк башҡорт казактарына кәрәк. Өс йыл туҡтауһыҙ һуғыштылар бит. Яугирҙарҙың атаһы - императорыбыҙ ҙа уларҙың араһында булһа, һуғышсыларҙың күңеле үҫеп китер ине, - тип теҙҙе генерал.

- Күңеле үҫер ине, тиһең инде. Ниндәйерәк байрам инде ул?

Генерал һөйләй генә башлағайны, император уны бүлдерҙе.

- Был һорау полковникка. Милли байрамды ул яҡшыраҡ беләлер, тип уйлайым.

- Ғали йәнәптәре, башҡорттар яҙ көнө эш бөткәс, һабан туйы үткәрә. Дошманды ҡыйратҡандан һуң яугирҙар - элекке игенселәр бит инде - еңеү байрамын көҫәйҙәр. Һабантуй кеүегерәк итеп еңеү туйы яһағанда, мәңге онотолмаҫлыҡ хәтирә булып ҡалыр ине. Әгәр унда ғали йәнәптәре ҡатнаша алһа, тарихи ваҡиға булыр ине был байрам.

- Ярар, мин һеҙҙең туйҙа ҡатнашырмын. Тик оҙаҡҡа һуҙмағыҙ.

- Мәҫәлән?

- Мәҫәлән, генерал Платов, Денис Давыдов, генерал Шушпанов...

- Дөрөҫ уйлайһың. Үҙегеҙ менән һуғыш юлын үткән командирҙарҙы саҡырып, байрам күрһәтеп, ҡунаҡ итһәгеҙ, тап беҙҙеңсә була. - Ҡудашев саҡ ҡына шым торғандан һуң өҫтәне.- Императорҙың үҙен саҡырғанда ла яҡшы булыр ине. Юҡһа, күргән һайын "Башҡорттар нишләй анда?" тип һорай ҙа тора, тип һөйләй торғайны генерал Платов. Үҙ күҙҙәре менән күрер ине башҡорттарҙы.

- О-о! Һин, ағай, бигерәк елленән ебәрҙең. Император беҙҙең янға килер тип уйлайһыңмы?

- Әллә. Беҙҙән саҡырыу, ҡалған яғын үҙе ҡараһын.

- Ярар һуң. Тик саҡырыу мәшәҡәттәрен һинең үҙеңә алырға тура килер. Беҙгә әҙерлек эштәре лә баштан ашҡан буласаҡ. Батшаһыҙ табын бер төрлө, батшалыһы - бөтөнләй икенсе.

- Эйе, мәшәҡәт күп буласаҡ.

Ҡудашев был һөйләшеүҙе тормошҡа ашырыр өсөн иң алдан Платов янына барҙы. Беренсе Башҡорт полкында булған хәл тураһында һөйләп биргәс:

- Генерал, - тип өндәште Ҡудашев, - император менән яҡын әшнә булмаһаң да, уның янында булғылайһың бит.

- Эйе, кәңәшмә кеүек хәрби советтарҙа ҡатнашам.

Һабантуйҙарҙа мәртәбәле ҡунаҡтар өсөн махсус тирмә ҡуйыла, ярыштарҙы ҡарар өсөн тирмә алдына йәтешләп урын яһайҙар. Тик Парижда император өсөн ҡуйырлыҡ тирмәне ҡайҙан алаһың да, күп ҡунаҡ өсөн ниндәй генә урын яһайһың? Уйлаштылар-уйлаштылар ҙа, тирмәгә оҡшатып, таҡтанан ҡоролма яһарға һәм шунда уҡ уңайлы ултырғыстар ҡуйырға булдылар. Ҡоролманың иҙәненә ҡалын кейеҙ менән келәм йәйҙеләр, ултырғыстарҙы йомшаҡ тире менән көпләнеләр.

Еңеү туйын башларға бар нәмә лә әҙер булғас, Булон урманы болонона бер төркөм һыбайлы килеп инде. Иң алда Рәсәй императоры Александр Беренсе, янында Пруссия короле Фридрих-Вильгелм Өсөнсө, саҡ ҡына ҡалыбыраҡ маршалдар, генералдар теҙелгән. Болондоң башында уларҙы һыбай полковник Ҡудашев ҡаршыланы. Үҙе менгән аттың башы Александрҙыҡы менән тиңләшкәс:

- Ғали йәнәптәре императорыбыҙ Александр Беренсе, - тип башланы Ҡудашев. - Һеҙҙең тоғро яугирҙарығыҙ Беренсе, Икенсе, Дүртенсе, Бишенсе, Туғыҙынсы Башҡорт полктары һуғышсылары Парижды алыу айҡанлы ойошторолған еңеү туйына әҙер.

Шул уҡ мәлдә борғо уйнап ебәрҙе һәм Ҡудашев атын кире яҡҡа борҙо, Александрҙың аты уның хәрәкәттәрен ҡабатланы һәм юртып барып, байрам ҡоролмаһы янына туҡтаны. Шуны ғына көткән байрамса кейенгән башҡорт егеттәре, йүгерешеп килеп, аттарҙың башынан алды. Һыбайҙар ергә һикереште һәм император артынан иҙәненә келәмдәр йәйелгән ҡыйыҡ аҫтына инделәр. Былар затлы ултырғыстарҙан урын алыуы булды, Ҡудашев император алдына баҫты.

- Ғали йәнәптәре, Еңеү туйына бөтөнөһө лә әҙер. Башларға рөхсәт итегеҙ! - тине.

- Башлағыҙ! - тине Александр.

Ҡудашев күтәрелгән ҡулын төшөрөүе булды, ҡоролма алдына теҙелеп өлгөргән ҡурайсылар уйнап та ебәрҙе. Улар тыныу менән уртаға ап-аҡ елән, башына ҡыҙылдан осло бүрек кейгән егет сыҡты:

- Һеҙҙең алдығыҙҙа ғәскәребеҙҙең ҡурайсылары "Париж маршы"н башҡарҙы. Көйҙө кисә генә ҡурайсыларҙың етәксеһе Ҡаһым Мырҙашев сығарған. Ҡурайсылар араһында торған Ҡаһым баш эйҙе һәм ҡоролма янында торған дөмбөрсөләр ер һелкетеп, ҡоралын ҡаға башланы. Күп тә үтмәне, улар нисек ҡапыл башлаған, шулай туҡтаны һәм майор Ыласыновтың тауышы яңғыраны:

- Полктар! Тураҡат! Бер, ике, өс. Йөҙөң һулға! Ныҡ баҫ!

Ыласыновтың артынан Беренсе полк китте, шунан ҡалған дүртәү үтте. Ғәскәр император ғали йәнәптәре алдынан күҙҙән юғалғас, иғлансы һүҙ алды:

- Хәҙер һәр полктан берәр кеше ҡылыс сабыу оҫталығын күрһәтәсәк, еңеүсегә һарыҡ!

Биш рәт итеп теҙеп ҡаҙалған сыбыҡтар араһына тәүҙә Беренсе полк ҡылыссыһы сыҡты. Аты сабып барған ыңғайға ике яҡта теҙелгән ағас ботаҡтарын сабып өҙә башланы, ләкин берике сыбыҡ "ялтанып ҡалды". Икенсе полктан уның старшинаһы Аралбай Аҡсулпанов атын сыбыҡтар рәтенең башына туҡтатты ла:

- Батша хәҙрәттәренә әссәләмәғәләйкүм! - тип ҡысҡырҙы һәм ҡапыл атының бөйөрөнә типте. Тегенеһе үрәпсеп китте һәм баҫҡан еренән ҡушаяҡлап саба башланы. Старшина шул ыңғайға тәүҙә һулдағы сыбыҡтың осон сабып өҙҙө, шунан уң яҡтағыһын һәм китте лә китте. Аҡсулпанов рәт буйлап барып, һуңғы сыбыҡты ҡырҡты ла "тирмә" алдына килеп туҡтап, баш эйҙе һәм ситкә китте.

Ҡалған өс полктың ҡылыссылары оҫта ине, әммә Аҡсулпановҡа еткерә алманылар. Шуға һарыҡты уртаға сығарып ҡуйғас, туйҙы алып барыусы:

- Кемгә? - тип һораны.

Быңдай ярышты императорҙың күргәне булдымы икән, бәлки, берәйһе һөйләгәндер, һәр хәлдә, һорау бирелгәс тә яуап рәүешендә ике бармағын өҫкә күтәреп, ҡулын сөйҙө. Бүтәндәр шуны ҡабатланы. Тимәк, һарыҡ икенсе булып сығыш яһаған Аҡсулпановтыҡы. Ул йүгереп сыҡты ла, ҡунаҡтар яғына ҡарап,

- Император ғали йәнәптәре, һеҙҙе еңеү һарығының ашына саҡырам, - тине һәм йәлп иттереп һарыҡты үҙенең елкәһенә һалды һәм йүгереп сығып та китте.

**(Дауамы бар).**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

**Ошо көндәрҙә Башҡорт опера һәм балет театрында күркәм бер сара - "Беҙҙең заман геройы" Бөтә Рәсәй телевизион йәмғәт премияһын тапшырыу тантанаһы уҙҙы. Премия 2004 йылда баш ҡала хакимиәте һәм "Вся Уфа" продюсерлыҡ үҙәге тарафынан булдырылғайны, быйыл ул унынсы тапҡыр батыр йөрәкле, ярҙамсыл, яҡшылыҡ һәм кешелеклелек үрнәктәрен күрһәткән замандаштарыбыҙға бирелде.**

# ГЕРОЙҘАР БЕҘҘЕҢ АРАЛА



Телерадиохәбәрселәрҙең милли ассоциацияһы ярҙамы менән федераль кимәлгә үҫеп еткән сараға Башҡортостанда ғына түгел, Рәсәйҙең башҡа төбәктәрендә йәшәгән бихисап изге күңелле кешеләрҙең эштәре тураһында видеояҙмалар төшөрөлгән. Замандаштарыбыҙ араһында үҙе ауыр хәлдә булыуға ҡарамаҫтан, мохтаждарға ярҙам иткән, үҙ ғүмерен ҡурҡыныс аҫтына ҡуйып, аңлыҙ бәлә-ҡазаға тарығандарҙы ҡотҡарған, йәки тормош һынауҙарына бирешмәй йәшәгән, йәмғиәттәге күренештәргә һәм айырым кешеләрҙең ҡайғыһына битараф ҡалмай, буштай ярҙам ҡулы һуҙғандар бар. Мәҫәлән, "Көслө рухлы" тигән номинацияла бүләкләнгән Владимир Максимов бала саҡтан инвалид, ул Һамар ҡалаһында йәшәй һәм коронавирус пандемияһы осоронда мохтаждарға аҙыҡ-түлек ташыған. "Йыл меценаты" номинацияһында вакцинация үткәндәр араһындағы "Сәләмәт Өфө" акцияһы сиктәрендә еңеүсегә фатир бүләк иткән һәм оҙаҡ йылдар Шахмат федерацияһына матди ярҙам күрһәтеп торған Филүс Ишбулатов, "Йылдың социаль акцияһы" номинацияһында тамашасылар һайлауы буйынса "Башҡортостандың яратҡан рәссамдары" проекты етәксеһе Наил Мәхмүтов, "Изге эш" номинацияһында йәшәргә урыны булмаған кешеләргә ил буйынса бушлай хеҙмәттәр күрһәтеүҙе ойоштороған Өфө парикмахеры Татьяна Овсянникова, "Йыл шәфҡәт күрһәтеүсеһе" тип Ҡаҙандан Владимир Вавилов билдәләнде. Ә бына "Батыр йөрәк" номинацияһында Беларустан Егор Лукашев һәм Александр Шевалов еңеүсе тип табылды. Ир-егеттәр подъезда бысаҡ менән ҡоралланған енәйәтсе һөжүменән бер ҡатынды ҡотҡарып алып ҡалған.

Тирә-яҡтағы күренештәргә, хәл-ваҡиғаларға битараф булмағандар үҫмер балалар араһында ла бихисап. Быйыл "Бәләкәй кешенең өлкәндәрсә ҡылығы" тигән махсус номинацияла Дондағы Ростовтан ауылды янғындан ҡотҡарған Дмитрий Евсеев, Тимофей Болдырев, Никита Костромин, Күмертауҙан һуҡыр спортсыға тәүге ярҙам күрһәткән Эдуард Хәкимов, Өфөнән һыуҙа батып барыусыларҙы сығарған Глеб Пахомов, Беларустан ҡустыһын янғындан ҡотҡарған Роман Когодовский, Красноярскиҙан мәкегә төшкән ҡыҙға ярҙамға ташланған Александр Клименко, Мораҡ ауылынан оло йәштәге күршеләрен янғындан ҡотҡарған Арыҫлан Шафиҡов, ДЦП диагнозына ҡарамаҫтан, шиғырҙар яҙған һәм олимпиадаларҙа ҡатнашҡан Өфө ҡыҙы Катя Суворова һәм тоҡ һуғып, ике ҡулһыҙ ҡалһа ла әүҙем тормош алып барған Туймазы малайы Илназ Дәүләтов лайыҡлы наградаларын алды. Бөгөнгө йәш быуындың тәрбиәһеҙлеге тураһында күп һөйләнелгән ваҡытта шундай көслө рухлы, изгелекле, һис уйлап тормаҫтан ауыр хәлдә ҡалған кешеләргә ярҙамға ташланырға әҙер һәм тиҫтерҙәренә өлгө булырҙай балаларыбыҙҙы сәхнәлә күреү шатландырҙы.

"Беҙҙең заман геройы" премияһының төп наградаһын Костроманан Станислав Смирнов, Джамал Гассоян, Иван Потемкин һәм Кирилл Никитин атлы ир-егеттәр алды. Улар күп ҡатлы йорттағы фатирҙарҙың береһендә ут сығып киткәс, фажиғә эсендә ҡалған балаларҙы өсөнсө ҡаттан тәҙрә аша ҡотҡара. Өфө сәхнәһенә өс герой ғына килгәнлер... Кирилл Никитин килеп етә алмаған. Ул хәрби һәм Украинала яраланып, әле госпиталдә дауалана. Замандаштарҙы Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров тәбрикләне: "Кешеләрҙең яҡшы эштәре тураһында тапшырыуҙар булараҡ башланған премия оло ваҡиғаға әүерелде. Уларҙы хәрбиҙәр ҙә, супермендар ҙа түгел, ә ябай кешеләр башҡара. Улар беҙҙең эргәлә йәшәй, әммә кәрәк саҡта ихтыяр көсө, ғәҙеллек, батырлыҡ, ҡыйыулыҡ күрһәтәләр.

Бында 15 йыл элек бер егетте бүләкләгәндән һуң яһаған сығышымдың яҙмаһын күрһәттеләр. Яуапһыҙ ата-әсәһе ҡалдырып киткән бәләкәй ҡыҙға Яңы йыл мөғжизәһен бүләк иткән йәш егеттең шул ҡылығы күңелемә яҡҡайны. Был ваҡиғалар миңә ғүмерем буйы үҙем булып ҡалырға ярҙам итә, быны һис хәтерҙән сығармайым. Бөгөн шул егетте һәм ҡыҙҙы күрергә ине. Хәҙер улар нисек йәшәүен дә белгертегеҙ беҙгә. Был кешеләр тормошобоҙҙо яҡшыртты, беҙгә ярҙам күрһәтте, бәлки, бөгөн улар үҙҙәре ярҙамға мохтаждыр. Тормошта батырлыҡҡа һәр ваҡыт урын бар. Ике йыл беҙ коронавирус менән көрәшәбеҙ, тормош меңәрләгән табиптан, ирекмәндәрҙән торған арҙаҡлыларҙы бүләк итте. Әле махсус операция бара, Донбасс беҙҙең ярҙамды көтә. Меңәрләгән ир-егеттәребеҙ шунда - беҙҙең заман геройҙары. Ошо ҡатмарлы ҡарарҙы ҡабул иткән, шунан тайпылмаған һәм үҙенекенә ирешәсәк Президентыбыҙ - минең өсөн герой", - тине Радий Фәрит улы.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Тыныс тормошта ла батырлыҡҡа урын бар, быға беҙ күптән инанғанбыҙ. Әммә был ғәмле, вайымлы һәм битараф булмаған замандаштарыбыҙҙың күбеһен күреп-танып бөтмәйбеҙ. Ошо йәһәттән, уң йыл дауамында бер Өфө ҡалаһы кимәленән алып, тотош Рәсәй буйлап үҙенең кешелеклеген, яҡшылығын эше менән иҫбат иткән шәхестәрҙе йәмғиәткә таныткан "Беҙҙең заман геройы" ойоштороусыларының хеҙмәте баһалап бөткөһөҙ.**

**Камила ҒӘЛИЕВА.**

МАТУР ХӘТИРӘ




# ҘУРЛАҒЫҘ БЕРЕНСЕ МАЙҘЫ...

**Бөгөнгө 1 Май - Яҙ һәм Хеҙмәт байрамын беҙ бала саҡта ябай ғына итеп "Май байрамы" тип йөрөтәләр ине. Сәйәси әһәмиәте нисек булһа ла, ул ваҡытта быға иғтибар ҙа бирмәгәнбеҙҙер инде, ләкин беҙ уны Яңы йылды ҡаршылағандай көтөп ала инек.**

Байрамға старт 22 апрелдә - Бөтә донъя пролетариаттары юлбашсыһы Владимир Лениндың тыуған көнө айҡанлы үткәрелгән коммунистик өмәлә бирелә торғайны. Беҙ бәләкәй генә ауыл балалары өмәгә ағай-апайҙарыбыҙға эйәреп бара торғайныҡ. Мәктәпкә йөрөмәһәк тә, был ят, әммә күмәк кеше ҡатнашлығында ауылыбыҙҙы сүп-сарҙан таҙартыуға тырма-һенертке күтәреп барыуҙы граждандыҡ бурысы тип иҫәпләгәнбеҙҙер, күрәһең. Бер ғәҙәти көн эсендә ауылыбыҙ "ялт" итеп ҡала. Һуңынан малайҙар йыйылып, 1 Май байрамында ҡатнашыуҙы планлаштырабыҙ. Өлкәнерәктәр (3-4 класс уҡыусылары) шырпы көкөртө тултырып, шартлатыу ҡоралы эшләү мөмкинлеген барлай. Ул еҙ торбанан бөгөп эшләнә, велосипед камераһынан ҡырҡып алынған ҡулайлама ярҙамында ҡаҙау көкөрттө шартлата. Тауышы ҡаты булһа ла ҡурҡыныс түгел. Уны малайҙар теләндә "пугач" тип йөрөтәләр. Минең атай тракторсы булғас, еҙ көбәк табыу бурысы гел миңә йөкмәтелде. Үҫә төшкәс, ысын дары менән ата торған пистолеттар яһағанда ошо тәжрибәбеҙ ярап ҡалды. Иң ауыр мәсьәлә - атай-әсәйгә белдермәй генә кәмендә бер ҡап шырпы табыу. Был беҙҙең ауылда үҫкән һәр бер малайҙың изге бурысы ине.

Байрам көндө иртүк тораһың, байрамса кейенәһең дә, әсәйҙең юлға аҙыҡ-түлек әҙерләгәнен көтәһең. Һәр баланың сумкаһында бешкән ике йомортҡа. Был беҙгә тиклем үҫкәндәрҙән ҡалған ритуал. Ҙур шешәләргә тултырылған һөтлө сәй, май йәки ҡаймаҡ яғылған бер-ике киҫәк икмәк. Иртәнге туғыҙҙар тирәһендә мәктәп янына йыйылабыҙ ҙа ике уҡытыусыбыҙға эйәреп, 5-6 саҡрымда ятҡан урманға китәбеҙ. Урманға инер алдынан аҡланда матур ғына ике ҡайын ҡаршылай. Беренсе туҡталыш мотлаҡ унда. Уҡытыусыларыбыҙ байрам тарихы, башҡа илдәрҙә уның нисек билдәләнеүе хаҡында һөйләй торғайны. Һуңынан, үҫә төшкәс, ябай ауыл уҡытыусыларының завод политинформаторҙарынан ни тиклем көслөрәк булған икәнен аңланым.

Аҙаҡ - тәрлө уйын, шиғырҙар һөйләп ярышыу. Бына шунан башлана ла инде шул хәтлем араға бала елкәһендә аҫылынып килгән аҙыҡ-түлектән ауыҙ итеү. Ниндәйҙер әйтелмәгән команда буйынса бер телем икмәк кенә ашала, сәйҙең дә яртыһы ғына эселә, ә иң мөһиме, йомортҡаның да береһе генә ҡулланыла, сөнки ҡайтышлай тау башына менгәс, тағы бер тапҡыр тамаҡ ялғап алыныла.

Уйнап, күңел булғас, күрше аҡланға күсәбеҙ. Унда икеөс метр диаметрындай таштар үҫә, ә янында ҡарағай ағастары. Шуғалыр ҙа беҙҙең ауыл халҡы был урманды "Ташҡарағай урманы" тип йөрөтә. Бейек-бейек таштарға баҫып, фотоларға төшәбеҙ, ҡыҙҙар, ғәҙәттә, умырзая сәскәһе, ә малайҙар йыуа йыя. Бер-ике сәғәттән, уҡытыусыларыбыҙ беҙҙе барлағас, ҡайтырға сығабыҙ. Юлдағы бейек тауҙы менгәс, бер ниндәй ҙә команда көтмәй, ашарға ултырабыҙ. Һуңынан бер уҡытыусыбыҙ яратҡан йырын күмәкләп башҡарабыҙ: "Ҙурлағыҙ һеҙ беренсе майҙы - яҙ һәм сәскәләр байрамын". Ауылға ике саҡрым ҡалғас, ярыша-ярыша кемуҙарҙан йүгерешәбеҙ.

Бик күп йылдар үтеп, заводҡа эшкә килгәс, балаларҙы эйәртеп демонстрацияларға сыға торғайныҡ. Бер еребеҙ ҙә кәмемәне, ашаламны. Уйлауымса, беҙҙең быуын халҡының балалары ла Май байрамының тарихын, мәғәнәһен аңлайҙыр. Тик һуңғы утыҙ йылда ҡырағай капитализм олигархтары аҡсалары донъя пролетарийҙарын айырыуға өлгәште, уларҙы бер-береһенә ҡаршы ҡуйҙы. Тик беҙ бала саҡта көтөп алған 1 май хеҙмәт, дуҫлыҡ, тыныслыҡ байрамы булып күңелдәребеҙҙә йылы хистәр генә ҡалдырҙы.

**Сәйфулла ӘМИРОВ.**
**Көйөргәҙе районы.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ҒАИЛӘ МЕНӘН...

■ Психологтар раҫлауынса, спорт менән айырым шөғөлләнеүгә ҡарағанда, уны ғаилә ағзаларының дөйөм шөғөлөнә әйләндереү күпкә уңышлыраҡ. Был сәләмәтлек менән бер рәттән, туғанлыҡ ептәрен дә нығытасаҡ, ти ғалимдар. Спорт ололарҙың йәшәү тонусын күтәреп, буйҙарын һомғолораҡ итһә, балалар бәләкәй саҡтан сәләмәт йәшәү рәүешенә өйрәнәсәк. Югинә, ата-әсәләр балаһын спорт секцияһына яҙҙырып та, үҙе спортҡа битараф икән, бала уларға ҡарап, өйҙә ултырыуҙы хуп күрәсәк. Психолог Сьюзен Бартел әйтеүенсә, саф һауала бергәләп уйнау, йәйәүләп йөрөү ҙә сәләмәтлекте лә, ғаиләне лә нығытасаҡ.

■ 2010 йылда төрлө илдәрҙә үткәрелгән халыҡ-ара сәләмәтлек рейтинғы һөҙөмтәләре иғлан ителгән. Был исемлектә илдәр граждандарҙың йәшәү сифаты һәм йәшәү оҙайлығы буйынса билдәләнгән. "МедВести" яҙыуынса, был ике күрһәткес буйынса Япония иң беренсе тора. Икенсе урында - Сингапур, өсөнсө урында - Швейцария килә. Дүртенсе һәм бишенсе урындарҙа - Испания менән Италия. Исемлектең алтынсы урынында Австралия, унан һуң Канада, Андорра, Израиль һәм Көньяҡ Корея килә. Рәсәй был рейтингта 97-се урында тора.

■ Әгәр ҙә бала насар уҡый икән, проблема балала түгел, ә уның әйләнә-тирәһендә булыуы ихтимал, ти эксперттар. Мәҫәлән, кеҫә телефондары йәки телевизорҙары булған балалар тиңдәштәренә ҡарағанда насарыраҡ уҡый. MedikForum яҙыуынса, тикшеренеүҙәр барышында белгестәр дүрт мең баланы тикшергән. Бүлмәләрендә телевизор, DVD-плеер булһа, етмәһә, бала кеҫә телефоны менән әүҙем ҡулланһа, уларҙың уҡыу тиҙлеге бөтөнләй насар булып сыҡҡан. Ә бына музыка ҡоралдарында уйнау балаға, киреһенсә, яҡшы тәьҫир итә икән. Ғалимдар тағы бер үҙенсәлекте асыҡлаған: социаль селтәрҙәрҙә йышыраҡ ултырған бала физика, химия, математиканы ла насарыраҡ үҙләштерә.

■ Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, организмға саҡ ҡына һыу етешмәй башлаһа, шунда уҡ кәйеф насарая, көсһөҙлөк барлыҡҡа килә, фекерләү ҡеүәһе түбәнәйә. Тикшереүҙәрҙең етәксеһе профессор Лоренс Е. Армстронг фекеренсә, ял иткәндә лә, компьютер алдында ултырғанда ла һыу эсергә кәрәк. "Һыуһау тойғоһо беҙ 1-2 процент шыйыҡлыҡты юғалтҡас ҡына барлыҡҡа килә. Әммә был ваҡытҡа организмда һыуһыҙлыҡ һөҙөмтәһендә кире эҙемтәләр башланған була", - ти профессор. Бындай хәл килеп тыумаһын өсөн көнөнә 2 литр һыу эсергә кәрәк. Балалар өсөн был норманың дүрттән бер өлөшө йәки яртыһы ла етә. Был исемлеккә ҡайнар эсемлектәрҙе лә индерергә ярай, тик уларҙың составында кофеин булмаһын. Мәҫәлән, лимон ҡушылған бөтнөк, имбирь, аҡ сәскә сәйҙәре бигерәк файҙалы.

■ Имбир тамырында 3 процентҡа тиклем эфир майҙары һәм күп төрлө аминокислоталар бар. C, A, B1, B2 витаминдары, шулай уҡ цинк, кальций, калий, натрий, тимергә бай был тәмләткес баш мейеһен кислород менән байыта һәм артериаль ҡан баҫымын төшөрә, матдәләр алышыныуҙы көйләй. Имбир сәйен белгестәр бигерәк тә миҙгелле сирҙәр киҫкенләшкән ваҡытта эсергә тәҡдим итә.

ҺАҠЛАНЫҒЫҘ!

**Ер ҡарҙан әрселеп, баҡса эштәре башланыу менән табиптар, шулай уҡ һәр төрлө матбуғат сараларында талпан энцефалиты хаҡында иҫкәртә лә башлайҙар. Минең дә, табип буларак, ошо сирҙе ентекләберәк һүрәтләп биреп, яҡташтарымдың иғтибарын шуға йәлеп итергә ниәтем. Был сир менән осрашмағанға күрәләр ҙә, күптәр уға әллә ни әһәмиәт биреп тә бармай. Яҙғы-йәйге, Алыҫ Көнсығыш йә тайга энцефалиты тигән тағы күп кенә атамалары булған был ауырыуҙы йөктороу бәгзе ваҡыт ғәйәт ауыр эҙемтәләргә, зәғифлеккә, хатта үлемгә лә килтереүе ихтимал. Рәсәй территорияһында киң таралғанлыҡтандыр, уны ҡайһы бер авторҙар "урыҫ энцефалиты" ("Русский энцефалит") тип тә атаған. Башҡортостан да был тарафтан ситтә ятып ҡалмай, әлбиттә.**

# ТАЛПАН ҠУРҠЫНЫСЫ

## һәм уның эҙемтәләре



Латинса "Энцефалон" "баш мейеһе" тип тәржемәләнә. Үҙәк нервы системаһын зарарлаусы сирҙең "энцефалит" (урыҫ телендә - "воспаление головного мозга") тигән төп исеме тап ана шунан килеп сыҡҡан. Был ауырыуҙы барлыҡҡа килтереүсе вирус башлыса талпан тәнендә тереклек итә. Һәр төрлө сығанаҡтарҙағы мәғлүмәттәргә ярашлы, тәбиғәттәге талпандарҙың 20-40 проценты зарарлы була. Вирус был паразиттарҙың быуынынан-быуынына күсеп бара. Бәғзеләр уны "Тайга энцефалиты" тип атаһа ла, был сир дала ерҙәрендә лә йыш осраусан. Ҡан менән туҡланыусы шул паразиттың шайығы аша йөктороп, сысҡан, ҡомаҡ, терпе, тейен һәм башҡа хайуандар, ҡоштар инфекцияның икенсе резервуары булып тора, шул рәүешле вирус тәбиғәттә әйләнеш яһап йөрөй. Был процесҡа кешенең дә килеп эләгеүе ихтимал. Башлыса, тәнгә талпан ҡаҙалыу юлы менән. Әммә, ҡанында вирус булған һыйыр, кәзәләрҙең һөтө аша (ҡайнатмаған көйө эскән хәлдә) йоғоу мөмкинлеге лә юҡ түгел. Медицинала уны "алиментар юл" менән зарарланыу тип атайҙар (яҡынса - 20 процент).

Төрлө статистика күрһәткестәренә ярашлы, Рәсәйҙә йыл һайын, яҡынса 500 мең кешегә талпан ҡаҙалып, уларҙың 2 меңдән ашыуы энцефалит менән сирләп тора. Был һандарға, әлбиттә, медицина учреждениеһына мөрәжәғәт иткәндәр генә ингән. Республикабыҙҙа ла ошо тарафтан хәлдәр бигүк тынысланырлыҡ түгел. Йыл һайын 10 меңдән алып 20 меңгә тиклеп кешегә талпан ҡаҙала. Башҡортостан буйынса 2017 йылда - 22, ә 2018 йылда - 25 кеше был инфекцияны йөктороған. Күпселек осраҡтарҙа енел формала үтеүенә ҡарамаҫтан, уның ауыр төрҙәре хаҡында һәр кемебеҙ белергә тейеш һәм быға битараф ҡалыу ярамай, тип һанайым (Иғтибар итәйек: донъя буйынса статистик мәғлүмәттәргә ярашлы, ҡайһы бер йылдары энцефалиттан үлем осрағының кимәле егерме проценткә барып еткән мәлдәр булған).

Талпан ҡаҙалған яра аша кеше тәненә эләккән вирус күҙәнәктәрҙә бер аҙ үҫешеп алғас, ҡан һәм лимфа тамырҙары буйлап бөтә тәнгә тарала башлай. Уның "яратҡан" урыны - баш һәм арҡа мейеһенең һоро матдәһе (серое вещество). Нервы күҙәнәктәрен зарарлап, уның нормаль эшмәкәрлеген боҙоуы - кешелә ошо сиргә ярашлы һәр төрлө симптоматика (билдәләр) барлыҡҡа килтерә. Барлыҡ ағзаларҙың эшмәкәрлеге, белеүебеҙсә, нервы системаһынан килгән сигналдарға буйһона. Шунлыҡтан, баш һәм арҡа мейеһе өлөштәренең ҡаҡшауы тәндең башҡа мөһим ағзаларына тапшырыла бара. Йөрәк-тамыр, тын алыу системаһы эшләүе насарая. Ошо сирҙән вафат булғандарҙың патолого-анатомик тикшереү мәлендә йөрәк мускулатураһына (миокард), үпкә туҡымаһына, эсәктәргә һәм башҡа ағзаларға ҡан һауған булыуы күҙәтелә.

Ни өсөн әҙәм балаһы талпан ҡаҙала башлау менән уҡ уны алып ташламай һуң (берәй серәкәй йә күгәүен килеп, тәнгә моронон терәгәс тә, беҙ шунда уҡ уға "сәпәй һалып" ебәрәбеҙ бит)? Тикшереүҙәр һөҙөмтәһенә ярашлы, кеше тәненә үҙенең томшоҡсаһын (медицинала "хоботок" тип атала) ҡаҙаған мәлдә талпан, параллель рәүештә, тире нервы рецепторҙарының һиҙеүен юғалттыра торған матдә бүлеп сығара икән (тап хирург операция яһар алдынан һалған новокаин һымаҡ). Шуға күрә беҙ был паразитты тик күпмелер ваҡыттан һуң осраҡлы ғына күреп, йә булмаһа, бармаҡтарыбыҙ ярҙамында һәрмәп, табып алабыҙ. Әлеге вирустың тап ана шул "анестезиялаусы" шыйыҡсала булыуында шик юҡ. Талпан ҡаҙалғандан алып, ауырыу беленә башлағанға тиклем ара (инкубацион осор) яҡынса 8-23 көн самаһы. Ауырыу, ғәҙәттә кинәт кенә башлана. Тән температураһы 39-40 градусҡа етеүе лә мөмкин. Хәл бөтөү, баш ауыртыу, баш әйләнеү, бер нисә мәртәбә ҡоҫтороу, тән һыҙлау, йоҡо насарайыуы ошо сир хаҡында иң беренсе нәүбәттә уйланыуға этәрергә тейеш.

Кешенең йөҙә, муйындары, күҙ алмалары ҡыҙарыуы ла ошо сирҙең билдәләренең береһе. Йөрәк мускулатураһында дистрофик үҙгәрештәр йөрәк тибешенең һүлпәнәйеүенә килтерә. Был - бик етди симптом. Сөнки йөрәктең кинәт кенә туҡталып ҡуйыуы ла ихтимал. Фалиж һуғыуы арҡала, тын алыуҙы тәьмин иткән мускулатураның эшмәкәрлеге насарайыуы ла хәүефле. Ауырыуҙың тағы бер симптомы - яҡтылыҡтан ҡурҡыу (фотофобия). Ҡайһы берҙә менингеаль билдәләр (арҡа һәм елкә мускулатураһының тартышыуы) күҙәтелә. Ауыр осраҡтарҙа хатта кешенең аңы яңылыша башлауы ла ихтимал. Галлюцинация (күҙенә ниҙер күренеү, йә ниндәйҙер тауыштар ишетеү), ишетеү нервылары зарарланыуы, бөтөн тән мускулатураһының тартыша бушлауы ла мөмкин. Бәғзе сирлеләр башын тота алмай ("төшөп барған баш" симптомы), уның аяҡ ҡулдары "тыңламай", тартышҡан килеш ҡатып, ҡайһы берәүҙәрҙең муйыны ҡыйыш хәлдә ҡалыу осраҡтары ла бар. Тел көрмәләү, тауыш бөтөүе лә ихтимал. Бите, ауыҙы салшайыуы, күҙ йөрөтөүсе мускулатурының (глазодвигательные мышцы) эшмәкәрлеге боҙолоу сәбәпле күҙҙәрҙең ҡылыйланып ҡалыуы ла бар. Был сирҙән йүнәлеп киткән кешеләрҙең тәнендә ғүмерлеккә иммунитет һаҡланып ҡала.

Ошо ауырыуҙан һаҡланыуҙың иң яҡшы ысулы - тәнгә бөжәк ҡаҙалмаһын өсөн саралар күреү. Яҙ аҙағында, йәй баштарында баҡсала йә ҡырҙа йөрөгән мәлдә мөмкин тиклем ҡыуаҡ ботаҡтарына теймәй йөрөргә тырышыу яҡшы һөҙөмтә бирә. Ғәҙәттә, талпан үҙе кешегә ташланмай, уның һикереү, осоу һәләте юҡ. Ҡыуаҡ ботаҡтарының осонда ике ҡулын алға һоноп, үҙенең ҡорбанын көтөп ултыра ул. Ботаҡҡа тейеп үтеп барған хайуандарға, кешенең кейеменә "тотоноп", эләгеп китеүсән. Шуға күрә, салбар балаҡтарын, күлдәк еңдәрен резина менән һыҡтырып ҡуйыу хәйерлерәк. Резина итек кейеү ҙә кәнәш ителә. Шулай уҡ балаҡ һәм ең тирәһенә камфора майы йә башҡа төр репеллентттар (бөжәкте ҡурҡытыусы еҫле шыйыҡсалар) һөртөү яҡшы. Эш тамамланғас та, кейемдәрҙе сисеп, эсен тышҡа әйләндереп, ентекләп үҙеңде һәм берберегеҙҙе тәнен һәр яклап тикшереү кәрәк. Бөжәк ҡаҙалған булһа, ғәҙәттә, уны ытмай ғына, нәҙек еп менән быуып алалар. Унан талпанды герметик ябылған бәләкәй шешәгә һалып алып (лаборатория анализы өсөн), шунда уҡ медицина учреждениеһына мөрәжәғәт итергә кәрәк. Юғарыла һанап кителгән һәм башҡа төрлө билдәләрҙең килеп сығыуын көтөп тормаҫтан. Һәр поликлиника талпан энцефалитына ҡаршы иммуноглобулин менән тәьмин ителгән була.

Шулай итеп, баштараҡ әйтелеп киткәнсә, энцефалит менән ҡайнатылмаған һөт аша зарарланыу ихтималлығы ла бар. Шуға күрә, һөттө термик эшкәртеүһеҙ эсеүҙән һаҡланыу кәрәк. Икенсенән, әгәр (талпан ҡаҙалмаған көйө лә) юғарылағы симптомдарҙы үҙеңдә һиҙә башлайһың икән, һис кисекмәҫтән табипҡа барыу, уға яңы һауылған "йылы һөт" эсергә яратыуың хаҡында ла хәбәр итеү мотлаҡ.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ,**
**отставкалағы хәрби табип.**

***✓ Байназаровтар матурлыҡ тыуҙырыуға айырыуса иғтибар биргән. Эйе, өйҙәрен ярата улар. Ә өйөндә яратыу, унда йәшәгән кешеләрҙе һөйөүҙе аңлата. Уңайлы шарттар ҙа, зауыҡ та, тәмле ризыҡтар ҙа яҡын кешеләрең өсөн бит.***

*ДОНЪЯБЫҘ ҠОТО*

# БЫЛ ЙОРТТА...

## хеҙмәт баһалы ла, хөрмәтле лә

**Ауыл ерендә ғаиләнең бер төптән тырышып донъя көтөүен билдәләү ауыр түгел. Уларҙың йорт-ҡураһына күҙ һалыу ҙа етә. Фәғилә һәм Азат Байназаровтарҙың ихатаһына аяҡ баҫыу менән үҙеңде, ысын мәғәнәһендә, әкиәт донъяһына килеп ингәндәй тояһың. Дөрөҫ, тәү ҡарамаҡҡа уларҙың йорто башҡаларҙыҡынан бер нәмәһе менән дә айырылмай. Шулай ҙа... Ауылға йәм өҫтәп, әллә ҡайҙан балҡып, саҡырып ултыра ул. Улай ғына ла түгел. Килеп инеү менән ихаталағы һәр ҡаралты, өйҙәге һәр йыһаз уңған хужа һәм хужабикәнең күңел йылыһын, күҙ нурҙарын һаҡлауын тояһың һәм үҙең дә һиҙмәҫтән, ошо йылы һәм нурлы мөхиткә сумаһың.**



Байназаровтарҙың ауылға ҡайтып, нигеҙ яңыртыуҙарына ике йыл ғына. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, Хәсән ауылының иң уңған һәм татыу ғаиләләренең береһе булараҡ ихтирам яулап өлгөргәндәр.

- Тыуған тупраҡтың тартыу көсө бар, тип юҡҡа ғына әйтмәйҙәрҙер. Ологая килә беҙҙе лә атай-олатайҙарҙың кендек ҡаны тамған, уларҙың эҙен һаҡлаған изге төйәк үҙенә тартты, - ти Азат ағай.

Ғаиләһен етеш тормошта йәшәтеү, улдарын үҙаллы тормош юлына лайыҡлы баҫтырыу маҡсаты менән оҙаҡ йылдар сит тарафта эшләргә тура килгән уға. Камчаткаға тиклем барып еткән ул.

- Өйләнгәс, ғаиләмде Ноябрьскиға алып киттем. Ваҡытлыса, тип кенә уйлаһаҡ та, ун ике йыл йәшәп ташланыҡ. Аҙаҡ Мәләүезгә ҡайтып, Емеш-еләк питомнигы ҡасабаһында йорт һалып индек. Үҙем вахта ысулына күстем, - тип дауам итә ғаилә башлығы.

Тылы ныҡлы булғанға ла тыныс күңел менән хаҡлы ялға сыҡҡансы Себерҙә эшләй ул. Эйе, ҡатынынан уңа Азат Солтанғәли улы. Ғөмүмән, бер-береһен һайлап яңылышмағандар. Улар араһында бер ҡасан да "Был - ҡатын-ҡыҙ эше, быныһы ир-егеттеке" темаһына бәхәс тыумай. Байназаровтар ғаиләһендә ата абруйы ла, әсә наҙы ла, балалар һәм туғандар ҡәҙере лә бар.

- Мохтажлыҡ күрмәй, етеш йәшәһәк тә, улдарыбыҙҙы бәләкәйҙән эшкә өйрәтеп үҫтерҙек, - тип һүҙгә ҡушыла Фәғилә апай. - Бер ҡасан да тик ултырманы улар. Баҡса ла үҫтерештеләр, мал-тыуарҙы ла ҡараштылар, ашарға бешкәнде лә көтөп ултырманылар. Тиҙ генә кем нимә менән ярҙам итә ала, шуны эшләй һала ине. Ҡулынан килмәҫтәйҙе ҡушып, ҡаты талап ҡуйып, эштән биҙҙермәҫкә тырыштыҡ. Әммә эшләгәндәре беҙҙең өсөн булһа, өйрәнгәндәре үҙҙәре өсөн ине. Бөгөн Азамат һәм Илдар улдарыбыҙ - үҙаллы тормош юлында ышаныслы баҫып торған уҙамандар.

Йорт-ҡураның төҙөклөгө, етеш тормошта йәшәүҙәре, әлбиттә, ғаиләнең дөйөм тырышлығы һөҙөмтәһе. Оло йәштә булыуҙарына ҡарамаҫтан, ауылдаштары әле лә уларҙың ҡул ҡаушырып ултырғанын күргәне юҡ. Йәйен баҡсалары еләк-емеш һәм йәшелсәнең мул уңышы, аллы-гөллө сәскәләре менән һөйөндөрә. Иткә "иҙелбай" һарыҡтары аҫраһалар, чех тоҡомло кәзә һөтөнән ҡымыҙын, сырын, ҡуйыртылған һөтөн, ҡатығын эшләйҙәр. Ҡупшы һаҡаллы, итекле фавероль тауыҡтары йорт-ҡураның йәме генә түгел, һыуыҡ климатҡа сыҙамлы ҡоштар йыл әйләнәһенә йомортҡа менән дә тәьмин итә. Умартасылыҡ менән дә шөғөлләнәләр.

- Ҡортсолоҡ Байназаровтарға быуындан-быуынға күсеп килә, тип әйтһәм, бер ҙә арттырыу булмаҫ. Килен булып төшкәндә ҡәйнәм дә умарта тота ине. Хәҙер Азаттың һәм башҡа туғандарының да яратып башҡарған эшенә әйләнде. Аталарынан күрмәксе, улдарыбыҙ, ейәндәребеҙ ҙә умартасылыҡ серҙәренә төшөндө, - ти Фәғилә апай.

Хужабикәнең дә яратҡан шөғөлдәре бик күп. Шулар араһында ғаиләһен тәмле ризыҡтар менән һыйлауҙы, гөл үҫтереүҙе һәм бәйләүҙе әйтмәһә лә, әллә ҡайҙан беленә. Улар тураһында Фәғилә апай сәғәттәр буйы һөйләһә лә арымай. Үҙе генә белгән рецептары, үҙе генә бәйләгән биҙәктәре һәм гөл үҫтереү серҙәре бар. Белгәне менән, әлбиттә, һәр ваҡыт ихлас бүлешергә әҙер.

Сығышы менән Күгәрсен районы Ҡалдар ауылы ҡыҙы ул. Ә был тарафта элек кәзә тотмаған ҡатын-ҡыҙ бик һирәк ине. Бәләкәйҙән яратып башҡарған шөғөлөн хужабикә ташларға уйламай әле. Заказға ла бәйләй. Күҙ нурын һалып дебеттән бәйләгән палантин, кардиган, жилет, шәл һәм косынкалары бик күптәрҙең күңелен йылыта.

Хәҙер ауылда ла ҡаланыҡынан кәм йәшәмәйҙәр. Бөтә уңайлы шарттар ҙа булдырырға тырышалар. Ә Байназаровтар матурлыҡ тыуҙырыуға айырыуса иғтибар биргән. Эйе, өйҙәрен ярата улар. Ә өйөндә яратыу, тәү сиратта, унда йәшәгән кешеләрҙе һөйөүҙе, ихтирам итеүҙе аңлата. Уңайлы шарттар ҙа, зауыҡ та, тәмле ризыҡтар ҙа тап яҡын кешеләрең өсөн бит.

Бына шулай, ҡырҡ йыл иңгә-иң терәшеп йәшәгән Байназаровтар бер-береһен ярты һүҙҙән аңлап, ҡәҙерләп йәшәй. Татыулыҡтарының сере ябай ғына: бер-береһен хөрмәт итә улар. Ә ихтирам бар ерҙә яратыу ҙа, ышаныс та, тоғролоҡ та була.

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

*ФӘҺЕМЛЕ ХИКӘЙӘТТӘР*

# НӘУАДИР ТӘРЖЕМӘҺЕ

**XIX-XX быуат саттарында милли мәҙәниәт өлкәһендә тәрән эҙ ҡалдырыусыларҙың береһе, билдәле башҡорт уҡымышлыһы Хәбибназар Үтәки ғәрәп әл-Ҡолйубиҙың "Нәуадир" йыйынтығын төрки теленә ирекле тәржемәлә баҫтырып сығара. Уның "Нәуадир тәржемәһе" китабы XIX-XX быуат башҡорт мәғрифәтселек әҙәбиәтенең айырылғыһыҙ биттәрен тәшкил иткән әһәмиәтле ҡомартҡы булып тора. Ошо китаптан ҡайһы бер фәһемле хикәйәттәрҙе "Киске Өфө" гәзитен уҡыусыларға тәҡдим итәбеҙ.**

### Аҙға ла ҡәнәғәт бул!

Бер ирҙең дүрт улы булған. Әлеге ир ауырып киткәс, уғылдарының береһе бүтәндәренә: "Атайыбыҙҙың мираҫынан һис нәмә алмау шарты менән уны тәрбиә ҡылырға ҡайһығыҙ яуаплы була? Әгәр ихтыяр итһәгеҙ, мин тәрбиәләрмен, мираҫтан да һис нәмә алмаҫмын", - тигән. Бүтәндәре ризалыҡ биргәндән һуң был улы яуаплы булып, атаһын тәрбиә ҡыла башлаған. Атаһы вафат булғас та уны тәрбиәләп ерләй һәм мираҫтан да өлөш алмай.

Берҙән-бер көндө төшөндә был егеткә берәү: "Һин фәлән ергә бар, йөҙ динар аҡса табырһың, әммә уның бәрәкәте булмаҫ", - тигән. Йоҡоһонан уянғас та ул был ваҡиғаны ҡатынына һөйләй. Ҡатыны: "Алайыҡ", - тиһә лә, егет: "Бәрәкәте булмағас - алмайым", - ти. Икенсе кис йоҡларға ятҡанында теге кеше йәнә төшөнә инеп: "Шул урындан ун дирһәм аҡса ал, тик уның да бәрәкәте булмаҫ", - ти. Ҡатыны алырға кәңәш итһә лә: "Ҡуй, бәрәкәте булмағас, алмайым", - ти. Өсөнсө кис төшөндә йәнә: "Фәлән урынға бар, бер динар аҡса табырһың, ул инде бәрәкәтле булыр", - тиҙәр. Егет йоҡоһонан уянғас та әйтелгән урынға бара ла бер динар аҡса ала. Ҡайтып килгәнендә бер кешегә осрай, уныһы ҡулына ике балыҡ тотоп алған. "Һатам", - тигәс, егет: "Быларҙы күпмегә һатаһың?" - тип һорай. Балыҡсы: "Бер динар", - ти. Егет бер динар аҡсаһын биреп, балыҡтарҙы өйөнә алып ҡайта. Балыҡтарҙы таҙартҡанда һәр икеһенең эсенән ҡиммәтле һәм зиннәтле ынйылар килеп сыҡҡан, ти. Егет ынйыларҙы падишаһҡа илткән. Падишаһ сикһеҙ күп мал биреп, был егет бик байығып киткән. Был иһә егеттең атаһына итәғәтле булыуы, уға хеҙмәт ҡылыуы, уның аҙ булһа ла бәрәкәтле нәмәгә ҡәнәғәт була белеүе арҡаһында мөмкин булған.

**Илшат ЯНБАЕВ әҙерләне. (Аҙағы).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Ғәфү итергә өйрән

**Тормошоғоҙҙағы иң мөһим кеше менән мөнәсәбәттәрҙе яҡшыртыу өсөн төпкө аңда ғәфү итергә өйрәнергә кәрәк. Шундай күнекмә:**

- Уңайлы итеп ултырығыҙ, күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ, өс тапҡыр тәрән итеп тын алығыҙ һәм яратҡан тыныс картинаны күҙаллағыҙ.
- Тыныс үҙән буйлап китеп бараһығыҙ тип күҙ алдына килтерегеҙ, һуңынан бейек, ныҡ ағаслы урман эсенә инәһегеҙ, артабан инде тыныс күлле аҡланға килеп сығаһығыҙ.
- Һыу ситенә килеп, үҙегеҙҙең ундағы сағылышығыҙға ҡарағыҙ.
- Уйығыҙҙа ғына: "Мин һине үткәндәге барлыҡ уңышһыҙлыҡтар һәм хаталар өсөн ғәфү итәм. Һинең мине ғәфү итеүеңде үтенәм", - тиегеҙ. Һуңынан: "Мин һине яратам", - тип өҫтәп ҡуйығыҙ.
- Шул уҡ юл менән кире ҡайтығыҙ. Күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ һәм ысынбарлыҡҡа ҡайтығыҙ. Яҙыуҙы бер яҡ ситкә алып ҡуйып, күнекмәне хәҙер үк эшләһәгеҙ ҙә була.

Һеҙҙе был тормошта алға алып барған нәмә - ул аң. Тап аң өс өлөшкә бүленә. Һеҙ әле генә уның бер өлөшө - төпкө аңығыҙ менән мөнәсәбәттәрегеҙҙе көйләнегеҙ. Хәҙер аңлы өлөшкә күсәйек. Уның менән тиҙерәк бәйләнешкә инергә тәҡдим итәбеҙ. Күнекмәне эшләрҙән алда уны бер нисә тапҡыр уҡығыҙ һәм хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ.

- Уңайлы итеп ултырығыҙ, күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ, өс тапҡыр тәрән итеп тын алығыҙ һәм яратҡан тыныс картинағыҙҙы күҙ алдына килтерегеҙ.
- Кеше бейеклегендәге ҙур көҙгө алдында тороуығыҙҙы күҙаллағыҙ. Һеҙ унда үҙегеҙҙең тотош сағылышығыҙҙы күрәһегеҙ.
- Күргән күренеш һеҙгә оҡшамай. Был образда үткәндәрҙең барлыҡ етешһеҙлектәре һәм хаталары бар. Сағылышты һыҙып ташлағыҙ ҙа уйығыҙҙан ғына: "Мин һине ғәфү итәм", - тип ҡабатлағыҙ.
- Һеҙ уңға боролаһығыҙ, тулы әйләнеш яһайһығыҙ һәм ҡабат үҙегеҙҙең көҙгөләге сағылышығыҙ менән осрашаһығыҙ. Был юлы ул камил күренә. Уйығыҙҙа ғына: "Ғәфү ит мине", - тип ҡабатлағыҙ һәм "Мин һине яратам", - тип өҫтәп ҡуйығыҙ.
- Күҙҙәрегеҙҙе асып, ысынбарлыҡҡа әйләнеп ҡайтығыҙ.

Юғары аңығыҙ менән бәйле һуңғы аҙым бик ябай, уның менән быға тиклем осраштығыҙ һәм нисек эшләнгәнен беләһегеҙ. Шуға ҡарамаҫтан, күрһәтмәләр менән яҡшылап танышығыҙ һәм иҫегеҙҙә ҡалдырығыҙ.

- Уңайлы итеп ултырығыҙ, күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ, өс тапҡыр тәрән итеп тын алығыҙ һәм яратҡан тыныс картинаны күҙ алдына килтерегеҙ.
- Бүлмәгә кеше инә, уйығыҙҙа ғына уны үҙегеҙ итеп күҙаллағыҙ, әммә буйығыҙ бейегерәк һәм нурға сорналғанһығыҙ.
- Уйығыҙҙа ғына үҙегеҙҙең Юғары аңығыҙ менән күҙгә-күҙ ҡарашығыҙ һәм: "Зинһар, мине үткәндәрҙәге хаталар һәм уңышһыҙлыҡтар өсөн ғәфү ит", - тип әйтегеҙ. Бер аҙ паузанан һуң: "Әйҙә, бер-беребеҙҙе ғәфү итәйек", - тип өҫтәгеҙ.
- Юғары аңығыҙҙы ҡосаҡлағыҙ һәм: "Мин һине яратам", - тиегеҙ.
- Уйығыҙҙа ҡабат урындыҡҡа ултырығыҙ, күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ һәм ысынбарлыҡҡа ҡайтығыҙ.

Тормошоғоҙҙо байытыу юлына ошо аҙымды яһап, һеҙ күңел күтәренкелеге кисерерһегеҙ. Ул йәшәү энергияһы ағымының көсәйеүенә бәйле. Көтөгөҙ, тиҙҙән яҡшы көндәр килер.

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**



### 2 МАЯ
### ПОНЕДЕЛЬНИК
### РОССИЯ 1

5.00 Х/ф "Деревенская история". [12+]
9.00 Х/ф "Кавказская пленница, или Новые приключения Шурика". [6+]
10.40 По секрету всему свету.
11.00 Праздник Ураза-Байрам. Прямая трансляция из Московской Соборной мечети.
12.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
13.15 Сто к одному.
14.55, 16.00, 17.55, 19.00 Т/с "Акушерка. Новая жизнь". [16+]
21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.20 Х/ф "Золотой папа". [16+]
1.20 Х/ф "Любовь по найму". [12+]
4.40 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 "С праздником Ураза-байрам!" Концерт. [0+]
8.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).
8.15 "Сәләм".
9.00 "Ураза Байрам". Прямая трансляция из Уфимской Соборной мечети "Ляля-Тюльпан".
10.00 "Иман нуры". Концерт. [12+]
11.00 Новости недели (на рус.яз).
11.45 Специальный репортаж. [12+]
12.00, 2.45 Спектакль "Юсуф и Зулейха". [12+]
14.15, 5.00 "Бай". [12+]
14.45 "Башкортостан в годы Великой Отечественной войны". [12+]
15.15 История одного села. [12+]
15.30 Х/ф "Радуга над деревней". [16+]
16.45 "100 имен Башкортостана". [12+]
17.15 "Рожденный для славы". [12+]
18.15 Пофутболим? [12+]
19.00, 20.30 Концерт Нефтекамской филармонии. [12+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
21.15 Полезные новости. [12+]
21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).
22.00 Спортивная история. [12+]
23.00 Ап-асыҡ. [12+]
23.30 Теге өсәү! [12+]
0.00 Х/ф "Радуга над деревней". [12+]
2.00 Бәхетнамә. [12+]
5.30 Счастливый час. [12+]

### 3 МАЯ
### ВТОРНИК
### РОССИЯ 1

5.25 Х/ф "Бывшие". [12+]
9.20 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
12.00 Х/ф "От печали до радости".[12+]
14.55, 16.00, 17.55, 19.00 Т/с "Акушерка. Новая жизнь". [16+]
21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.20 Х/ф "Хрустальное счастье". [12+]
1.20 Х/ф "Новая жизнь Маши Соленовой". [12+]
4.54 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]
8.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).
8.15 "Сәләм".
9.15 Республика LIVE #дома. [12+]
9.45 "Дорога к храму". [0+]
10.15 "МузКәрәҙ". [6+]
10.30 "Гора новостей". [6+]
10.45 Истории в табличках. [6+]
11.00, 2.00 Бәхетнамә. [12+]
12.00 "Между небом и землей". [12+]
13.45 БашГост. [12+]
14.15 "Автограф". [12+]
14.45 "Башкортостан в годы Великой Отечественной войны". [12+]
15.15 История одного села. [12+]
15.30, 0.00 Х/ф "Ожидания полковника Шалыгина". [12+]
17.15 "Рожденный для славы". [12+]
18.00 Тормош. [12+]
19.00, 20.30 Концерт Назифы Кадыровой. [12+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
21.15 Полезные новости. [12+]
21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).
22.00 Пером и оружием. [12+]
23.00 Ап-асыҡ. [12+]
23.30 Теге өсәү! [12+]
2.45 Спектакль "Моя звезда". [12+]
4.30 Автограф. [12+]
5.00 Башҡорттар. [6+]
5.30 Счастливый час. [12+]

### 4 МАЯ
### СРЕДА
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
0.00 Т/с "Екатерина. Взлет". [12+]
1.00, 1.50 Т/с "Земский доктор. Возвращение". [12+]
2.40, 3.40 Т/с "Версия". [16+]
4.26 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]
8.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).
8.15 "Сәләм".
9.15 Республика LIVE #дома. [12+]
9.45 Спортивная история. [12+]
10.15 История в граффити. [6+]
10.30 "Гора новостей". [6+]
10.45 Истории в табличках. [6+]
11.00, 2.00 Бәхетнамә. [12+]
12.00, 2.45 Спектакль "Песнь о любви". [12+]
14.00 "Алтын тирмә". [12+]
14.45 "Башкортостан в годы Великой Отечественной войны". [12+]
15.15, 5.15 История одного села. [12+]
15.30, 0.00 Х/ф "Отряд особого назначения". [12+]
16.45 Д/ф "Эвакогоспиталь". [12+]
17.15 "Рожденный для славы". [12+]
18.00 Тормош. [12+]
19.00, 20.30 "Любезники, любизар". Концерт, посвященный 210-ой годовщине Победы в Отечественной войне 1812 года. [12+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
21.15 Полезные новости. [12+]
21.30 Новости (на рус. яз).
22.00 Историческая среда. [12+]
23.00 Ап-асыҡ. [12+]
23.30 Теге өсәү! [12+]
4.30 Әлләсе... [12+]
5.30 Счастливый час. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз). [0+]

### 5 МАЯ
### ЧЕТВЕРГ
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 18.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
0.00 Т/с "Екатерина. Взлет". [12+]
1.00, 1.50 Т/с "Земский доктор. Возвращение". [12+]
2.40, 3.40 Т/с "Версия". [16+]
4.26 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]
8.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).
8.15 "Сәләм".
9.15 "Честно говоря". [12+]
10.00, 16.45 Моя планета Башкортостан. [12+]
10.30 "Гора новостей". [6+]
10.45 Истории в табличках. [6+]
11.00, 1.45 Бәхетнамә. [12+]
12.00 "Шаймуратов генерал". [12+]
14.00 "Алтын тирмә". [12+]
14.45 Посмотрим... [6+]
15.30 Х/ф "Ночь председателя". [16+]
17.15 Д/ф "Знаменосец Победы". [6+]
18.00 Тормош. [12+]
19.00 Вечерний телецентр.
20.00 Полезные новости. [12+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
20.30 Интервью. [12+]
20.45 Специальный репортаж. [12+]
21.30 Новости (на рус. яз).
22.00 Республика LIVE #дома. [12+]
23.00 Ап-асыҡ. [12+]
23.30 Теге өсәү! [12+]
0.00 Х/ф "Ночь председателя". [0+]
2.30 "Лунные вечера Айсылу". [12+]
4.45 Үткән ғүмер. [12+]
5.15 История одного села. [12+]
5.30 Счастливый час. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз). [0+]

### 6 МАЯ
### ПЯТНИЦА
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
0.00 Т/с "Екатерина. Взлет". [12+]
1.00 Х/ф "Буду верной женой". [16+]
4.33 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]
8.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).
8.15 "Сәләм".
9.15 Республика LIVE #дома. [12+]
9.45 Д/ф "Яблоневый цвет. Мечта Хасана Ахтямова". [6+]
10.30 "Гора новостей". [6+]
10.45 Истории в табличках. [6+]
11.00 Бәхетнамә. [12+]
12.00 "Семь девушек". [12+]
13.30 "Йома". [0+]
14.00, 4.15 "Алтын тирмә". [0+]
14.45 Посмотрим... [6+]
15.30, 0.00 Х/ф "Внимание, говорит Москва!" [12+]
17.15 Д/ф "Один из тринадцати". [12+]
18.00, 5.00 Тормош. [12+]
19.00 Вечерний телецентр. [12+]
20.00 Полезные новости. [12+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
20.30 Интервью. [12+]
20.45 "Башҡорт йыры-2022". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]
21.30 Новости (на рус. яз).
22.00 БашГост. [12+]
23.00 Ап-асыҡ. [12+]
23.30 Теге өсәү! [12+]
2.00 Спектакль "Долгое-долгое детство". [12+]
5.30 Мы дети войны. [12+]
5.45 "Рожденный для славы". [12+]
6.30 Новости (на рус. яз). [0+]

### 7 МАЯ
### СУББОТА
### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
12.00 Доктор Мясников. [12+]
13.05 Х/ф "Этим летом и навсегда". [12+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Поворот на счастье". [12+]
1.10 Х/ф "Двойная ложь". [12+]
4.34 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]
8.00, 18.30 Новости (на баш. яз).
8.15 "Сәләм".
9.15 История одного села. [12+]
9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]
9.45 Д/ф "Соловецкие юнги". [6+]
10.30 "Гора новостей". [6+]
10.45 Истории в табличках. [6+]
11.00 Үткән ғүмер. [12+]
11.30 Башҡорттар. [6+]
12.00, 2.30 "Суд матери". [12+]
14.00 "Дарю песню". [12+]
15.30, 0.00 Х/ф "Внимание, говорит Москва!" [12+]
17.15 Д/ф "Последняя высота". [12+]
18.00 Хазина. [0+]
19.00 "Бала-саға". [6+]
19.45 Ради добра. [12+]
20.00 Полезные новости. [12+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
20.30 "Байыҡ-2022". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]
21.30 Новости (на рус. яз).
22.00 Историческая среда. [12+]
22.30, 1.45 Новости недели (на баш. яз).
23.15 "Башҡорт йыры-2022". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]
4.15 "Млечный путь". [12+]
5.15 "Башкортостан в годы Великой Отечественной войны". [12+]
5.45 "Рожденный для славы". [12+]
6.30 Новости (на рус. яз). [0+]

### 8 МАЯ
### ВОСКРЕСЕНЬЕ
### РОССИЯ 1

5.20 Х/ф "Мамина любовь". [12+]
7.15 Устами младенца.
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00 Вести.
11.55 Фестиваль детской художественной гимнастики "Алина".
13.30 Х/ф "Большой". [12+]
18.00 Песни от всей души. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30 Д/ф "Великая неизвестная война". [12+]
3.25 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]
8.00 Новости (на баш. яз).
8.15 "Сәләм".
9.15 "Йома". [0+]
9.45 "Истории Победы". [6+]
10.30 "Гора новостей". [6+]
10.45 "Сулпылар". [6+]
11.15 "Вопрос+Ответ=Портрет". [6+]
12.00, 0.30 Спектакль "Матери ждут сыновей". [12+]
14.00 "Дарю песню". [12+]
15.30, 23.00 Х/ф "Прощание славянки". [12+]
17.15 Д/ф "Огненный танкист". [12+]
18.00 "Дорога к храму". [0+]
18.30 "Башҡорт йыры" представляет... [12+]
21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]
21.30 Новости недели (на рус.яз).
22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]
2.30 Историческая среда. [12+]
3.00 "Краски войны". [12+]
3.30 "Млечный путь". [12+]
4.30 "Башкортостан в годы Великой Отечественной войны". [12+]
5.00 "Рожденный для славы". [12+]
6.00 Итоги недели (на рус. яз). [0+]

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**4 май "Эҙләнем, бәғерем, һине"** (Т. Миңнуллин), мелодрама. 12+
**5 май "Шәмсетдин һәм Шәмсура"** (Т. Ғиниәтуллин әҫәре буйынса), новелла. 12+
**6 май Премьера! "Рөстәмдең сере"** (Ғ. Ҡотой, С. Баженова инсц.). 12.00 6+
**7 май "Һөйәһеңме-һөймәйһеңме..."** (Ф. Бүләков), трагикомедия. 18.00 12+
**8 май "Шәмсетдин һәм Шәмсура"** (Т. Ғиниәтуллин әҫәре буйынса), новелла. 18.00 12+
**9 май "Ат уйнатып алдан бара..."** (З. Бураҡаева), театрлаштырылған тамаша. 18.00 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**2 май "Аладдин"** (И. Казакова), мюзикл. 12.00 6+
**"Ал яулыҡлы тирәккәйем"** (С. Айытматов), драма. 16+
**3 май "Чиполлино"** (Дж. Родари), мажара. 12.00 6+
**5 май "У ковчега в восемь"** (У. Хуб), ғаилә өсөн спектакль. 11.00 6+
**6 май Премьера! "Звезда героя"** (Ф. Әхмәҙиев, О. Мусина), драма. 12+
**7 май Премьера! "Звезда героя"** (Ф. Әхмәҙиев, О. Мусина), драма. 18.00 12+
**8 май "Үлмәҫбай"** (М. Кәрим). 18.00 12+
**9 май Премьера! "Звезда героя"** (Ф. Әхмәҙиев, О. Мусина), драма. 18.00 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**Башҡорт опера һәм балет театрының Бәләкәй сәхнәһендә:**
**2 май "Гуси-лебеди"** (А. Чалухиди). 12.00, 14.00 0+
**3 май "Гадкий утенок"** (Г.-Х. Андерсен). 12.00, 14.00 0+
**4 май "Лиса-сирота"** (О. Штырляева). 12.00, 14.00 0+
**8 май "Живи!"** (Р. Сванидзе). 12.00, 14.00 6+
**9 май "Живи!"** (Р. Сванидзе). 18.00 6+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**5 май "Письма Победы"** концерт бушлай. Филармонияның 8(347)2-577-888 телефонына шылтыратып яҙылырға. 6+
**7 май "В ожидании чуда. Органный космос"** буласаҡ әсәйҙәр өсөн концерт. 13.00 0+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**5 май "Йыр өсөн һәм тыуған ер өсөн - мин фронтҡа китәм, иптәштәр!"** "Ашҡаҙар" төркөмө концерты. 6+
**6 май "Эх, күгәрсенкәйҙәрем..."** (Ф. Бүләков), комедия. 18.00 12+
**7 май "Служили два товарища"** музыкаль-әҙәби лекторий. 12.00 0+
**"Трагедия в Сокольниках"** (А. Рева), тоткон балалар хәтирәләре. "Маскарад" балалар театр студияһы. Инеү бушлай18.00 6+
**8 май "Три письма"** (Р. Юлтаев), кинофильм. Инеү бушлай. 14.00 6+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**4-6 май "Беҙҙең өйҙөң йәме"** (М. Кәрим). 12.00, 14.00 6+
**7 май "Считаю до пяти"** (М. Бартенев), әкиәт. 13.00 0+
**8 май "Эх, Өфө ҡыҙҙары!"** (И. Абдуллин), музыкаль комедия. 12+
**9 май "Әллә яңылыш, әллә яҙмыш"** (Т. Миңнуллин), трагикомедия. Инеү бушлай. 17.00 16+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**5 май "Шайморатов генерал"** (Ф. Бүләков), драма. 12+
**6 май "Тау артында ниҙәр бар?"** (Т. Ғиниәтуллин, Н. Ғәйетбай инсц.). 12+
**7 май "Йәнкисәк"** (Т. Килмөхәмәтов). 12+
**9 май "Парлы яңғыҙҙар"** (Д. Сәлихов), драма. 18.00 12+

✓ *Мөхәббәт арҡаһында еңелгә әйләнмәгән ауыр хеҙмәт юҡ ул.*
*(Джордано Бруно).*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 1 МАЙ - ЯҘ ҺӘМ ХЕҘМӘТ БАЙРАМЫ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**16-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Таба. Аш. Йәнәй. Тау. Ике. Алҡа. Тамаша. Уҡыусы. Игәт. Көн. Ойошма. Тромб. Авар. Ҡамсы. Литр. Бик. Айнытҡыс. Йома. Штык. Алма. Нгве. Ынйы. Сик.

**Вертикаль буйынса:** Уҡытыусы. Айытҡолова. Балан. Табыш. Ыласын. Ант. Байғусҡаров. Ышаныс. Икмәк. Бюст. Шәйхетдинов. Качкаев. Олатай. Артыш. Алама. Ыҙма.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1443 һижри йыл.*

| Май (Шәүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 2 (1) дүшәмбе | 4:07 | 5:37 | 13:30 | 18:25 | 20:49 | 22:19 |
| 3 (2) шишәмбе | 4:05 | 5:35 | 13:30 | 18:26 | 20:51 | 22:21 |
| 4 (3) шаршамбы | 4:03 | 5:33 | 13:30 | 18:27 | 20:53 | 22:23 |
| 5 (4) кесе йома | 4:01 | 5:31 | 13:30 | 18:28 | 20:55 | 22:25 |
| 6 (5) йома | 3:59 | 5:29 | 13:30 | 18:29 | 20:57 | 22:27 |
| 7 (6) шәмбе | 3:57 | 5:27 | 13:30 | 18:31 | 20:59 | 22:29 |
| 8 (7) йәкшәмбе | 3:55 | 5:25 | 13:30 | 18:32 | 21:01 | 22:31 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Апрель айында тыуған көндәрен билдәләүсе - **Өфө районы** Шамонино ауылынан Әлиә Ғәйнетдинова, Вәсилә Имамова, Альбина Хәсәнова, Дилә Хәсәнова, Рина Хисмәтуллина, Рәмилә Шәрипова, Светлана Миңлеәхмәтова, Әлфиә Фәйзуллина, Лилиә Барлыбаева, Лиана Санъярова, **Шишмә районы** Түбәнге Хәжәт ауылынан Ләйсән Төхвәтуллина, **Әбйәлил районы** Ҡужан ауылынан Ғәйфулла Хәйруллин, Байым ауылынан Зилдә Ғәскәрова, **Күгәрсен районы** Мораҡ ауылынан Диана Шәйәхмәтова, **Өфө ҡалаһынан** Роза Зиннәтшина һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ! Ҡоростай ныҡлы һаулыҡ, ҡыуаныс-шатлыҡтарға тулы оҙон ғүмер теләйбеҙ. Яҡындарығыҙҙың изгелеген күреп, һәр эшегеҙҙә уңыштарға өлгәшеүҙән һәм яҡшы уй-теләктәрегеҙҙең тормошҡа ашыуынан кинәнес тойоп йәшәгеҙ!

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

ЙӘШЕЛ ДАРЫУХАНА



# МУЛЛАЯН ҮЛӘНЕ

**Башҡорттарҙа "муллаян үләне", "туғай яраны" тип йөрөтөлгән һәм Башҡортостанда киң таралған был сәскә русса "герань луговая" тип атала.**

Халыҡ дауаханаһында муллаян үләне лә, был сәскәнең ҡанһыу ҡыҙыл яран, һаҙ яраны кеүек төрҙәре лә бер үк - шешенеүгә ҡаршы, йоғошһоҙландыра, ҡурыштыра, һыҙланыуҙы баҫа, ҡанды туҡтата торған сифаттарға эйә. Дауаланыу өсөн үләне, сәскәһе һәм тамыры ҡулланыла. Был үләндәр ярҙамында яңы барлыҡҡа килгән яман шештәрҙе, һынған һөйәктәрҙе, гастрит, энтерит, өҫкө тын юлдары ауырыуҙарын, аҙыҡ менән ағыуланыу, дизентерия, йоҡоһоҙлоҡ, ревматизм, подагра, стенокардия һәм тахикардия, ауыҙ ҡыуышлығының лайлалы ҡатламы шешенеүе, ангина, аналь һәм енси ағзаларҙа үтә тишекле яралар, тиренең эренле яраларын дауалайҙар. Алопеция - сәс ныҡ ҡойолғанда үлән бешкән һыу менән башты йыуалар. Яран бөйөрҙәге һәм бәүел ҡыуығындағы таштарҙы бөтөрөргә лә ярҙам итә.

**Шизофрения.** 2 балғалаҡ ҡанһыу ҡыҙыл яранға 2 стакан ҡайнатылған һыу ҡойорға, 8-10 сәғәт төнәтергә (төнгөлөккә ҡалдырыу уңайлы). Һәр 2-3 сәғәт һайын 1-әр ҡалаҡ эсергә. Был төнәтмә ауырыуҙың йоҡоһон яҡшырта, ҡуҙғыусанлығын баҫа.

**Полиартрит, ревматизм, подагра, остеохондроз.** Шулай уҡ үрҙә килтерелгәнсә әҙерләнгән төнәтмәне башҡа дауаланыу саралары менән бергә ҡулланыу тоҙ ултырған организмды таҙартырға ярҙам итә. Уның менән ауырыуҙың торошо яҡшырғанға тиклем дауаланалар. Төнәтмәне эсеүҙән тыш, бер үк ваҡытта һыҙлаған быуындарға сылатҡыстар яһау кәрәк. Әйткәндәй, ҡанһыу ҡыҙыл яран йәки муллаян үләненән бындай сылатҡыстар һынған һөйәктәрҙе тиҙерәк уңалтырға ла ярҙам итә.

**Бөйөрҙөң таш ауырыуы.** 10 грамм (2 балғалаҡ) киптереп ваҡланған тамырҙарға 1 стакан һыу ҡойорға һәм ҡайнар хәлгә еткереп, тағы 7-8 минут талғын утта тоторға. Шунан 1 сәғәт төнәтергә, дауа 1 стакан тулы булһын өсөн ҡайнатылған һыу өҫтәп ҡойорға. Көнөнә 4-5 тапҡыр ашарҙан алда 2-шәр ҡалаҡ эсергә. Был сара таштарҙы йыуып сығармай, ә иретеүе менән отошло.

**Стенокардия.** 5 ҡалаҡ киптерелгән муллаян үләненә 300 мл ҡайнар һыу ҡойоп, 2-3 сәғәт төнәтергә. Көнөнә 4-5 тапҡыр 1-2 ҡалаҡ эсергә.

**Үпкәнән ҡан төкөрөү, балаятҡы һәм геморроидаль ҡан килеүҙәр.** Тиҙ арала ҡан килеүҙе туҡтатыу өсөн һәр 2-3 сәғәт һайын яңы үләндең 20-30 тамсы һутын эсергә кәрәк. Танау ҡанаһа, үләндең һутына мансылған мамыҡ тығырға. Яңы үлән булмағанда тамырҙарынан ҡуйы төнәтмә әҙерләргә кәрәк (1-2 ҡалаҡ тамырға 1 стакан һыу ҡойоп, 5-7 минут ҡайнатырға). Һыуынғансы төнәтергә, ҡан килеү туҡтағансы һәр 2-3 сәғәт һайын 1-2 ҡалаҡ эсергә.

**Онкология.** Шештәрҙең бөтә төрҙәренән һыу урынына үләндең һыуыҡ төнәтмәһен эсәләр: 1 ҡалаҡ үләнгә 2 стакан ҡайнатып һыуытылған һыу ҡойоп, 8 сәғәт төнәтергә һәм көн дауамында эсергә.

**Тура эсәк яман шеше (рак).** Тигеҙ өлөштә муллаян үләнен, һыу боросо үләнен, балан сәскәһен ҡушырға. Йыйылманың 1 ҡалағына 100 мл ҡайнар һыу ҡойоп, йылымыс булғансы төнәтергә һәм һөҙөргә. Был төнәтмәгә 1 балғалаҡ ҡырҡколас (кровохлебка) тамыры төнәтмәһен ҡушырға. Шунан балалар өсөн бәләкәй груша менән аналь тишеккә индерергә. Быны эсәктәргә төп таҙарыныу сараларын ҡулланғандан һуң көнөнә 2-3 тапҡыр эшләү кәңәш ителә, мөмкинлек булмағанда төнгөлөккә бер тапҡыр булһа ла үтәү кәрәк (күпмелер ваҡыт үткәндән һуң башҡа микроклизмалар менән сиратлаштырырға).

**Иҫкәрмә.** Ярандарҙы ҡулланырға ярамаған осраҡтар юҡ, шулай ҙа уны ҡандың йәбешкәклеге юғары булғанда, тромбофлебит, шулай уҡ эсәктең тонуста булмауы һәм ҡартлыҡҡа бәйле эс ҡатыу, юғары әселекле гастрит ауырыуҙары менән яфаланғанда ҡулланырға кәңәш ителмәй.

АФАРИН!



# БАШҠОРТ ТЕЛЕНДӘ ЯҘАМ!

**23 апрелдә тотош Башҡортостан һәм башҡорттар күпләп йәшәгән төбәктәрҙә, сит илдәрҙә сираттағы "Башҡорт теленән халыҡ-ара диктант - 2022" акцияһы үтте. Был сара йыл һайын онлайн һәм офлайн форматта уҙа һәм йылдан-йыл күберәк ҡатнашыусыны йыя. Телдә башланғыс кимәлдә белеүселәр менән бергә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров та диктант яҙҙы. Төбәк Башлығы йылдан-йыл сарала ҡатнашыусылар һаны артыуын билдерҙе һәм быны ҡаҙаныш тип билдәләне.**

"Башҡорт телен һаҡлау һәм өйрәтеү беҙҙең өсөн мөһим бурыс. Тап шуның өсөн үҙем дә диктант яҙырға килдем, Хөкүмәт ағзалары, министрҙар ҙа килде. Сөнки беҙҙең өсөн был уртаҡ маҡсат, бер эш", - тине ул.

Радий Фәрит улы һуңғы тапҡыр башҡорт теленән диктантты дүртлегә яҙыуын, әммә ул ваҡытта ныҡлап әҙерләнмәүен, шуға хаталар ебәреүен, быйыл иһә юғары баһаға өмөтләнеүен белдерҙе Башҡортостан юлдаш телеканалына интервьюнында. Шулай уҡ ул социаль селтәрҙәрҙә таһсораттары менән бүлешеп: "Диктант минә еңел бирелмәне. Әммә бик тырышам, үҙемдең туған телемде юғалтырға теләмәйем. Беҙ туған телдә уҡытыу заманса методикаларға нигеҙләнһен өсөн барыһын да эшләйбеҙ. Ләкин бында баҫым булырға тейеш түгел, сөнки тап баҫым кире һөҙөмтә бирә. Кеше үҙ туған телен өйрәнергә ынтылһын өсөн шарттар, яҡшы методик һәм техник программалар, йәмғиәттә мәҙәниәт тыуҙырырға кәрәк. Беҙ туған телебеҙҙә һөйләшергә оялырға тейеш түгелбеҙ, шул уҡ ваҡытта республикала йәшәүсе телдә һөйләшкән башҡаларҙы ла ихтирам итергә тейешбеҙ", - тип яҙҙы.

Диктант яҙыуҙың төп аудиторияһы булып, ғәҙәттәгесә, Башҡорт дәүләт университеты торҙо һәм унан старт бирелде. Башланғыс белемле ҡатнашыусылар өсөн Ҡаһым түрә тураһындағы текстан өҙөктө Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың халыҡ артисы Хөрмәтулла Үтәшев уҡыны. Башҡорт телендә иркеле аралашыусылар өсөн Рәсәй Федерация Советы ағзаһы Лилия Ғүмәрова "уҡытыусы" булды, ә төньяҡ-көнбайыш диалектындағы тексты уҡыу Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Марсель Сәлимов иңенәятты. Сәғәт 11-ҙә БЮТ телеканалында, "Бәйләнештә" социаль селтәрендә һәм Телеграм-каналда текстар тура эфирҙа уҡылды. Дикторҙар сифатында "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы - 2022" еңеүсеһе Мирас Ишдәүләтов (башланғыс кимәл), Башҡортостан Башлығы Хакимиәте етәксеһенең беренсе урынбаҫары Урал Килсенбаев (юғары кимәл), М. Ғәрәев исемендәге Башҡорт тарихи-мәҙәни үҙәктең баш белгесе Гүзәл Нурыева (төньяҡ-көнсығыш диалект) сығыш яһаны.

Башҡорт теленән диктантҡа Өфө ҡалаһының үҙәкләштерелгән китапханалар системаһы ла ҡушылды. Теләүселәр 10, 13, 20, 26, 41-се китапханаларҙа үҙ белемен һынап ҡараны. Текстарҙы яҙыусы Лилиә Һаҡмар, артистар Алмас Ғафаров менән Рәмил Иҡсанов, уҡытыусылар Рәғиҙә Сәйфуллина менән Флорида Баҡыева уҡыны. Барлыҡ ҡатнашыусыларға ла электрон һәм ҡағыҙ сертификаттар бирелде. Диктанттың рәсми һөҙөмтәләре 30 көндән һуң билдәле буласаҡ.

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

## КҮҢЕЛЕНДЕ БАЙЫТ




**Байрам көндәренән алда Башҡортостандың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова һәм баш ҡалала урынлашҡан мәҙәни учреждениелар етәкселәре журналистар менән осрашты. Улар был ун көнлөктә уҙғарылған төрлө тамаша-сараларҙың барыһында ла йәштәр "Пушкин картаһы"н файҙаланып ҡатнаша алыуы хаҡында һөйләне.**

"Пушкин картаһы" программаһына Башҡортостан былтыр сентябрь айында ҡушылды. Әммә ошо ҡыҫҡа ғына арауыҡ эсендә лә был программаға республиканың 213-ләп йәш кешеһе теркәлгән, улар дөйөм алғанда 200 миллион һумға торошло 585 мең билет һатып алып өлгөргән. Быйыл 14-тән 22 йәшкә тиклемгеләрҙең был махсус картаһына 5-әр мең һум аҡса һалынған. Башҡортостандағы 347 учреждение маҡсатлы рәүештә саралар ойоштора һәм уларҙың мәҙәни, рухи үҫешен хәстәрләй. Май байрамдарында ла йәштәр "Пушкин картаһы" менән барлыҡ сараларҙа ҡатнаша аласаҡ.

- Рәсәй халыҡтарының мәҙәни мираҫы йылын уҙғарыу буйынса ойоштороу комитеты ултырышында вице-премьер Татьяна Голикова ун көнлөктә "Пушкин картаһы" менән уҙғарырға, тип иғлан иткәйне. Был ялдарҙа бик ҡыҙыҡлы саралар үтәсәк һәм уларҙың теҙмәһе менән министрлыҡтың рәсми сайтында, "Башҡортостандың мәҙәни донъяһы" сайтында танышырға мөмкин. Бөгөн йәштәр менән эшләү бик мөһим. Ҡайһылары бер тапҡыр ҙа беҙҙең театр-филармонияларҙа булғаны ла юҡ ине, "Пушкин картаһы" ярҙамында был хәл үҙгәрә башланы. Бөгөн республиканың барлыҡ төр учреждениелары тиерлек, был программаға ингән һәм сентябрҙән балалар сәнғәт мәктәптәре лә ҡушылырға тейеш, - тине мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова.

Өфөләр өсөн баш ҡалалағы театрҙар, музейҙар, китапханалар, филармониялар һәм башҡа мәҙәниәт учреждениелары төрлө байрам саралары, тамашалар тәҡдим итә. Бар урында "Пушкин картаһы" менән иҫәпләшергә, ҡайһыларында бушлай ҙа ҡатнашырға мөмкин буласаҡ.

## ҠУРАЙСЫЛАР ЯРЫША



**Ғата Сөләймәнов исемендәге Республика ҡурай байрамына ғаризалар ҡабул итеlә башланы. Быйыл сара 13-14 майҙа Октябрьский ҡалаһында ойошторола.**

Башҡорт милли музыка ҡоралын пропагандалау һәм популярлаштырыу, башҡарыу традицияларын һаҡлау һәм артабан үҫтереү, ғаилә ижады традицияларын үҫтереү маҡсатындағы ярышта ҡатнашыуға үҙешмәкәр һәм профессиональ солистар, ҡурайсылар ансамблдәре саҡырыла. Улар өс йәш категорияһында башҡарыу оҫталығын күрһәтергә тейеш. 12 йәшкә тиклемге һәм 12-16 йәшлек башҡарыусылар бер турҙа ярыша: ике музыкаль әҫәр (оҙон көй һәм ҡыҫҡа көй) менән сығыш яһай. 16 йәштән өлкән ҡурайсылар өсөн конкурс ике турҙа уҙғарыла. Был йәш категорияһында үҙешмәкәр артистар дүрт әҫәр башҡара. Ҡурай класы буйынса урта һәм юғары һөнәри белеме булған профессиональ музыканттар алдында оҙон көй уйнау бурысы тора.

Ғаризалар 10 майға тиклем ontrcnt@bk.ru, oktb-kultura @mail.ru электрон адрестарына ҡабул ителә. Белешмәләр өсөн телефон: 8 (347) 289-65-50 - Республика халыҡ ижады үҙәге, 8 (34767) 6-61-22, 6-28-30 - Октябрьский ҡалаһы ҡала округы хакимиәтенең мәҙәниәт бүлеге.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЯҘҒЫ БОҘҒА...

## ярҙай булһа ла ышанма

✤ Донъяның төҙөклөгө лә, боҙоҡлоғо ла ҡатындарҙан.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

✤ Ни өсөн беҙ юғалтҡандан һуң яңынан табылған әйбергә ҡыуанабыҙ, ә гел генә янибыҙҙа булғанда уны шәйләмәйбеҙ икән?

**(Изге Августин).**

✤ Мөхәббәт арҡаһында еңелгә әйләнмәгән ауыр хеҙмәт юҡ ул.

**(Джордано Бруно).**

✤ Ҡыйығы насар ябылған өйгә һыу үткән кеүек, аҡылы теүәл булмағандың башына ла нәфсе тигәнең үтеп инеп кенә тора.

**(Будда).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Искәндәр исемле йәш суфый һөйләгәндәрҙән: "Беҙ йыш ҡына Әнүәр суфыйҙың йортона киске намаҙға йыйылабыҙ, киске ашты бергәләп ашайбыҙ. Ләкин Әнүәр суфый бер ваҡытта ла башҡалар менән бер табынға ултырмай. Ул бер мөйөшкәрәк барып ултыра, берәүгә лә эргәһенә яҡынларға рөхсәт итмәй һәм алдына тәрән һауыт ултыртып, унда һалынған аҙыҡ менән аҡрын ғына ризыҡлана. Табындағылар уның был холҡона аптырай, ләкин бер ниндәй аңлатма ла бирә алмай. Ҡайһы берәүҙәргә был оҡшамай, улар: "Әнүәр суфый тәкәббер, изге түгел, ул үҙен башҡалар алдында һауалы тота..."- тип тә әйтеп ҡуя. Ә бына мин был өлкән, аҡыллы суфыйҙың сәйер ҡыланышын аңларға теләнем. Кис һайын ул ултырған урынға аҡрынлап яҡыная барҙым, яҡыная барҙым. Берҙән-бер көндө мин уға тамам яҡынланым һәм уның алдындағы һауыттың буш икәнлеген күрҙем. Ләкин ул һауыттан ризыҡ алып ашаған хәрәкәттәр яһауын дауам итте. Ҡыҙыҡһыныуымды еңә алманым һәм унан: "Һеҙҙең был ҡыланышығыҙҙың сере ниҙә: ни өсөн һеҙ һауытығыҙҙа ризыҡ булмаһа ла - ашаған, кәсәгеҙҙә һыу булмаһа ла һыу эскән булып ҡыланаһығыҙ? Ниңә шул тиклем етди, изге күңелле була тороп, үҙегеҙҙе кешеләргә һауалы итеп күрһәтергә тырышаһығыҙ?" - тип һораным. Ул миңә шулай тип яуапланы:**

**- Әгәр ҙә минең турала тышҡы билдәләремә ҡарап ҡына фекер йөрөтәләр икән, әйҙә, мине һауалы, тәкәббер тип уйлаһындар. Кешене уның тышҡы йөҙөнә, кейеменә, тошона ҡарап ҡына баһалауҙан да ҙурыраҡ гонаһ юҡ. Былай эшләү - тимәк, изге кешенең эске донъяһын мыҫҡыл итеү ул. Һай аҡыллы кешеләр һәр ваҡыт һай нәмәләргә ҡарап һығымта яһар, уның ҡарауы, улар изге кешенең эсендә булғанды бысрата алмаҫ..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә Ғәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
Мөхәрририәт:
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ООО "СПУТНИК-ЮГ"
нәшриәтендә баҫылды
(453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури урамы, 4, офис 203).

**Телефондар:**
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99
Матбуғат таратыу 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
29 апрель 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 3387
Заказ - 537